ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

29-5 сентябрь-октябрь (һарысай-ҡарасай)

2018

№39 (821)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Беҙ ҙә булдырабыҙ!**



4

**Маҡтауҙарҙан...** баштар әйләнмәһен




5

**Инвесторҙар кәрәк...** Беҙҙең талаптарға күнгәндәре



8-9

**Һабантуй байрамының...** башҡорт мифологияһына бәйле аңлатмаһы



12-13

**ТВ-программа** 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 4 октябрҙән 14 октябргә тиклем 2019 йылдың тәүге ярты йыллығына гәзит-журналдарға ташламалы хаҡ менән арзаныраҡҡа яҙылыу ун көнлөгө иғлан ителә. Ошо мәлдә республиканың һәр ҡалаһында-ауылында ВО665 индекслы "Киске Өфө"гә - 532 һум 14 тингә, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм I - II төркөм инвалидтары - 478 һум 56 тингә яҙыла алаһығыҙ. Был мәғлүмәтте йәнәшәгеҙҙәге дуҫ-иштәрегеҙгә, туғандарығыҙға ла еткерһәгеҙ ине. Әйҙәгеҙ, ошо ун көнлөктә "Киске Өфө"гә лә дәррәү яҙылайыҡ, тип саҡырабыҙ.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Картлығың шатлыҡмы?

***Ғәлимйән ИШБУЛАТОВ, РСФСР-ҙың почетлы мәғариф хеҙмәткәре, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, хеҙмәт ветераны, Бөрйән районы Байназар ауылы:*** 1931 йылғымын, һуғыш балалары быуыны ни күрһә, шуны күреп үҫтем. Һуғыштан һуң да әле тормош тиҙ генә яҡшырып китмәне, ләкин ауырлыҡтарға ҡарамай, ул осор балалары уҡырға, белем алырға атлығып торҙо. Мин дә ауылда 7 класты бөткәс, 1947 йыл Өфөләге 9-сы башҡорт мәктәбендә белем алыуҙы дауам иттем. Тарих, йәмғиәтте өйрәнеү фәндәренән 47 йыл балалар уҡыттым, шунын 25 йылы төрлө мәктәптәрҙә директор булып эшләнем. Ҡатыным да уҡытыусы булды. Ҡыҙғанысҡа, күптән түгел беҙҙе ташлап китеп барҙы. 4 ул үҫтерҙек, бөтәһе лә юғары белемгә эйә булып, етәксе эштәрҙә эшләйҙәр. Өлкәне Азамат атҡаҙанған энергетик, Марат менән Иршат - фән кандидаттары. Салауат улым - ауылда, минә күрше генә торалар. Бер үҙем йәшәһәм дә, яңғыҙ иткәндәре юҡ, йортомдан кеше өҙөлмәй: балалар, ейән-ейәнсәрҙәр ялға ҡайта, күрше-күлән, ауылдаштар килеп инә, хатта күрше ауылдарҙан таныш-тоноштар килеп сыға: кемгә кәңәш-төңәш, кемгә һүҙ ярҙамы кәрәк, кемдер хәл белергә инә... Буш ултырырға, моңайырға ваҡыт юҡ: баҡса тотам - картуф сәсәм, емеш-еләк ағастарын тәрбиәләйем, йәшелсә үҫтерәм... Байназар ауылы тарихын яҙып, китап итеп сығарҙым. Әле үҙебеҙҙең яҡын аралар шәжәрәһе буйынса эшләйем. Йәмәғәт эштәре лә тынғылыҡ бирмәй: байтаҡ йылдар район башҡорттары ҡоролтайы рәйесе булдым, әле ветерандар советын етәкләйем. Яңғыҙ булһам да, тормош-көнкүреш шарттарына ла зарланмайым. Төҙөүселек эштәре таныш булғас, йорт эсендә ҡала уңайлыҡтары булдырып алдым, газ яғам, һыу килеп тора. Кер йыуыу машинаһы ла уңған килен кеүек эшләп ташлай. Бешеренергә, йыйыштырырға социаль хеҙмәткәр килә, килен дә ашҡа саҡырып ҡына тора. Бына шулай йәшәп ятам әле, зарланырға урын юҡ. Дөрөҫөн әйткәндә, ҡартлыҡтың шатлығы - сәләмәтлегең, үҙ аяҡтарыңда йөрөп ятыуың, ни менәндер мәшғүл булыуың һәм өлкәнәйгән көнөндә лә кеше көнлө булып ултырмауың. Балаларың да ҙур терәк, ләкин бөгөнгө заманда балалары булып та яңғыҙлыҡ тойғоһо кисереп йәшәгәндәр күп. Берҙән, был замана ғибрәттәренең береһе булһа, икенсе яҡлап, уларҙы үҙ тормошоң өлгөһөндә кешелекле һәм дә кеселекле кеше итеп тәрбиәләй алыуға ла бәйлелер, тип уйлайым.

**(Дауамы 2-се биттә).**



*Беҙ "Киске Өфө"нө уҡыйбыҙ, ти Хәйбулла районы ағинәйҙәре.*

ӘЙТКӘНДӘЙ...

## ӨЛКӘНДӘРҘЕҢ...

### тағы бер матур ғәҙәте

**Был өлкән апайҙар фотоға төшөү өсөн генә түгел, ә ысынлап та уҡыған өсөн ҡулдарына алған гәзитте. "Киске Өфө"нөмө, башҡа баҫманы йә китаптымы, улар, йәғни өлкән быуын кешеләре, ошо аҡ ҡағыҙға яҙылғандан айырылмай. Шуның өсөн нурлылар, йәш сырайлылар, матурҙар. Улай ғына ла түгел: улар мәғлүмәтле, аҡыллы, фекерле лә.**

Әлбиттә, был өлкән апайҙар уҡыған саҡта мейе эшкә егелә, мәғлүмәт анализлана, хәтерҙә ҡала, аңға һеңдерелә икәне тураһында уйланғаны ла юҡтыр. Уҡыу уларҙың бала саҡтан ҡанға һеңгән матур холоҡ үҙенсәлеге, ғәҙәте бит инде ул. Шундай мәғлүмәт еткерәйек ошондай матур ғәҙәткә эйә һәм эйә булмағандар иғтибарына: немец геронтология һәм гериатрия йәмғиәте президенты Манфред Гоголь аҡылды, шулай уҡ йәшлекте һаҡлау өсөн мотлаҡ аҡ ҡағыҙҙан уҡырға кәңәш итә. "Кеше ыңғай хис-тойғолар бүләк итә торған китап йә гәзит уҡырға тейеш, - ти ул. - Сөнки уҡыған саҡта нервылар һәм организмдағы башҡа күҙәнәклектәр араһында айырым бәйләнеш өлкәләре булдырыла. Уҡый торған баҫма ыңғай хис-тойғо тыуҙырырлыҡ булһа, мейе эшмәкәрлегә әүҙемләшә, ә инде ул ҡыҙыҡһыҙ булһа - мейе эшмәкәрлеге түбәнәйә. Ә мейе эшмәкәрлеге әүҙемлеге теүәл аҡыл һәм йәш сырайҙы тәьмин итә лә инде..."

Ошо аҡылды тотайыҡ һәм республикалағы үҙегеҙ өсөн нәшер ителгән милли баҫмаларыбыҙҙы алдырайыҡ, таратайыҡ, ярҙам итәйек, тип кенә әйтергә теләгәйнек. Өлкәндәргә генә түгел, йәштәргә лә төбәлә һүҙҙәребеҙ.

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА.**

12+

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР




# КҮҘӘТЕҮҘӘР

***62-се күҙәтеүем.*** Ҡыштың тәүге көнө. Ҡар юҡ. Йәдкәр Бәширов "Бөйөк Башҡорт иле" тигән китабында беҙҙең эраға тиклем боронғо ата-бабаларыбыҙҙың ике тапҡыр бер быуатлыҡ ҡоролоҡ ваҡытында Себергә, Иран яҡтарына күсенеп, йөҙ йылдан һуң кире Уралтауға әйләнеп ҡайтыуҙары хаҡында яҙа. Ирандағы ҡурай уйнаусы бәшкәрттәр шул замандан тороп ҡалғандыр, тигән фараз да бар. Ул замандарҙа Ағиҙел һәм башҡа йылғалар бөтөнләй кипкән. Ағиҙел кипкәс, Кама менән Волга ла ҡороған бит инде. Ҡоролоҡто боронғо башҡорттар "ҡара ҡыш" тип атаған. "Ҡарыш" һүҙе шунан килә. Күрәһең, кешегә иң насарҙы теләү ҙә шул ҡара ҡыш теләүгә бәйлелер.

Аҫаба башҡорттоң мотлаҡ белергә тейеш булған өс шартының береһе - йондоҙҙарға ҡарап эш итеү. Күрәһең, йондоҙҙарҙың телен аңлаған ата-олаталарыбыҙ ҡара ҡыш килеүен алдан белеп, уны үткәреү өсөн әҙерләнеп, ҡоролоҡ әжәленән ҡотолғандыр. Ит, һөт, емеш-еләк ризыҡтары киптереү тәжрибәһе тап шул замандан килә. Халҡыбыҙ ул заманда ҡоролоҡ килгәндә мәмерйәләрҙә һыу запасы һаҡлау серен дә белгән. Йондоҙҙар телен белмәүсе ҡәүемдәр барыһы ла юҡҡа сыҡҡан.

Синопниктар хәбәр итеүенсә, ошо көндәрҙә ҡар яуасаҡ, Аллаһ бойорһа...

***63-сө күҙәтеүем.*** Малай саҡта эттәрҙең бағана, ағас төптәренә һарып йөрөүен мәҙәк итеп кенә күрә инем. Баҡтиһәң, улар ошо рәүешле йәшәгән ерҙәренә хоҡуғын белдерә икән. Бүреләр ҙә шул рәүешле үҙ биләмәләренең сиген билдәләй. Ҡоштар иһә икенсе ғаилә башлығының һайрау тауышы ишетелгән ерҙә оя ҡора алмай. Биләмә сиген билдәләүҙә рекордты бесәйҙәр ҡуя. Мыяузаттар яраусын күмеп, быны менән уларҙың оҙағыраҡ һаҡланыуын, йәғни оҙағыраҡ ваҡытҡа есен һаҡлауын һәм "сик һаҡсыһы" булып хеҙмәт итеүен тәьмин итә.

Эттәр, бүреләр, ҡоштар, бесәйҙәр донъяһында барыһы ла көйләнгән. Дөрөҫөрәге, бөйөк тәбиғәт уларҙы үҙ биләмәләрен һаҡлау инстинкты менән ошо рәүешле яралтҡан. Кешеләрҙең күбеһенә ер биләмәһе бөтөнләй кәрәкмәй. Донъялар үҙгәреүгә өс тиҫтәгә яҡын ваҡыт үтте: халҡыбыҙҙың нисә проценты бушлай бирелгән пай еренә документ алып, межалаған икән?

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**
**(Дауамы бар).**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Картлығың шатлыкмы?

**(Башы 1-се биттә).**

***Лира ЯҠШЫБАЕВА, яҙыусы, Р.Өмөтбаев, Ж.Кейекбаев һәм М.Буранғолов исемендәге премиялар лауреаты:*** Ысын тормош пенсияға сыҡҡас башлана, тигән лаҡапҡа ышанам, сөнки тормошом шундай миҫалдарҙың береһе. Дөрөҫ, пенсияға тиклемге тормошома ла зарланмайым: яратҡан эшем, татыу, матур ғаиләм - кешегә тағы ни кәрәк? Ирем шул тиклем яҡшы күңелле кеше ине, хәстәрлекле, балалар өсөн өҙөләп торған атай, ышанаслы, һөйөклө ир булды. Тәүҙә - улымды, унан иремде юғалтыуҙан миһең өсөн тормош туктағандай тойолдо, донъям ҡараңғыланды. Ошо фажиғәләрҙе кисермәгән булһам, яҙышыуға тотоноп та китмәҫ инемдер ул. Аллаһы Тәғәлә сәбәп ҡылды, тимәк, әлеге бушлыҡтан, күңел төшөнкөлөгөнән араланы, икенсе һулыш бирҙе. Хәҙерге ваҡытҡа 20-ләп китабым сыҡты. Әҫәрҙәрем 3 - 6-сы кластарҙың туған әҙәбиәт дәреслектәренә индерелде, шөкөр, уҡыусыларым ихтирамын, иғтибарын тойоп йәшәйем. Быны менән мин, Хоҙай һаҡлаһын, ниәмәгәләр өлгәшеү өсөн кеше мотлаҡ күңел тетрәнеүе кисерергә тейеш, тип әйтмәйем, әммә өлкән йәштәгеләрҙең күбеһе ғүмер буйы бергә йәшәгән үҙ яртыһын - йәмәғәтен юғалтҡас, тормош мәғәнәһен дә юғалта, төшөнкөлөккә бирелә. Илаһ тарафынан уға, бәлки, артабан да оҙаҡ йылдар йәшәргә насип иткәндер, ә ул күңеле менән "теге " донъяға әҙерләнә башлай, йәшәүгә ҡыҙыҡһыныуын юғалта, быны менән ул төшөнкөлөккә бирелеп, ете гонаһтың береһен ҡылыуға дусар ителә.

Эйе, пенсиянан һуң һәр кем дә яҙыусы ла булып китә алмай, тик һәр кешенең дә ниәмәгәләр һәләте, ҡыҙыҡһыныуы була. Шул "һалам"ға тотон әйҙә. Күптәр ейән-ейәнсәрҙәренә әүрәй, уларға дөрөҫ тәрбиә биреү ҙә сауаплы бурыс. Ә шулай ҙа бөтә өлкәндәр өсөн дә ҡулай сара - динебеҙгә килеү. Фанатиктарса тимәйем, ә бына Ҡөрьән уҡырға өйрәнеү, быны өсөн ғәрәп алфавитын үҙләштереү, аят-доғалар ятлау, уларҙың мәғәнәһенә төшөнөү, мәсеткә йөрөү һәр кемдең ҡулынан килә, теләк кенә булһын! Бына шул саҡ ҡартлыҡ донъяһы иман нуры яҡтыртыр, йәшәгән һайын йәшәгe килеп торор. Ҡартлыҡ ул, әйткәндәй, көндәр буйы өйҙә ултырыу ҙа түгел, кем үҙен юлда яҡшы тоя - сәфәрҙәргә сығыу ер-һыу күреп, донъя гиҙеү ҙә күңелгә шатлыҡ өҫтәй. Беҙ әле бына Башҡортостандан 10 кеше Махачкалала йөрөп ятабыҙ: Зәйнулла ишан мәсетенә килдек. Бында кисергәндәрҙе һөйләп тә бөтөрлөк түгел, килергә кәрәк. Һәр ерҙең үҙ хозурлығы. Каспий диңгеҙен әҫәрләнеп күҙәттем. Ошондайын илаһи тәбиғәт хазиналарын, ғөмүмән, ер йөҙөн, йыһан системаһын, ундағы камиллыкты, төҙөклөктө бар иткән бары бер көс - ул Хоҙай Тәғәлә генә икәнлегенә ҡат-ҡат инанаһың...

***Фәриҙә БАЙТИМЕРОВА, ауыл уҡытыусыһы:*** Ҡартлығың - шатлығыңмы, тигәнде уйлаһаң, был ике төшөнсәнең бер-береһенә ҡапма-ҡаршы мәғәнәләре күҙ алдына килә. Ҡартлыҡ - шатлыҡ булырға мөмкинме һуң, тип ҡаршылаша күңел. Бер яҡтан, шулай һымаҡ: теләйһеңмеюҡмы, физик кәр юғала, битте, тирене йыйырсыҡтар баҫа, теш ҡойола, сәс ағара, күҙ күрмәй, ҡолаҡ ишетмәй башлай...

Хәҙер шуға ла мин көҙгөгә һирәк күҙ һалам, югиһә, көйшәйеп, танығыһыҙ була барған ямаҡай бер әбей ҡарай ҙа тора. Икенсе яҡтан, ҡайны берәүҙәр бик матур ҡартая бит: йыйырсыҡтары ла килешеп тора үҙенә, сәстәре лә көмөш төҫөнә буялған кеүек, күҙҙәре нурланып тора, һәр саҡ шат күңелләләр. Бындай кешеләр ғүмер буйы рәхәт, бәхетле йәшәгәндер кеүек тойола миңә. Ундайҙарҙы ҡартлығында ла шатлыҡтар һыуа оҙата бара. Ә бына минең кеүектәргә ни эшләргә? Шәхсән үҙем насар кеше лә түгелмен, тик ғүмер буйы бер етешһеҙлегемдән зыян күрҙем: уйлағанымды әйтәм. Шуға ла тынғылыҡ күрмәйем. Шуға ла, күрәһең, йәмһеҙ ҡартаям. Хәйер, бит-килбәтең түгел, күңелең матур булһын, тип йыуатам да үҙемде, тик күңел тигәнең күберәк яманды күрергә генә тора. Нисек көймәйһең инде ҡайһы бер хәлдәргә ҡарап. Бына, мәҫәлән, минең күршелә йәшәгән кешенең миҫалы. Ул бабай япа-яңғыҙы тороп ҡалды, әбейе донъя ҡуйҙы, ә ошо уҡ ауылда үҙҙәрен генә ҡайғыртып ғүмер иткән балалары уны белмәй ҙә күрмәй ҙә тиерлек. Хәҙер ҡартайышып, үҙҙәре пенсия йәшенә еткән улдарын бик кәрәк саҡта ғына саҡыртып ала атай кеше. "Килен алғансы - үҙ улың, килен алғас - кеше улы" тип белмәй әйтмәгәндер халыҡ аҡылы. Килендәре лә оло кеше, ҡайны тигән изге төшөнсәне бөтөнләй белмәй; ике-өс һыйыр һауып, бер сынаяҡ аҡ та килтереп китмәйҙәр, ә аҡса кәрәкһә, тындары бөтөп килеп етәләр. Шундай хәлгә нисек өндәшмәй түҙер инегеҙ, йәмәғәт? Яҡшы күренәйем, йә булмаһа, үҙҙәренә лә килер ҡартлыҡ - аңларҙар әле, тип килешеп йәшәргә, бер ни булмағандай, шулар менән йылмайып-көлөп һөйләшергәме? Юҡ инде, үҙҙәренең кем икәнлектәрен, улар хаҡында башҡалар ни уйлағанды белеп йөрөһөндәр, тип, ҡайһы саҡта тәнҡит һүҙе лә әйтеп алам. Ҡартайған атаәсәһен ҡараған, уларға ҡәҙер иткәндәргә ахирәттә йәннәт ҡапҡалары асылып торор, әжер-сауаптары ла уларға бер нисә тапҡырға арттырып ҡайтарылыр, тиелә хәҙистәрҙең береһендә. Тик йәл, хәҙистең ни икәне бөтөнләй ҡараңғы әлеге атайҙың балаларына. Күреп-белеп торамы икән Тәңре был хәлдәрҙе?..

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# ИҢ ҘУР БӘХЕТ -
## балалар иғтибары



**Ҡартлыҡ- шатлыҡ түгел, тиелһә лә, ғүмер өлөшөнөң һәр миҙгеле лә шатлыҡ булмаҫҡа мөмкин икәнлекте лә беләбеҙ. Шул уҡ ваҡытта һәр миҙгелдең дә бәхетле була алыуы бар. Ә инде ҡартлыҡтың физик мөмкинлектәрҙе сикләүе генә уны шундай әйтем әйтеүгә алып киләләр.**

Тап бына ошоноң өсөн дә кешелекте Хоҙай бала-сағалы итеп яралтҡандыр. Әҙәм затын дауам итеү кеүек хайуани инстинкттар ҡоло ғына түгел беҙ, ә бала-сағаларға кешелек ҡанундарын тапшырып ҡалдырыусылар ҙа.

Күптән түгел бер билдәле шәхестең ҡарауһыҙ яңғыҙ ятыуы хаҡында ишетеп, эсем бошто. Социаль хеҙмәткәр килеп киткәндә генә тилмереп көтөп ята икән. Балалары ла бар ағайҙың. Тик улар атайҙарына юлды онотҡан...

Ошо хәлдән һуң мин иң беренсе бурысыбыҙ балаларҙы тәрбиәләү, уларҙа үҙебеҙгә - ата-әсәләргә ҡарата мөхәббәт, хөрмәт уята белеү икәнлеккә тағы бер ҡат инандым. Ҡартлыҡтың иң ҙур бәхете балалар иғтибары һәм ихтирамы икән.

Оло кешенe бәхетһеҙ итәм тиһәң, уны яңғыҙ ҡалдыр. Ә бәхетле итәм тиһәң, балаларың, ейәндәрең, булә-бүләсәләрең, күрше-күләнең, туғандарың менән бәхетле ит. Бер ауыҙ йылы һүҙ, бер яғымлы ҡараш, бер кәсә эҫе сәй менән бәхетле ит.

...Шундай тәьсирле әҫәрҙәр яҙған кеше, ғүмеренең ҡайһы баҫҡыстарында балаларын "төшөрөп ҡалдырҙы" икән, тип уйланам, баш ватам...

**Әлиә ИСМӘҒИЛЕВА.**

# Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Рөстәм Хәмитов Башҡортостан Хөкүмәте ултырышы үткәрҙе. Унда тәбәктәге миграция торошо мәсьәләләре, шулай уҡ 2025 йылға тиклем республикала сәләмәт йәшәү рәүешен формалаштырыу стратегияһы, "БР Киң мәғлүмәт саралары үҫеше" дәүләт программаһы ҡаралды.

✓ Ҡытай Халыҡ Республикаһы Сычуань провинцияһы делегацияһы Башҡортостанға эш сәфәре менән килде. Осрашыуҙарҙа ике төбәк араһында инвестиция үҫеше мәсьәләләре ҡаралды. Ҡытай делегацияһы үҙҙәре өсөн энергетика, аҙыҡ-түлек сәнәғәте, ауыл хужалығы, фармакология һәм халыҡ-ара туризм өлкәһе ҡыҙыҡ булыуын белдерҙе. Төбәктәрҙең иҡтисади һәм инвестицион мөмкинлектәре күрһәтелде. Сычуань провинцияһы менән сауҙа-иҡтисади, фәнни-техник һәм башҡа өлкәләрҙә хеҙмәттәшлек итеү тураһында килешеү 2017 йылда төҙөлгәйне.

✓ БР Хөкүмәте Премьер-министры Рөстәм Мәрҙәнов Вьетнамдың Бария-Вунгтау провинцияһы делегацияһы менән осрашты. Осрашыуҙа ҡара металл һәм унан яһалған изделиелар, машина төҙөүҙә ҡулланылған продукция, электр энергияһы, нефть химияһы һәм тау сәнәғәте ҡоролмалары тауарҙары экспортын киңәйтеү мәсьәләләре тикшерелде. Импорт үҫешендә текстиль, тукланыу продукттары менән тәьмин итеү, туризмды үҫтереү йүнәлештәре өҫтөнлөклө һанала.

✓ Италияның Терни ҡалаһында коляскала фехтование буйынса Европа чемпионаты тамамланды. Башҡортостан спортсылары Альберт Камалов менән Никита Нагаев Европа чемпионы исемен яуланы. Ярыш һөҙөмтәләре буйынса Рәсәй йыйылма командаһы 8 алтын, 3 көмөш һәм 9 бронза миҙалға өлгәште һәм дөйөм иҫәп буйынса беренсе урынға сыҡты.

✓ БР Ауыл хужалығы министрлығы мәғлүмәттәренә ярашлы, сентябрь аҙағына 17,2 мең гектар шәкәр сөгөлдөрө йыйып алынған, был бөтөн күләмдең 38 проценты. Төбәктә сөгөлдөр уңышы гектарынан уртаса 293 центнер тәшкил итә. Ҙур уңыш Ғафури, Өфө, Кушнарен районларында. Алдынғы урында Бүздәк районы, унда әлеге мәлгә 100 мең тонна татлы тамыр ҡаҙып алынған.

*✓ Ауыл ҡатындары хәҙер үҙ йортоноң хужабикәһе генә түгел, йәшәгән ауылының да тормош-көнкүрешенә дөрөҫ йүнәлеш биреүсе, сәләмәт ғүмер юлдарын күрһәтеүсе, һәр изге ғәмәлдәрҙе башлап йөрөүсе лидерҙарға әйләнде.*



*БЫЛ АЙҘА...*

# РӘХМӘТ - КҮҢЕЛ ЙЫЛЫҺЫ

**Дүшәмбенән көҙ үҙәгенә яҡынлайбыҙ: миҙгелдең уртансы - төп айы - ҡарасай тыуа. Халыҡса атамаһынан күренеүенсә, был ай эңер мәле һәм төндәрен күҙгә төртһәң күренмәҫлек дөм ҡараңғылығы менән айырылып тора. Болотло көндәр, оҙайлы ямғырҙар мәле. Бөгөн йыш булып торған ниндәйҙер мөғжизә менән ҡарасайҙа күк күкрәй ҡалһа, тигенгә түгел, ти фенологтар: ҡыш ҡарһыҙ килеүе ихтимал.**

Ләкин октябрҙә, көндәр йонсоу, болотло тороуға ҡарамаҫтан, өйкөм болоттар күҙәтелмәй, тиерлек. Сентябрь һары, ҡыҙғылт, йәшел төҫкә "кейендергән" ағастарҙан ай урталарына саҡ ҡына елгә лә шаптырлап япраҡ түгелә, ҡоштар күпләп йылы яҡҡа оса. Ҡыр, урман йәнлектәре ҡышҡылыҡҡа әҙерләнә: аҙыҡ туплап ҡалырға ашыға. Айыу оҙайлы йоҡоға йыйына: аулаҡ урман төпкөлөндә тамырынан йығылған ағас төбөнә өң ҡаҙый, унының эсенә ҡоро япраҡ, мүк, ылыҫ ботаҡтары түшәй. Ай ахырына ҡар ҡатыш ямғыр яуып, күләүектәр боҙ менән ҡаплана башлай. Ә шулай ҙа, хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ, "ел дә ваҡытында иҫеп, ямғыр ҙа ваҡытында" яуған замандарҙан алып бөгөнгәсә, хатта баш ҡалабыҙҙа ер тетрәү шаңдауынан һиҫкәнеп ояныр мәлдәргәсә, тирә-яҡ мөхит глобаль үҙгәрештәр кисереп, былтырғы фараздар быйылғының киреһе булып килеп сыҡҡан хәлдә лә, әллә ни ғәжәпләнерлек түгел. "Күк кәнсәләренең" ни яҙғаны билдәһеҙ, шуға күрә Тәңребеҙҙән именлек теләп, яҙыҡ, гонаһлы ғәмәлдәрҙән алыҫ тороуҙы хуп күрәйек, шул саҡ, бәлки, катаклизм һәм тәбиғәт стихиялары ла беҙгә юлды онотоп торор...

Ҡарасайҙың тәүге көнө (1) ғүмер көҙөн кисереүсе быуын хөрмәтенә бағышлана, мәгәр был көн уларға болот араһынан күренеп ҡалған ҡояш йылыһылай, бер көнлөк нур, "ай күрҙе, ҡояш алды" рәүешле була күрмәһен беруҡ. Өлкәндәргә, ә иң мөһиме иҫән саҡтарында атай-әсәйҙәребеҙгә бурысыбыҙҙы фиҙаҡәрлек менән ҡайтарайыҡ. Ошо юлда рыялыҡ түгел, ризалыҡ күрһәтәйек. "Раббың һеҙгә ...ата-әсәгә ҡарата яҡшы мөнәсәбәттә булырға бойорҙо, - тиелә аяттарҙа.



- Уларҙың береһе йә икеһе лә оло йәшкә етһә (һәм үҙең менән бергә йәшәһә), улар менән асыуланып һөйләшмә, "Уф!" тип әйтмә, мыжыма, ипле генә һөйләш". "Күндәм һәм мәрхәмәтле ҡанат аҫтына ал да:"Эй, Раббым! Бала саҡтан уҡ мине үҙҙәре һөйөп, иркәләп үҫтергән кеүек, уларҙы үҙең дә ярлыҡа!" - тиң". ("Әл-Исра" сүрәһе, 23-24-се аяттар).

Тыуасаҡ айҙың 1-се көнөндә тағы ла тәү ҡарашҡа бер-береһе менән бәйләнеше булмаған дүрт дата билдәләнә: **Бөтөн донъя вегетарианлыҡ, Халыҡ-ара табип, Халыҡ-ара музыка** һәм **Халыҡ-ара торлаҡ көндәре** улар. Шулай ҙа был көндәрҙе берләштереп була: ит ашамай йә сама белеп ҡулланһаң, сәләмәтлегеңде хәстәрләп, бер ниндәй табипҡа ла көнөң төшмәһә, баш осоңда үҙ ҡыйығың булһа, тормошоң матур бер моң төҫлө көйләнеп кенә барыр. **Электрон почтаның тыуған көнө** (2) күптәрҙе адресатҡа телеграмма, хат, башҡа төр депеша, документтар әйләнеше ебәреү кеүек артыҡ мәшәҡәттәрҙән ҡотолдорҙо, тормошобоҙҙо, аралашыу өлкәһен еңеләйтте, рәхмәтле булайыҡ уға! Унын ҡарауы, ябай почта бүлексәләренең бөгөн ни менән шөғөлләнеүе аңлашылып етмәй. Уларҙың хәҙер ауыр сумкалары ла бушап ҡалды, һирәк күренеш булған подписчиктарға бер нисә дана гәзитте лә һуңлатып, үҙҙәре ҡасан теләй, шунда төшөрөп китә йәшниккә. Хат та, матбуғат та таратмағас, посылка, бандероль менән ултырып ҡалдылармы икән? **Бөтөн донъя почта көнө** (9) был тармаҡ хеҙмәткәрҙәренә сумкаларының тағы ла һәлмәкләнеп, гәзит-журнал менән тулыуын һәм уларға гәзит уҡыусылар рәхмәтен теләп ҡалабыҙ.

Рәхмәттәребеҙҙе яуҙырыр көндәрҙең береһе - 5 октябрь яҡынлай. Иҫегеҙгә төштөмө инде? Әлбиттә, **Уҡытыусылар көнө** был! Һәр кем был көн, хатта уҡытыусылар үҙҙәре лә, тәүге йә булмаһа үҙенең иң яратҡан уҡытыусыһын ихтирам менән иҫкә төшөрә, ошо көн уңайынан уға ҡотлау ебәрә, шылтырата йә гөлләмә тотоп, өйөнә бара. Бөгөнгө уҡытыусыларҙың һәммәһенә лә тап ана шундай киләсәк теләйек. Был датаның тағы ла **Бөтөн донъя йылмайыу көнө** лә (5) булыуы шуға күрә тәбиғи ҡабул ителә.

Ҡарасайҙа ғына түгел, тормошобоҙҙағы иң ҙур байрамдарҙың береһе - **Республика көнө** (11) етә. Тормоштары ашап-эсеп, түшәмгә төкөрөп ятыуҙан ашмаған әҙәмдәр өсөн ул тағы бер ял көнөн генә аңлатһа, Башҡортостаныбыҙҙы өҙөлөп һөйгән, унының мәнфәғәтендә эшләгән, хеҙмәт ҡаҙаныштары яулаған, тыуған илем, туған телем тип йән атҡан илһөйәрҙәр өсөн ул үткәндәргә тағы бер ҡараш ташлау, киләсәгебеҙҙе күҙаллау һәм һәр ваҡыт республикабыҙ мәнфәғәттәрен яҡлауға әҙер булыу ынтылышы.

Бер-бер артлы килгән мөһим ике байрам - **Бөтөн донъя ауыл ҡатын-ҡыҙҙары** (15) һәм **Бөтөн донъя икмәк** (16) көндәренә ҡарата мәҙхиә әйтмәү яҙыҡ булыр ине, сөнки улар бер-береһе менән тығыҙ бәйләнештә тора: ауыл ҡатыны тигәндә, беҙ унының алъяпҡыс бәйләп, еңдәрен һыҙғанып, икмәк бешереүен күҙ алдына килтерһәк, икмәк тигәндә, беҙ уны йорт түрен ҡотло ла, йәмле лә, нурлы ла итеүсе хужабикә, ҡатын, әсә ҡулдарында күрәбеҙ. Башҡа тарафтарҙа ауыл ҡатындары ошо өс бурысынан тыш тағы ниҙәр менән мәшғүлдер, ә бына Башҡортостан ауылдары ҡатын-ҡыҙҙарының абруйы әүҙем йәмәғәтсе, һәүәҫкәр артист, ағинәй булараҡ та асылды һуңғы йылдарҙа. Ауыл ҡатындары хәҙер үҙ йортоноң хужабикәһе генә түгел, йәшәгән ауылының да тормош-көнкүрешенә дөрөҫ йүнәлеш биреүсе, сәләмәт ғүмер юлдарын күрһәтеүсе, һәр изге ғәмәлдәрҙе башлап йөрөүсе лидерҙарға әйләнде. Рәхмәт һеҙгә, ағинәйҙәр! Шулай итеп, тәү ҡарашҡа йонсоу, һалҡын көндәр вәғәҙәләгән шыҡһыҙ айҙа рәхмәттәрҙе йышыраҡ әйтеп, шул һүҙ тыуҙырған һөйөнөстән йылынып йәшәйек.

**Ҡарасайҙың һәр айға хас һөнәрмән көндәре байтаҡ:** ОМОН (3), Рәсәй йыһан ғәскәрҙәре һәм граждандар оборонаһы көндәре (4), Еңәйәт тикшереүе хеҙмәткәрҙәре (5), Страховкалаусы (6), Командир (8), Психолог (10), Ауыл хужалығы һәм эшкәртеү сәнәғәте, шулай уҡ Һаулыҡ хеҙмәткәрҙәре (14), Статист, Авиадиспетчер, Ашнаҡсы көндәре (20), Юл хужалығы эшселәре (21), Махсус тәғәйенләнеш подразделениелары (спецназ - 24), Таможенник, Автомобиль пассажир транспорты эшселәре (28) көндәре билдәләнә.

Ҡарасайҙа тыуғандар:

**1** - шағирә, педагог, дөйөм белем биреүҙең почетлы хеҙмәткәре **Миңлегөл Хисамоваға - 70 йәш** (1948).

**4** - әҙәбиәт белгесе, филология фәндәре докторы, профессор, академик, БАССР-ҙың атҡаҙанған фән эшмәкәре **Зиннур Нурғәлинга - 90 йәш** (1928).

**10** - күренекле партия һәм дәүләт эшмәкәре, 1950-1967 йылдарҙа БАССР Юғары Советы Президиумы Рәйесе, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан ветеран **Фәйзрахман Зәғәфурановтың тыуыуына - 105 йыл** (1913-1975).

**13** - яҙыусы, драматург, 1973-1988 йылдарҙа БАССР Яҙыусылар берлегенең идара рәйесе, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты **Әсхәт Мирзаһитовтың тыуыуына - 90 йыл** (1928-1989).

**15** - күренекле дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, 1922-1927 йылдарҙа БашЦИК рәйесе, СССР Үҙәк Башҡарма Комитеты ағзаһы **Хафиз Ҡушаевтың тыуыуына - 130** йыл (1888-1937).

**28** - Советтар Союзы Геройы **Миңлеғәли Ғөбәйҙуллиндың тыуыуына - 95 йыл** (1923-1944).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Башҡортостан Республикаһының Эшҡыуарлыҡ ойошмалары ассоциацияһы бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ эшмәкәрлеге буйынса консультациялар үткәрә. 1 октябрҙә 15.00 сәғәттә - "Социаль эшҡыуарлыҡ: бизнес өсөн яңы мөмкинлектәр"; 8 октябрҙә 15.00 сәғәттә "Тауар билдәһен теркәү"; 16 октябрҙә 15.00 сәғәттә "Өфөлә эшҡыуарлыҡ эшмәкәрлеген ойоштороу өсөн ер участкаларын рәсмиләштереү үҙенсәлектәре" темалары буйынса һорауҙарға яуаптар алырға була. Адресы: Индустриаль шоссе, 44/1, 6-сы павильон, 6-22-се кабинет. Теркәлеү өсөн: (347) 264-62-90, 243-38-37, e-mail: aoprb@mail.ru

✓ Мәскәүҙә 22-се "Апиславия" Халыҡ-ара умартасылыҡ ойошмалары конгресында Башҡортостан умартасылары ла миҙалдар яуланы. "Кәрәҙле бал" номинацияһында беренсе урынды Стәрлетамаҡ районынан Рөстәм Резбаев, "Ҡатнаш сәскә балы" категорияһында икенсе урынды Бөрйән районынан Кәрим Ғәлин, "Таҙа йүкә балы" номинацияһында өсөнсө урынды Ишембай районынан Юрий Анопченко алды. Күргәҙмәлә 40-тан ашыу илдән өс меңдән күберәк умартасы ҡатнашты.

✓ 2018 йылда республика халҡы урындағы инициативалар программаһы буйынса 830 ғариза биргән. Дөйөм суммаһы 605,6 млн һум булған 598 проект еңеүсе тип танылған. Ауыл ерендә йәшәүселәр 498 проектты тормошҡа ашырыу өсөн - 486 млн һум, ҡала халҡы 100 проект өсөн 119,6 млн һум аласаҡ. Башлыса мәктәп һәм балалар баҡсаларын, юлдарҙы ремонтлау, спорт майҙансыҡтары төҙөү, милли мираҫты һаҡлау, һыу үткәреү, парктарҙы төҙөкләндереү тәҡдимдәре менән мөрәжәғәт итәләр. Проекттарҙы тормошҡа ашырыу өсөн матди сығымдарҙың 11 процентын халыҡ үҙе, 9 процентын - бағыусылар, 13,5 процентын муниципалитеттар түләй.

✓ Башҡортостанда тәүге ярты йыллыҡта ит етештереү 6 процентҡа, йәки 8,6 мең тоннаға кәмегән. Быға Мәләүез районындағы Мәжит Ғафури исемендәге Башҡортостан ҡошсолоҡ комплексының ябылыуы сәбәпсе. Был хаҡта республика Хөкүмәте ултырышында Хөкүмәт Премьер-министры урынбаҫары, ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов хәбәр итте. Был комплекс ("Индюшкин" бренды) Рәсәйҙә күркә итен етештергән ҙур хужалыҡтарҙың береһе ине.

✓ *Ирек Ишмөхәмәт улы командаһына рәхмәт белдереп: "Беҙ 1430 километр алыҫлыҡтан да ярҙам итәсәкбеҙ", - тиеүе, республикаһының патриоты булараҡ, яңы вазифала иңенә алған тәүге бурысы булғандыр, моғайын.*



*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*



**Ҡала хакимиәтендәге сираттағы кәңәшмә шәп яңылыҡтан башланды: иң яҡшы муниципаль практикалар Рәсәй конкурсының "Ҡала төҙөлөшө сәйәсәте, халыҡтың уңайлы тормошон тәьмин итеү, торлаҡ-коммуналь хужалыҡты үҫтереү" номинацияһында "Парк эсендәге ҡала" концепцияһы менән Өфө беренсе урын яулаған!**

# ӨФӨ - БЕРЕНСЕ!

Илдең 59 субъектының 172 муниципалитет ҡатнашҡан был сарала беренсе урын яулау - ҙур еңеү, әлбиттә. Өфө ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов белдереүенсә, 2012 йылдан алып мегаполиста ял зоналарын, парктар һәм скверҙарҙы реконструкциялау, яңыларын булдырыу буйынса ҙур эш алып барыла. Уҙған алты йылда барлығы 28 ял зонаһы ремонтланған, яңы 19 объект төҙөлгән. Концепцияға ярашлы, улар бер-береһе менән йәйәүлеләр йәки велосипедсылар юлдары аша тоташырға тейеш. Шулай итеп, Өфө ҡалаһы бер заман төҙөкләндерелгән ҙур бер парк эсендә ҡаласаҡ. "Беҙ был бурысты оҙайлы преспектива - яҡынса 20 йыл өсөн күҙаллайыҡ, - тине Ирек Ишмөхәмәт улы. - Беҙ башлаған эште беҙҙән һуң да дауам итәсәктәр. Ә әлегә Өфө, еңеүсе булараҡ, федераль бюджеттан аҡса аласаҡ һәм улар ҡаланы артабан төҙөкләндереүгә тотоноласаҡ. Артабан да бындай конкурстарҙа ҡатнашырға кәрәк. Беҙҙә ҡыҙыҡлы тәжрибәләр бик күп".

Бер ыңғай ҡала хакимиәте башлығы Башҡортостан Республикаһының Стратегик тикшеренеүҙәр институты менән берлектә ҡаланы 2030 йылға тиклем үҫтереү стратегияһы эшләнелеүен дә билдәләп китте. Әлеге ваҡытта Өфө миллионлы ҡалалар араһында социаль-иҡтисади күрһәткестәр буйынса алдынғы урындар биләй, был позицияны киләсәктә лә һаҡлап ҡалыу өсөн баш ҡала иҡтисадының, ҡала хужалығының үҫеш йүнәлештәрен асыҡлау зарурлығына ла баҫым яһаны. "Эшләнмәләр һөҙөмтәһендә ҡаланы үҫтереүҙең фәнни, нигеҙле планы барлыҡҡа киләсәк", - тине ул.

Кәңәшмәнең төп темаларының береһе булып уҙған аҙнала үткән Баш ҡалаларҙың һәм эре ҡалаларҙың халыҡ-ара ассамблеяһының "Ҡала хәүефһеҙлеге. Комплекслы ҡараш" Форумы һәм МАГ-тың XXVI сессияһына йомғаҡ яһау торҙо. "Алдынғы илдәр һәм ҡалалар бөгөн тап комплекслы хәүефһеҙлек схемаһына ҙур иғтибар бирә. Өфө был йәһәттән Волга буйы федераль округында лидер булһа, Рәсәй кимәлендә икенсе урында тора. Шуға ла тап ошо тема буйынса МАГ-тың даими эшләүсе майҙансығы итеп Башҡортостандың баш ҡалаһы һайланған", - тине Ирек Ялалов. - Әгәр ҡалған ике майҙансыҡтың береһе - Мәскәү, икенсеһе - Астана икәнлеген иҫәпкә алһаҡ, Өфө өсөн был ҙур мәртәбә һәм уның күпкә алда барыуы күрһәткесе. Был - ҡоро һүҙҙәр, маҡтаныу ғына түгел. Сарала ҡатнашыусылар, ысынлап та, ҡаланың таҙа һәм төҙөк булыуын билдәләне. Ирек Ишмөхәмәт улы белдереүенсә, уларҙы бына нимәләр һоҡландырған: "Ҡаланың таҙалығы. Ҡунаҡтарҙың ҡайһы берҙәре үҙәк менән генә танышып ҡалманы, хатта Черниковкаға тиклем барып етеп, ихаталарға инеп ҡараны, бигүк төҙөк булмаған территорияларға иғтибар итте. Әммә Рәсәйҙең башҡа ҡалалары менән сағыштырғанда, Өфөнөң бер башҡа өҫтөн булыуын һәм форум өсөн шулай махсус әҙерләнеп булмағанын белдерҙе. Икенсенән, ҡаланың төп магистралдәренең хеҙмәт ваҡыты оҙайлы булған материалдан эшләнеүе, өсөнсөнән, ҡаланың йәшеллеккә күмелеүе иғтибарҙарын йәлеп итте. Ҡала балансында булған йылға флоты ла күптәр өсөн яңылыҡ. Үҙ флоты булған ҡалалар бик әҙ, ә суднолар ташҡын ваҡытында халыҡты эвакуациялауҙан алып йылға аша ташыу кеүек һ.б. бик күп бурыстарҙы уңышлы үтәй. Шулай уҡ евроконтейнерҙарҙы һәм светофорҙарҙы үҙебеҙҙә эшләү ҡунаҡтарҙы аптырарға мәжбүр итте".

Кәңәшмәлә МАГ ойошторолоуҙың 20 йыллығы уңайынан МАГ-тың "БДБ ҡалаларының тотороҡло үҫешенә индергән өлөшө өсөн" иҫтәлекле орден-билдәһе лә тапшырылды. Был наградаға Фидүс Ямалетдинов, Мәхмүт Бикбулатов, Өфө ҡала хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары Салауат Хөсәйенов, ҡала хакимиәтенең ойоштороу-контроль идаралығы начальнигы урынбаҫары Альбина Сәғитова лайыҡ булды.

Шулай уҡ оператив кәңәшмә ниндәйҙер кимәлдә хушлашыу ваҡиғаһы ла булып торҙо. 9 сентябрҙә үткән БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға һайлауҙарҙа еңеү яулағандан һуң Ирек Ишмөхәмәт улын урындағы парламент депутаттары Федерация Советына вәкил итеп һайлағанлыҡтан, уға ҡала Советы ҡарары менән мэр вазифаһын башҡарыу тураһындағы килешеүҙе ваҡытынан алда туҡтатырға тура килде. Үҙ сиратында Ирек Ишмөхәмәт улы командаһына рәхмәт белдереп, урыны менән "ҡаты һәм ҡәтғи" булыуы өсөн ғәфү үтенде. Уның: "Беҙ 1430 километр алыҫлыҡтан да ярҙам итәсәкбеҙ", - тиеүе, тыуған ҡалаһының һәм республикаһының патриоты булараҡ, яңы вазифала иңенә алған тәүге бурысы булғандыр, моғайын. Һәр хәлдә, шуға ышанғы килә. Әммә алдан фараз ҡылмайыҡ, ваҡыт күрһәтер.

*ӘЙТКӘНДӘЙ...*

# БЕҘ ҘӘ БУЛДЫРАБЫҘ!

**20-21 сентябрҙә Өфөлә Баш ҡалалар һәм эре ҡалалар ассамблеяһы (МАГ) ойошторолоуының 20 йыллығына арналған XXVI Халыҡ-ара сессия тураһында ентекләберәк һөйләп үтәйек.**



Сараға Рәсәйҙән, БДБ илдәренән һәм туғандаш ҡалаларҙан вәкилдәр килде. Был сессияның "Ҡаланың хәүефһеҙлеге. Комплекслы ҡараш" тип аталыуы һәм Башҡортостанда үтеүе юҡҡа түгел, сөнки Өфө Волга буйы федераль округы буйынса дүртенсе йыл рәттән хәүефһеҙлек буйынса лидер булып тора. Һәм беҙҙә был термин хоҡуҡ һаҡлау йәһәтенән генә ҡаралмай, ә үҙ эсенә тотош комплексты ала: торлаҡ-коммуналь тармаҡты, ҡала хужалығын төҙөкләндереүҙән алып балаларҙың белем алыу һәм ял итеү ваҡытындағы хәүефһеҙлеге, сәләмәт тормош рәүеше һ.б. Ошо йүнәлештә Өфөлә бик күп ыңғай программалар һәм проекттар тормошҡа ашырыла. Быны 2016 йылда үткән МАГ сессияһында ҡатнашыусылар ҙа билдәләп киткәйне һәм әле лә улар ошо фекерҙә ҡала. Ултырышта билдәләнеүенсә, МАГ эшмәкәрлегенең төп йүнәлеше булып Европа иҡтисади союзының (ЕАЭС) формалашыуы һәм үҫешендәге интеграцион процестарға ярҙам итеү; ҡала проблемаларын хәл итеүҙең алдынғы тәжрибәһен таратыу; ҡала мөхитенең хәүефһеҙлеге, аныҡлап әйткәндә, ҡаланың тотороҡло үҫешенең мәғлүмәти тәьминәте тора. Һәм тағы МАГ сессияһының әһәмиәте шунда: унда рәсмилек бөтөнләй юҡ, ҡалалар башлыҡтары дуҫтарса мөнәсәбәттә аралаша, фекерҙәре менән бүлешә, тәжрибә уртаҡлаша. Был бөгөн, бигерәк тә аҡыллы фекерҙәр, идеялар аҡса менән баһаланған ваҡытта, бик мөһим, сөнки МАГ ағзалары файҙалы проекттар менән үҙ-ара бушлай алмаша. Мәҫәлән, Гродно ҡала Советы рәйесе Борис Федоровты Өфөнөң "Парк эсендәге ҡала" концепцияһы ҡыҙыҡһындыра. "Гродно ҡалаһында ла ҙур булмаған урман бар. Был беҙҙең өсөн ыңғай тәжрибә", - ти ул.

Юбилей ултырышы булғанлыҡтан, әлбиттә, ҡотлауҙар ҙа ситтә ҡалманы. БДБ ҡалаларының тотороҡло үҫешенә индергән өлөшө өсөн һәм Ассамблея ойошторолоуҙың 20 йыллығы уңайынан әүҙем вәкилдәр ойошманың орден-билдәһе менән бүләкләнде. Өфө ҡала хакимиәте башлығы, МАГ президенты Ирек Ялаловҡа урындағы үҙаидаралыҡты һәм муниципаль-ара хеҙмәттәшлеккә индергән өлөшө өсөн Рәхмәт хаты тапшырылды. Әйткәндәй, МАГ ойошторолғандан алып - Ирек Ишмөхәмәт улы уның 3-сө президенты. Ә беренсеһе - тамырҙары Башҡортостанға бәйле (әсәһе Ҡалтасы районынан) булған Мәскәү ҡалаһының экс-мэры Юрий Лужков була.

***Анатолий Локоть, Новосибирск ҡалаһы мэры:*** Беҙҙе Өфөнөң дизайны, планировкаһы ҡыҙыҡһындыра. Шулай уҡ түләүле парковкалар, юл сиселештәре, транспорт хәрәкәте мәсьәләләре лә иғтибарға лайыҡ. Тағы ла беҙҙең өсөн мөһим мәл - Новосибирск

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ 2017 йыл һөҙөмтәләре буйынса саралар үткәреү урыны булараҡ Өфө Рәсәй ҡалалары араһында 8-се урынға күтәрелде. Был турала Милли конгресс-бюро үткәргән "Рәсәйҙең ваҡиғалар картаһы" конференцияһында әйтелде. Рейтингтың тәүге өс урынында Санкт-Петербург, Екатеринбург һәм Сочи. Ҡалаларҙы баһалағанда төбәктең матди-техник базаһы, ҙур саралар үткәреү тәжрибәһе, рекриацион мөмкинлектәренә өҫтөнлөк бирелгән. Башҡортостан 2015 йылдағы ШОС һәм БРИКС саммиттарынан һуң ваҡиға туризмын үҫтереү өсөн перспективалы төбәккә әйләнгән. 2020 йылда Бөтөн донъя Фольклориадаһы һәм 2021 йылда "Апимондия" үткәреү урыны булараҡ һайланыуы ла Өфөгә был баҫҡыста башҡаларҙан юғарыраҡ урынлашырға мөмкинлек биргән.

✓ Баш ҡалала һигеҙ яңы урам, бульвар һәм сквер барлыҡҡа киләсәк. Спорт һарайы эргәһендәге скверға "Салауат Юлаев" хоккей командаһының легендар тренеры Сергей Михалев исеме биреләсәк. Ленин районында Урицкий урамындағы трамвай ҡулсаһы эргәһендәге сквер Зоя Космодемьянская исемен йөрөтәсәк. Баш ҡаланың Киров районында Назар Нәжми бульвары, Булат Имашев, Марина Цветаева, Мәғариф, Солнечногорская урамдары, Ленин районында Дмитрий Купцов урамы барлыҡҡа киләсәк.

✓ Өфөлә ЮХХДИ-ның район-ара теркәү-имтихан тапшырыу бүлеге Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 147 адресы буйынса ремонтланған бинаға күсте. Ремонт ваҡытында бүлек бер нисә айға Индустриаль шоссеға күскәйне. Бүлмәләр граждандарға дәүләт хеҙмәттәре күрһәтеү өсөн тулыһынса әҙер, тип хәбәр иттеләр төбәк Дәүләт автоинспекцияһында. Эш ваҡыты: шишәмбе-шәмбе иртәнге сәғәт 9-ҙан киске 6-ға тиклем (документтар 5-кә тиклем ҡабул ителә); йәкшәмбе һәм дүшәмбе - ял көндәре.

✓ Биш автоконцерн - GM, Land Rover, Ford и Mazda - яңы автомобилдәргә хаҡтарҙы арттыра. Үҫеш 1-5 процент тәшкил итәсәк, тип хәбәр итә "Ведомости". Әлегә бөтә автомобиль етештереүселәр ҙә машиналарға хаҡтарҙы арттырмай: атап әйткәндә LADA, Renault һәм Nissan бынан баш тартҡан. Әммә компания вәкилдәре Европа валютаһы 79 һумға еткән осраҡта автомобилдәрҙең хаҡын "бер аҙ күтәрергә кәрәк булыр" тип билдәләй.

ТАҒЫ БЕР САРА

# МАҠТАУҘАРҘАН...

## баштар әйләнмәһен




**Уҙған ял көндәрендә Өфөлә ЮНЕСКО эштәре буйынса Рәсәй комиссияһы эгидаһы аҫтында Мәҙәниәт һәм халыҡ ижады мәсьәләләре буйынса 3-сө Евразия халыҡ-ара гуманитар форумы үтте. Тәүге форумдар ҙа 2016, 2017 йылдарҙа Башҡортостанда ойошторолоп, фестиваль сәнғәтенә, һөнәри белем биреү мәсьәләләренә бағышланғайны. Был юлы ул мәҙәниәткә һәм халыҡ ижадына арналды. Сарала донъяның 50 иленән 200-ҙән ашыу кеше ҡатнашты.**

Журналистар менән осрашҡанда БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Салауат Сәғитов Башҡортостан өсөн был форумдың 2020 йылда үтәсәк Фольклориадаға әҙерләнеүҙә һәм уны үткәреүҙә мөһим этап булыуын билдәләп: "Бөгөн беҙ был ҙур сараны нисек үткәреүҙе тулыһынса күҙаллайбыҙ. Ойоштороу мәсьәләләре буйынса ҡатмарлыҡтар юҡ, иң мөһим мәсьәлә булып Фольклориаданы Башҡортостанда, Рәсәй Федерацияһында ғына түгел, сит илдәрҙә лә рекламалау һәм мәғлүмәтте күберәк таратыу тора", - тип белдерҙе һәм киләһе йылда СИОФФ-тың Чилиҙа үтәсәк 49-сы Бөтә донъя конгресында сараның тулы презентацияһын күрһәтеү тураһында ЮНЕСКО-ның хөкүмәткә ҡарамаған ойошмалары менән бәйләнеш булдырыу буйынса комитет рәйесе Филипп Боссан менән килешеү тураһында әйтеп үтте. "Бынан тыш, Парижда ЮНЕСКО майҙанында бер ыңғайҙан Янғантау геопаркын һәм Шүлгәнташ мәмерйәһен дә презентациялаясаҡбыҙ. Ноябрҙә Санкт-Петербургта үтәсәк мәҙәни форумда ла айырым майҙансыҡ Фольклориадаға арналасаҡ. Фольклориада, тиһәк тә, мин уны Бөтә донъя һабантуйы тип әйтер инем. Ул ҡатнашыусыларҙың ғына түгел, ә республикаға килгән туристарҙың да осрашыу, Башҡортостандың ҡунаҡсыллығына, изгелегенә һәм кешелеклелегенә инаныу урыны буласаҡ", - тине Салауат Тәлгәт улы.

Григорий Орджоникидзе ЮНЕСКО менән хеҙмәттәшлектә Рәсәй субъекттары араһында Башҡортостандың әүҙем булыуын билдәләне. Тап беҙҙә "Кеше һәм биосфера" биосфера резерваты булдырылған, күптән түгел генә Янғантау геопаркын бөтә донъя геопарктар селтәре исемлегенә индереүгә тәҡдим ителде. "Карар, нигеҙҙә, ҡабул ителгән, әммә комиссияның бер нисә иҫкәрмәһе бар. Улар төҙәтелеү менән тиҙҙән, бәлки, киләһе йыл башында, объект ЮНЕСКО геопарктары исемлегенә индерелер тип уйлайым, - тине РФ Сит ил эштәре министрлығы ҡарамағындағы ЮНЕСКО эштәре буйынса РФ Комиссияһының яуаплы секретары Григорий Орджоникидзе. - Бынан тыш, башҡа проекттар һәм программалар ҙа бар, бөгөнгө сара ла быға асыҡ миҫал. Форум һуңында беҙ иғтибарға лайыҡ инициатива - Евразия халыҡтары мәҙәниәте картаһын эшләү - тәҡдим ителгән йомғаҡлау документын ҡабул итәсәкбеҙ. Был бик етди проект һәм Башҡортостан да уны хуплар тигән өмөттәмен".

Әлбиттә, форумда мәҙәниәт, милли традициялар, уларҙы һаҡлау һәм үҫтереү, пропагандалау буйынса ҡыҙыҡлы һәм иғтибарға лайыҡ сығыштар булды. Әммә барыбер ҙә күңелдә Рәсәй кимәлендә һәр өлкәне айырым ҡарап, эште комплекслы алып барыу етешмәгәнлеге һиҙелде. Мәҫәлән, традицияларҙы, традицион мәҙәниәтте киләсәк быуындарға еткереү өсөн бөгөн уларҙы балаларға тапшырыу кәрәклегенә баҫым яһалды. Шул уҡ ваҡытта Рәсәй мәғарифы белем биреү системаһын берҙәм киңлеккә ҡороп, унан тап ошо милли мәҙәниәткә, рухиәткә өҫтөнлөк биргән һәм уларҙы һаҡлау, йәғни балаларға этнопедагогика йүнәлешендә уҡытҡан төбәк компонентын алып ташлап, ошо хаҡта һүҙ алып барыуы быға асыҡ миҫал. Йәғни мәҙәниәт - үҙ аллы, мәғариф - үҙ аллы, спорт - үҙ аллы йәшәй. Әлбиттә, йәш быуынға мәҙәни-рухи-әхлаҡи ҡиммәттәрҙе тапшырыуҙы волонтерлыҡ йүнәлешендә алып барыу тәҡдим ителә, әммә бөгөн маҡсатлы рәүештә ошо ҡиммәттәрҙең сығанағы булып торған ауыл мәктәптәрен бөтөрөүгә ҡоролған сәйәсәт осоронда глобаллашеүҙең ҙур аҙымдарына ирекмәнлек менән генә ҡаршы тороу мөмкинме икән?

Икенсе яҡтан, был юлы ла "Урал батыр" эпосы иғтибарҙан ситтә ҡалманы. Әйе, башҡа дәүләттәрҙең ауыҙ-тел ижады гәүһәрҙәре кеүек үк, ул да ЮНЕСКО-ның матди булмаған мәҙәни мираҫы исемлегенә инергә хаҡлы һәм лайыҡ. Ләкин был эште тормошҡа ашырырға Рәсәй үҙе үк аяҡ сала, сөнки 2003 йылда уҡ ЮНЕСКО-ның матди булмаған мәҙәни мираҫын һаҡлау тураһында конвенцияға ҡул ҡуйылһа ла, уны һаман ғына ратификацияламаған. Башҡортостан, һис шикһеҙ, төрлө сараларҙы юғары кимәлдә үткәреүе менән дан алған һәм ниндәй генә сара булмаһын, ҡатнашыусылар юғары баһа бирә. Әммә маҡтауҙарҙан башыбыҙ әйләнеп, үҙенсәлегебеҙҙе генә юғалтып ҡуймайыҡ, тимәксемен...

**Земфира ХӘБИРОВА.**

---

2023 йылда үҫмерҙәр араһында хоккей буйынса донъя чемпионатын үткәреү хоҡуғын алды, әле шуға әҙерлек бара. Был йәһәттән Өфөнөң боҙ һарайы менән танышыу ҙа һөҙөмтәле буласаҡ. Беҙҙең барыбыҙҙың да уртаҡ проблемабыҙ - ул муниципалитеттарҙың вәкәләттәре менән финанс мөмкинлектәренең ҡапма-ҡаршылығы, яңы социаль объекттар төҙөү мәсьәләһе. Мин Өфөгә тәүгә килеүем һәм иң беренсе һорауым социаль объекттар төҙөлөшөнә ҡағылды. Новосибирскиҙағы кеүек, һеҙҙә лә мәктәптәр етмәй икән. Мегаполис халыҡты үҙенә тарта, халыҡ һаны тәбиғи артым буйынса ғына түгел, миграция ағымы иҫәбенә лә үҫә. Был йәһәттән дә тәжрибә уртаҡлашыу кәрәк. Авария торошондағы иҫке йорттарҙы һүтеү буйынса ла проблемаларыбыҙ уртаҡ, был етди проблема булып тора һәм ул Башҡортостандың баш ҡалаһына ла хас. Дөйөм алғанда, Өфө матур, таҙа, йәшәү өсөн уңайлы ҡала.

***Илья Осипов, РФ Дәүләт Думаһының Торлаҡ сәйәсәте һәм ТКХ буйынса комитет ағзаһы:*** Комплекслы ҡараш, тигәндә, бар яҡлап та уңайлы ҡала мөхите күҙаллана. Халыҡ ошо эштәрҙе баһаларға, үҙен ошо мөхиттә уңайлы тойорға, үҙ ҡалаһын яратырға тейеш. Был йүнәлештә Өфө әүҙем позицияла тора. Сифатлы, аңлы позицияла. Юҡҡа ғына уны Рәсәйҙең йәшел ҡалаларының береһе тимәйҙәр. Булған йәшел ял зоналарына яңылары өҫтәлә. Иҫке парктарҙы реконструкциялау тәжрибәһе күп ҡалаларҙы Өфөгә иғтибар йүнәлтергә һәм өлгө алырға мәжбүр итә. Әлбиттә, етешһеҙлектәр ҙә булыуы мөмкин, әммә өфөләр үҙ эшенә яуаплы ҡарай, хаталар өҫтөндә эшләй һәм халыҡ та быны баһалай. Сифат буйынса Өфө иң яҡшы тәжрибәләр программаһының финалында һәм, ғөмүмән, һәр ваҡыт яҡшылар иҫәбендә. Әйткәндәй, баш ҡала иң яҡшы тәжрибәләр программаһында беренсе урынға лайыҡ булды.

***Станислав Мошаров, Силәбе ҡала Думаһы рәйесе:*** Өфө - МАГ-тың ғына түгел, Рәсәй союзы ҡалалары ойошмаһының да иң әүҙем ҡатнашыусыларының береһе. Ул барлыҡ майҙансыҡтарҙа ла ҡатнаша. 2016 йылда бында Рәсәйҙең иң яҡшы муниципаль практикаларының 4-се форумы үтте һәм унда тәҡдим ителгән тәжрибәләр бөгөн төрлө ҡалаларҙа, шул иҫәптән Өфөлә лә ҡулланыла. Бүлешер тәжрибәһе лә бар, сөнки Өфө - Рәсәйҙең иң перспективалы, иң матур ҡалаларының береһе. Хәүефһеҙлек буйынса бынан ике йыл элек Ирек Ишмөхәмәт улы менән һөйләшкәйнек, ҡала кинлеге хәүефһеҙлеге темаһын күтәреп кенә торалар ине. Әлбиттә, һөҙөмтәләрҙе ишетке, күрге һәм үҙебеҙҙең тәжрибә менән сағыштырғы килә. Сөнки Өфө төҙөкләндереү буйынса тәжрибәһе менән уртаҡлашҡайны инде. Ҡала буйлап йөрөгәндә эш һөҙөмтәһен үҙ күҙҙәрем менән күрҙем. Ысынлап та, Өфө - Рәсәйҙең иң төҙөк ҡалаларының береһе.

***Татьяна Хабарова, Рәсәйҙә БМО-Хабитат программаһы етәксеһе:*** Мин Өфөлә тыуҙым, бында минең олатайым менән өләсәйем йәшәне. Атайым БДУ профессоры булды. Совет майҙанындағы 3-сө гимназияны алтын миҙалға тамамланым. Шуға бөгөн дә Өфөлә мине белгән, иҫләгән, көткән адрестар бар, тип әйтә алам. Ҡала буйлап йөөргәндә таныш урындарҙы күреү күңелемдә йылы тойғолар ҡалдырҙы. Салауат Юлаев һәйкәле эргәһендә төшкән элекке фотом бар, әле тағы ла төштөм. Уларҙы ҡараһаң, алға китеш күренеп тора. Ҡаланың көндән-көн үҫеүе, матурланыуы ҡыуандыра. Быны мин туғандарымдан да ишетәм. Артабан да шулай булыр тип ышанам. Донъяның төрлө мөйөштәрендә БМО секретариаты хеҙмәткәрҙәре менән осрашһаҡ, һаулыҡ һорашабыҙ ҙа айырылабыҙ. Әгәр Өфөнән сыҡҡан берәйһе менән осрашһаҡ - был инде ғүмерлек дуҫлыҡҡа әүерелә. Атап әйткәндә, БМО Секретариатында бер яҡташыбыҙ бүлек мөдире булып эшләй. Ул үҙенең Өфөнән булыуын әйткәс, ойошмаларыбыҙ араһында тығыҙ бәйләнеш барлыҡҡа килде, күптәр беҙҙең һөҙөмтәле эшмәкәрлек булдыра алыуыбыҙға аптырай, хатта бер аҙ көнләшә лә. Ә сәбәбе бер - беҙ өфөләр!

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

---

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Тоҙ ултырыуҙан

❖ Тәнгә, быуындарға тоҙ ултырмаһын өсөн 2 балғалаҡ шырыш еләге япраҡтарына 1,5 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, йылы урында 1 сәғәт төнәтергә лә, һөҙөргә. Төнәтмәне көнөнә 3-4 тапҡыр ашарҙан алда яртышар стакан эсергә.

❖ Тоҙ ултырғанда һыҙланғанда 1 ҡалаҡ ҡарағат япрағына 2 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 3-4 сәғәт төнәтеп һөҙөргә, көнө буйы эсергә. Бауыры, ашҡаҙанға бәйле сирҙәре булғандарға ярамай!

### Арҡа, бил ауыртҡанда

❖ Умыртҡалыҡтың ауыртҡан еренә вьетнам бальзамы һөртөп, өҫтән ҡурғаш ҡағыҙ менән ҡаплап, яулыҡ менән бәйләп ҡуйырға. Төнгөлөккә, өйҙә торғандар көндөҙ ҙә эшләй ала.

❖ Тигеҙ күләмдә йод менән яңы һығылған лимон һутын ҡатнаштырып, умыртҡалыҡтың буйынан-буйына һөртөргә. Әгәр йод һөртөлгән ер тәрһеҙләнһә, шул урын ауырта тигән һүҙ. Был дауаны бил ауыртыуы бөткәнсе эшләгеҙ.

### Сей ҡабаҡ

❖ Сей ҡабаҡ үт бүленеүен әүҙемләштерә, эсәктең тулҡын һымаҡ ҡыҫҡарыуын яйлай. Сей ҡабаҡты көнөнә 300-400 грамм ашаһаң, эс ауыртмаясаҡ.

### Һөйәкте нығытыу

❖ 1,5 ҡалаҡ кипкән бөтнөккә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 15 минут төнәтергә, һөҙөргә. Төнәтмәгә 2 балғалаҡ бал, 1 балғалаҡ лимон һуты өҫтәргә һәм 1 аҙна буйына көнөнә 3 тапҡыр 1/3 стакан эсергә.

### Майлы сәс өсөн

❖ Көҙ йәки яҙҙан ҡаҙып алынған 1өлөш әрем тамырына 10 өлөш ныҡ ҡайнар һыуға һалып, 10-15 минут һүрән утта тотаһың, һөҙәһең. Сәс төптәренә һөртәһең, йыуғас, сәсте сайҡау өсөн ҡулланырға ла була. Был сара сәс ҡойолоуҙан, ҡауаҡланыуҙан һаҡлай.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*

# ТЫЙЫУҘАР

### Юлға сығыу менән бәйле тыйыуҙар:

- Юлға сыҡҡан кеше артынан иҙән йыуып, һепереп, сүп түгеп ҡалмайҙар.
- Тәһәрәтһеҙ юлға сыҡма, ҡапыл үлеп ҡалыуың бар.
- Юл сатына ултырма, сир табырһың.
- Юлға сығырға йөрөһәң, тегеү текмә, юлың унмай.
- Юлға сыҡһаң, тегеү текмә, төймә таҡма.
- Юлға сыҡһаң, өйгә кире инергә ярамай, инһәң, көҙгөгә ҡара.
- Юлға сыҡһаң, артыңа боролоп ҡарама.
- Ете юл сатына өй һалма, йоҡларға ятма.
- Юлға сыҡҡан кеше артынан өйгә буш инмәйҙәр. Һыу, утын булһа ла күтәреп инергә кәрәк.

### Ваҡыт менән бәйле тыйыуҙар:

- Дүшәмбе, йома көн сәс, тырнаҡ ҡырҡырға ярамай.
- Дүшәмбе кер, иҙән йыуырға ярамай.
- Шишәмбе көн тәҙәлөш эшен башларға ярамай.
- Шишәмбе көн бысраҡ һыу түгергә ярамай.
- Шишәмбе көн яңы өйгә күсергә, өйләнергә ярамай.
- Шишәмбе көн мунса яғырға, тырнаҡ ҡырҡырға ярамай.
- Сәфәр айында өйләнергә ярамай.
- Ай, йыл һуңында оло эш башламайҙар.

### Аш-һыуға ҡағылышлы тыйыуҙар:

- Рәнйеү иң тәүҙә ризыҡтан эләгә, шунлыҡтан, аш-һыу әҙерләүҙе бисмиллаһыҙ башлама.
- Ашыңды өрөп эсмә.
- Икмәктең бөртөгөн дә тапарға ярамай.
- Өҫтәлдә ҡул һыртлы, ҡағыҙ менән һөртмә - фәҡирлек килер.
- Өҫтәлгә ултырырға ярамай.
- Өҫтәлгә ҡарап кирелмәйҙәр.
- Өҫтәлдә һыныҡ ҡалдырмайҙар.
- Өҫтәлдә бысаҡты төнгөләккә ҡалдырма.
- Баланы өҫтәлгә баҫтырмайҙар.
- Доға ҡылған саҡта бысаҡ өҫтәлдә ятмаһын.
- Хәйер таратҡанда, өҫтәлдә бысаҡ ятмаһын.
- Асҡысты өҫтәлгә һалма, бәлә килер.
- Ике бысаҡты бергә һалма, бола сыға.
- Яңы ғына бешкән икмәккә бысаҡ тейҙермәйҙәр, һындырып ҡына ашайҙар.
- Былыу ашты бора баҫмайҙар - юл унмай.
- Бутҡа бешергәндә ҡалағыңды ялама - кейәүең ашамһаҡ була.
- Ҡараңғыла ашама, кейәүең уғры булыр.

**Фәнирә ҒАЙСИНА.**
**(Дауамы бар).**

*ҠАЙТАУАЗ*

# "МАЛАЙҘАР ТУЛЫ ДОНЪЯМ"

**Гөлсимә Иштанованың "Малайҙар тулы донъям" тигән яҙмаһын уҡып, әллә ниндәй уйҙарға төшөп киттем. "Малайҙар әсәһе булыу саҡ ҡына икенсерәк" тигәнен уҡып... әсәйемде иҫләнем. Ул да бер-бер артлы тыуған ете малай әсәһе булды һәм йыш ҡына шул һүҙҙәрҙе ҡабатлай ине. Мин уны "шул малайҙарың..." тип нимәләлер гәйепләгәндә йәки ризаһыҙлығымды белдергәндә, ул "Малайҙар шулай була, улар икенсе була, улар һинең кеүек була алмай", тип аҡлана ине.**

Ысынлап та, малайҙар әсәһе, унан егеттәр әсәһе, унан килә ирҙәр әсәһе булыу икенсерәк, ҙурыраҡ, ауырыраҡ яуаплылыҡ ул. Был хәҡиҡәттә мин һәр береһе үҙе "закон" булған уландарының араһында ҡайнап йәшәп ғүмерен үткәргән әсәйем, әле егет ҡорона, үҫмерлеккә аяҡ баҫҡан малайҙарының йәйин яйлап бер булған еңгәләрем миҫалында аңланым. "Малайҙар алар тыуғанда ғына дан. Аҙаҡ ғүмер буйы уларға әсәй кәрәк. Ҡыҙҙар тиҙ генә үҙаллы була ла ҡуя. Малайҙарҙың бит ул ир еткәне лә, бисәләһе лә һинә мохтаж", - ти торғайны әсәйем.

Малайҙар әсәһе булыу ул үҙенде онотоу тигән һүҙ. Ирҙе аңлай алмаҫҡа ла, уның теләктәрен иҫәпкә алмаҫҡа ла була. Ә улдарының ундай ихтыяждарын тапай алмай әсәйҙәр. Улар малайҙарының холҡон да, ҡыҙыҡһыныуын да, кәйефен дә аңлай, күҙ ҡарашынан тойоп өйрәнә. Һәм шул холоҡҡа көйләнә лә. Ә инде ул малайҙар, мәҡәлә авторыныҡы кеүек, өсәү йәки беҙҙең әсәйҙеке кеүек етәү булғанда, был әсәй ниндәй сүрәткә инә алырға тейеш булалыр инде, миңә әйтеү ҡыйын.

Ә бит малайҙар улар бәләкәйҙән "ирҙәр" була. Уларҙың һәр береһе - үҙ биләмәһен, үҙ урынын биләгеһе килә. Бигерәк тә әсә йөрәгендә. Улар күп осраҡта ҡатыраҡ, ҡорораҡ, ҡырыҫыраҡ була. Асылып бармайҙар. Шул "йоҙаҡлы" әҙәмдәренең күңеленә инергә юнтыла нишләптер әсәйҙәр ҙә. Үҫә бара улар әсәйҙәрен бөтөнләй үҙ донъяларына индермәй ҙә кеүек була, әммә һәр береһе килеп ингәндән "Әсәй ҡайҙа?" тип һорай. Иллегә еткән ололары ла. Уларға күҙ күреме арауығында әсәйҙәрен күреп тороу кәрәк, мотлаҡ. Артыҡ һөйләшеп бармағанда ла, уларға шул бәйләнеш үтә лә кәрәк.

Ҡыҙҙар менән хәл икенсе төрләрәк. Әсәйем әйтмешләй, ҡыҙ балалар иртә ҡул аҫтына инә, улар үҙҙәре үк хәстәрле була. Әсәйҙәренә лә улар күберәк бала булып түгел, ә иптәш, серҙәш булып яҡынлай. Үҙҙәре әсәй булһа инде, сабыйҙарына, ғаиләләренә ҡаплана. Ҡыҙ балалар, ир балалар кеүек, әсәйҙән тик һөйөү генә талап итмәй, улар әсәйҙәренә үҙҙәре үк иғтибар бирә. Мәҫәләң, күп ҡыҙҙар әсәйҙәренең кейемен, сәләмәтлеген ҡайғырта. Яңғыҙ әсәйҙәренең ҡабаттан ғаилә ҡороуына ла ыңғай ҡарай. Ә ир балалар бындайҙы бик ауыр кисерә, хатта күп осраҡта ҡырҡа ҡаршы ла була. Сөнки улар әсәйҙәренә нығыраҡ бәйле, уның энергетикаһына мохтаж, уларҙа әсәһенә ҡарата шәхсилек тойғоһо ныҡ үҫешкән. Халыҡ араһында йөрөгән бер хикәйәттә лә шулай бит: унда ҡыҙ баланың кендек хәтере ун ике йәштә юйыла, бала тапһа, бөтөнләй иҫләмәй, ир баланың кендек хәтере үлгәнсе һаҡлана, тиелә.

Тормошта ир-егеттәрҙең проблемалары ҡатын-ҡыҙҙарҙыҡына ҡарағанда байтаҡҡа күберәк тә. Күп кенә яман ғәҙәттәр ҙә ни өсөндөр ир затына йоғоп барыусан. Ҡатындары ир затынан нимәләр көтә, өмөт итә, талап итә. Бик һирәк кенә ирҙәр психологик рәүештә был баҫымды күтәрә ала. Күтәрә алмағандарының ауырлығы әсәйҙәренә төшә. Әсәйҙәре борсола, ярҙамға ташлана, нисек тә терәк булырға тырыша. Күп әсәйҙәр хатта улдарының проблемаларын үҙ елкәләренә һалып ала. Шулайтып, эстән яна-яна, һыҙып ҡына ҡартая ул малайҙар әсәләре.

Ир-егеттәр менән әңгәмәләр үткәргәндә бер нәмәгә иғтибар иттем. Улар ни хәтлем олораҡ, шул хәтлем әсәләре тураһында күберәк һөйләйҙәр. Һәм күптәрендә әсәләренә ҡарата әйтелмәгән һөйөүгә, биреп еткерелмәгән иғтибарға, күрһәтелмәгән хөрмәткә ҡайтып ҡалған үкенес бар. Әсәләрен хәтерләгәндә илап ебәрергә лә тартынмай улар. Шул хәтлем хистәр быуалыр, күрәһең. Был уларҙың күңелендә бер йәрәхәт һымаҡ йәшәй икән. Ошо тәңгәлдә ҡатындарға бер кәңәш: ирҙәрегеҙҙе әсәйҙәренән айырмағыҙ. Улар араһындағы ептәрҙе шатырлатып өҙөү уларҙың икеһен дә бик тәрән рәнйетеү ул. Ир кеше быны бер ваҡытта ла онотмаясаҡ та, ғәфү ҙә итмәйәсәк. Ул йөрәгендә ошо рәнйеште мәңге алып йөрөп, шуның менән китеп тә барасаҡ.

Әсәйҙәрҙең улдарына ҡарата һөйөүҙәре сикһеҙ була, тинек. Һәм ҡайһы бер әсәйҙәр шул сикте сығып та китә. Аҙыраҡ ҡына тормош тәжрибәләре етмәгәндә улар киленләрен был һөйөүгә ҡул һуҙыусы итеп тә күреп ҡуя. Шунан китә инде был "мөхәббәт сығанағына" талаш-тартыш. Был да үҙенә күрә бер проблема.

Олоғайып, иҫе алышынғас, атайым ҡатынын да, балаларын да танаманы. Бары стеналағы өләсәйҙең портретын алдырып, "минең әсәйем" тип ҡосаҡлап ятты. Ярты быуаттан ашыу йәшәгән ҡатынын да, үҙ ҡанынан булған балаларын да онотто, ә әсәһе тураһындағы мәғлүмәт, уның төҫө лә, исеме лә аңынан юйылманы. Үәт бит хикмәт!

Һүҙемде йомғаҡлап, мин мәҡәлә авторы Гөлсимә Иштанова менән килешәм, тип әйтергә теләйем. Малайҙар, ысынлап та, әсә өсөн тышта ла, эстә лә, башта ла, йөрәктә лә... бар донъяны биләй улар. Үҙемә малайҙар әсәһе булырға яҙмаһа ла, мин был күренеште йылдар ағымында күҙәткәнмен. Әсәйемдең ир туғандарыма булған оло һөйөүенән, хатта үҙ-үҙен ҡорбан иткән һөйөүенән нисек араларға, аярға белмәй өҙгөләнгәнмен. Тик ҡотҡара алманым. Ул шул һөйөүендә янып-көйөп, арып-талып, бәлки, үҙенсә бәхетле булып йәшәп тә, баҡыйлыҡҡа күсте. Үҙе әйткәнсә, ҡыҙҙар теге донъяла әсәйҙәрен танымай, малайҙар танып килә, ти... Тимәк, теге донъяла ла ул шул һөйөүенә өмөт итә. Шунан, үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ инде...

Ошо тема буйынса гәзит уҡыусылары беҙҙән дә яҙмалар көтәбеҙ.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.**

# "КИТАП УҠЫУ ҺӘР САҠ ФАЙҘАҒАМЫ?"

**Бер нисә йыл элек мин "Киске Өфө"нөң әҙҙем авторы булып, рухи тормошобоҙҙағы үҙем ҡабул итеп бөтмәгән күренештәр хаҡында мәҡәләләр баҫтырып, ҡайһы бер гәзит уҡыусылар араһында бәхәстәр тыуҙырһам да, бала һәм үҫмер саҡта китаптан файҙа алыуҙан бигерәк, уның ҡорбаны булыу ҡурҡынысы хаҡында яҙырға, бик теләһәм дә, батырсылығым етмәне. Сөнки шулай уйлаусы мин бер үҙем генәлер кеүек ине. Шуға гәзиттең 37-се һанында "Китап уҡыу һәр ваҡыт файҙағамы?" тигән мәҡәләне ҙур ҡыҙыҡһыныу менән уҡып, уның авторы Миләүшә Ҡаһармpraeованың ҡыйыулығына һоҡландым, тиергә була. Ғөмүмән, миңә үҙенсәлекле фекерле был авторҙың йәмғиәткә саҡырыу ташларлыҡ яҙмалары бик оҡшай.**

Ысынлап та, ҡайһы бер социаль ҡалыптар быуаттар дауамында кешеләрҙең аңына шундай тәрән үтеп ингән, аксиомаға әйләнгән, шуға уларҙы инҡар итеү түгел, хатта еңелсә генә тәнҡитләргә лә ҡурҡаһың. Сөнки бөтә донъя башҡаса фекерләгәнең өсөн һинә ҡаршы сығыр кеүек. Һәм "Китап - белем шишмәһе, иң яҡшы дуҫ" - шундай стереотиптарҙың береһе булып тора.

Хәйер, мин был темаға бөтөнләй яҙманым да түгел. Өс йыл элек юбилейым уңайынан әлеге "Киске Өфө"лә баҫылған мәҡәләләремде үҙнәшер юлы менән ҙур булмаған тиражда китап итеп баҫтырып алғайным, шундағы "Баш һүҙ" рәүешендәге автобиографик мәҡәләнән өҙөк килтерәм. Шуны әйтергә кәрәк, унда һүҙ бөтә китаптар хаҡында түгел, ә совет осоронда социалистик реализм алымы менән яҙылған художестволы әҙәбиәт хаҡында бара. Ә беҙҙең бала саҡта һәм йәшлектә шуларҙан башҡа ниндәй китап булды һуң?

"...Мин йәш саҡта яҙыусы яҙғандарҙы күңелемә лакмус ҡағыҙы төҫлө һеңдерә инем. Соцреализм әҙәбиәте бит кешене ниндәйҙер кимелдә Павлик Морозов кеүек тәрбиәләүҙе маҡсат итеп ҡуйҙы. Ул уҡыусыны тормошто аҡ менән ҡараға ғына бүлергә, ғәҙеллек өсөн бер нигә ҡарамай алышырға, етешһеҙлектәргә түҙеп тормаҫҡа, дөрөҫлөктө күҙгә бәреп әйтергә өйрәтте. Әҫәрҙе уҡыйһың да, уның геройы кеүек, мотлаҡ көрәшсе һәм еңеүсе булғы килә. Хатта көрәшсе булмаһаң да, китап шауҡымында ыңғай геройҙар кеүек дөрөҫ йәшәргә, коммунизм төҙөүсенең иң яҡшы сифаттарын һиңдырырға тырышаһың, башҡаларҙан да шуны талап итәһең. Һин тырышаһың, әммә эргәндә бик күптәр китапса түгел, ә үҙҙәренсә йәшәй. Һәм улар фонында "дөрөҫ" булыуың арҡаһында күберәк отолоп тороп ҡалаһың. Йәиһә китап геройҙары кеүек булдыра алмаһаң, үҙеңде кәм күрәһең, хөрмәт итеүҙән туҡтайһың, үҙбаһаң кәмей. Китап уҡыуҙан ваз кисеүем - бына ошондай хәлдәргә үҙемсә протест белдереүем ине. Балаларыма ла бер ҡасан да, китап уҡығыҙ, тип әйтмәнем, минең "хата"ны ҡабатлауҙарынан ҡурҡтым. Шулай ҙа яҙмышыма янынан китаптар донъяһына ҡайтарыуы өсөн сикһеҙ рәхмәтлемен (һүҙ редакциянан китапханаға эшкә күсеүем хаҡында бара). Хәҙер аҡыл ултырған, шуға китапта яҙылғанды иләк аша үткәреп ҡабул итергә өйрәндем: сүбе тороп ҡала, кәрәге күңел төбөнә ята. Хәҙер шуны ла беләм: был тормошта көрәшмәһәң, тәнҡитләмәһәң, күп кенә көйһеҙлектәрҙе сабыр үткәрә белһәң, күберәк отаһың һәм уңышҡа ирешәһең икән..."

Әйе, оло кеше китапты тәнҡит күҙлегенән үткәреп уҡый, үҙенә кәрәген генә һеҙоп ала белә. Ә бит бала йә йәш кеше, ысынлап та, минең кеүек, китаптың ҡорбанына әйләнеүе һәм ысын тормошта әҙәбиәттәге уйҙырма донъяны эҙләп ҡаңғырыуы, үҙ-үҙенә үтә талапсан булып, минән булмай, мин герой кеүек түгел, тип, күп кенә хыялдарын ысынға ашырырға ынтылмауы, бөтөнләй икенсе тормош менән йәшәүе һәм аҙаҡ, бөтәһен дә аңлағас, үкенеүе мөмкин. Быны китапты һыу кеүек эскән балаларҙың атаәсәләре һәм әҙәбиәт уҡытыусылары мотлаҡ иҫәпкә алырға һәм ошо хаҡта әңгәмә ҡороп торорға тейеш, тигән автор фекере менән тулыһынса килешәм.

**Рәхимә МУСИНА.**
**Әбйәлил районы.**

*МИНЕҢ ЫРЫУЫМ*

# ТАБЫНДАР БЕҘ

**Шөкөр, һуңғы йылдарҙа милләттәштәр үҙ тамырын, үҙ ҡәүемен, үҙ ырыуын, йәғни үҙенең башланмышын юллай, эҙләнә, ҡыҙыҡһына. Кемдәр үҙ ырыуы тарихын ошолай, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, күренекле ғалим Ғайса Батыргәрәй улы Хөсәйенов кеүек тасуирлай ала, яҙып ебәрегеҙ беҙгә. "Минең ырыуым" рубрикаһы һеҙҙең өсөн. Шулай итеп, һүҙ Ғайса ХӨСӘЙЕНОВҡа:**



Балиғ булғас, йәнә бер хәҡиҡәткә төшөндөм: донъяла халыҡ хәтере тигән тос төшөнсә бар икән. Айырым кешеләр, шәхестәр, айырата аҡһаҡалдар хәтеренән йыйылып хасил була икән ул. Ата-бабалары хаҡында, ауылы, ырыуҙарындағы, ил-йорттағы мөһим хәл-ваҡиғалар тураһында ата - улға, улы үҙ улына, ҡыҙына һөйләп ҡалдырыр, улары яңынан-яңы быуындарға тапшырыр булған - шул ғәҙәт-йолаға әүерелгән. Башҡорттарҙа, мәҫәлән, ете быуын ата-бабаңды белеү, ырыу шәжәрәһен һаҡлау, халыҡтың тарихы менән таныш булыу фарыз һаналған. Ул үҙенсә аманат рәүешен алған.

Мин үҙем табын ырыуы башҡортомон. Мәғлүм булыуынса, табын - башҡорттарҙың иң эре ырыуҙарының береһе. Ул үҙе генә лә әллә нисәмә ырыу-түбә тармаҡлы: барын табын, ҡара табын, иҙел табын, туҡсоран табын, ыҡ-сөн табын, ҡыуаҡан табын, теләү табын. Улар географик-территориаль яҡтан көнбайыштан Ыҡ йылғаһы буйҙарынан көнсығышта Тубыл йылғаһынаса, көньяҡтан Туҡ-Соран, Ырғыҙ-Кәмәлек буйҙарынан төньяҡҡа Танып, Кама йылғаларынаса тармаҡланып, Көньяҡ Уралды, Яйыҡ буйҙарын иңләп йәйелеп ята. Урал тауҙары шикелле армыт-армыт, Ағиҙел шикелле тармаҡ-тармаҡ улар. Был тармаҡ-тармаҡ, аймаҡ-аймаҡ ете табын ырыуының күпселегендә үҙенең тулы шәжәрәләре һаҡланған, арала ырыу яҙмалары киҫәк-ҡосаҡ ҡына булғаны, йә өҙөлөп ҡалғаны, иң аяныһы, бөтөнләй юғалғаны ла юҡ түгел.

Бәхетебеҙгә күрә, беҙҙең иҙел табын ырыуының иң тулы шәжәрәһе арҙаҡлы ырыуҙашыбыҙ, ғалим һәм әҙип Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың хәстәрлеге арҡаһында "Йәдкәр" китабында ташҡа баҫылып тарихҡа уҡ ингән. Һүҙемде ырыуымдан башлағас, халыҡ хәтере ебен тарихтан хәҙергегә табан, үҙемдең хәтирәләр осон төпкөлдән бөгөнгөгә ҡарай тәбиғи ағышында һуҙырға тырышырмын.

Шуныһы ғәжәп, ете башҡорт ырыуынан табын үҙе лә ете ырыу тармаҡлы, шуның бер тармағы беҙҙең иҙел табын да ете аймаҡлы: кесе табын, кәлсер табын, йомран табын, ҡумырыҡ табын, дыуан табын, төкөн табын, бишул табын. Ете һанын, ғөмүмән, ғәжәйеп тылсымлы һанға һанайҙар. Ете башҡорт ырыуы, ете табын тармағы, ете табын аймағы үҙенсә ишле, ырыҫлы, күрәһең. Минең дыуан табын аймағымдың йәнә Күрпәс исеменә бәйле ишле ҡуштары бар: дыуан-күрпәс табын, йомран-күрпәс табын, ҡумырыҡ-күрпәс табын, бишул-күрпәс табын, кенәзләр-күрпәс табын. Йәғни, минең ырыуым - Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың йомран-күрпәстәргә иң яҡын туған ырыуҙаш. Дауыт Юлтый ҙа шул йомран-күрпәстән. Мәжит Ғафури кәлсер табындан - атаҡлы туған ырыуҙаштар.

Иҙел табын шәжәрәһен бик борондан Төмән бейҙән башлайҙар. Тарихсылар Төмән бейҙе легендар Ашин хандың ейәне - тарихи шәхес, тип раҫлай. Боронғо Ҡытай документтарында ул Түмән хан, орхон-йәнәсәй ташъяҙмаларында Тумын ҡаған исемендә осрай. Төмәндең улы - Майҡы бей. Легендаларҙа ҡаҙаҡ, башҡорт, ҡарағалпаҡ, табын ырыуҙарының башлығы Майҡы бей Сыңғыҙ хан заманында йәшәгән һәм хандан бейлек дәрәжәһен алған шәхес булып күренә.

XIV быуаттағы атаҡлы фарсы тарихсыһы Рәшитетдиндең "Жәмиғ әл-тауарих" китабында Майҡы бей - Сыңғыҙ хандың яу башлыҡтарының береһе, тип яҙылған. М. Өмөтбаев "Кесе табын халҡының бабалары..." тарихи яҙмаһында быны артабан былай бәйән ҡыла: "...Төмән бей, унан тыумыш Майҡы. Ул Ҡара диңгеҙ тамағынан был яҡҡа сығып, үҙе бәйғәт (ант) биргән. Әммә ата йорто Ҡырым һәм Кубань тарафын ҡалдырып, унан үргә буйлап, Яйыҡ башынан Тубыл (Тобол) һыуынан Иртышҡаса тиклем барып, ер биләп, үҙенә тәбиғ (буйһондорған) халыҡтар менән ҙур хан булып торған. Тағы шул ҡәҙәреһе мәғлүмдер: был Майҡы бей мәшһүр һәм мәғрүф (күренекле) булған. Сыңғыҙ арайы Тимер Таймучин хандың иң ҙур бейҙәренән булып, ҡағиҙә һәм ғәләмәттәр алған. Йәғни Сыңғыҙ хан Майҡы бейгә тамғаларҙан - ҡабырға тамға, ағастарҙан - ҡарағас, ҡоштарҙан - ҡарағош, оран өсөн "салауат" тигән һүҙҙе биргән".

Ғәлиулла бабайым: "Беҙҙең дыуан табындары, ата-бабаларыбыҙ, бик йыраҡтан, Ябыҡҡарағайҡапҡа яғынан күсеп килгән", - тип, көнсығышты, Урал тауҙары тарафын ҡулдары менән ишаралап һөйләгәне хәтерҙә ҡалған. Мин әле ул саҡта йәш башым менән был һүҙҙәргә артыҡ иғтибар итмәй, Урал буйынан йә Урал тауҙары аръяғынан күсеп килгәндәрҙер, тип уйлай торғайным. Аҙаҡ ғилем эше менән шөғөлләнгән йылдарымда был Ябыҡҡарағайҡапҡа тигән ерҙең Себерҙә Иртыш буйында, хәҙерге Тайга тигән кескәй ҡала янындағы урын булғанлығын белеп хайран иттем.

Легендаларҙан ишетеүемсә, уларҙың бында Байсығур тигән батыр башлыҡтары ла булған. Улар бик борон төп ватандары - Алтай тауҙарынан сыҡҡан. М. Өмөтбаев шәжәрә тарихын былай дауам итә: "Майҡы бейҙән тыумыш Солтан бей, унан тыумыш Әсәди бей, унан тыумыш Күрпәс бей. Әсәди бей менән Шәкәрле бей Себер йортонда Ибаҡ, Шибаҡ тигән Сыңғыҙ нәселенән булған ике ханға тәбиғ булып торған заманда, был хандар барса бейҙәрҙе үлтермәгә ҡасд ҡылған (теләгән). Быны ханға яҡын бер кеше ике бейҙе иҫкәртеп: "Башығыҙҙы алып ҡасығыҙ, юҡһа, һәләк булырһығыҙ!" - тигән. Әсәди бей менән Шәкәрле бей аттарына менеп ҡасҡан. Хан кешеләре ҡыуып таба алмаған. Ҡатай халҡы ер бирмәгәс, унан үтеп, Инйәр дарьяһын буйлап килеп, Ағиҙелгә еткәндәр. Ағиҙелде буйлап, түбән Өфө иҙеле менән ике арала, Ҡарлуғ исемле бер күл атауында бер аҙ әҙәмдәргә юлығып, хәл-әхүәл һорашҡандар. Был кешеләр әйткән: "Ун бер ырыулыҡбыҙ, мең йәнлебеҙ". Мең ырыуы исемләнгәндәр. Ҡайһыларҙың бейҙәренән Ағиҙелдән Йыуалыкүл тамағынан Ҡыуғанаҡ тамағына саҡлы биләмәк ер һорағандар. Иҙелгә аҡҡан һыуҙары менән ер алғандар. Ҡайһы мең ырыуында мал-хайуанын, йәғни йылҡы, һыйырҙарын ҡалдырмай, ҡалмыҡтар алып киткән икән. Әммә Әсәди менән Шәкәрле бей мал биргән һәм олуғ мең ырыуынан ефетләнеп (өйләнешеп), был Табын иләүенә баш булып ғүмер иткән". Бынан, Әсәди бейҙең Себерҙә Ибаҡ (Ибраһим) менән Шибаҡ (Шайбани) хандар ҡул аҫтында булғанынан күренеүенсә, ул шайбаниҙар династияһындағы хандар осоронда, йәғни XV быуаттың икенсе яртыһында йәшәгәнлеге һәм шул хандар менән тыныша алмай, Уралға, Ағиҙел буйҙарына ҡасып киткәнлектәре - табындарҙың Себерҙән Ағиҙел буйына күсенеү тарихы асыҡлана.

Әсәди бейҙең улы - Күрпәс бей. Был - минең тыуған Үтәгән ауылым да инер дыуан-күрпәс табын аймағын нигеҙләгән бей. Күрпәс бей, М. Өмөтбаев әлеге шәжәрәһендә яҙыуынса, Иван Грозный Ҡаҙанды яулап алғас, уға үҙ ихтыяры менән барып, батшаға тоғро хеҙмәт итергә ант биргән һәм үҙ ырыу ерҙәрен биләргә, ергә, бейлегенә ярлыҡ-грамота алып ҡайтҡан. Ул ерҙәр Ағиҙелдең ике яғын киң иңләп, Инйәр йылғаһы тарафынан көньяҡҡа Ҡыуғанаҡ, Ташлы йылғалары тамағына саҡлы йәйелеп ятҡан, буғай. Улар Дыуан-Күрпәс биләмәләре тип аталыр булған. Шулар эсендә Үтәгән тоҡомдары ла ерләшеп йәшәгән. Шуға күрә, Үтәгән бабамдың ата-бабаларының ергә урыҫ батшалары ярлығы менән хужа булып, ауыл ҡороп йәшәгән бер башы XVI быуат уртаһына ҡарай. Тимәк, әүәл-әүәлге Үтәгәндең тәү нигеҙ ҡаҙығы 1557-1560 йылдарҙа уҡ ҡағылыуы ихтимал. Бынан 440 йылдар әүәл. Был - Күрпәс бей бабабыҙ дәүере. Күрпәс бейҙең улы - Дәүләткилде бей. Уның улы - Байтирәк бей. Байтирәктең бер улы - Аҡбирҙе бей. Беҙҙең дыуан-күрпәс табындарҙың бер шәжәрә осо шунда өҙөлөп ҡалғандай итә.

**Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Филипп НЕФЕДОВ*

## ХАЛЫҠ БАТЫРЫ САЛАУАТ

Уртаҡ бәлә башҡорттарҙың элекке берҙәмлеген һәм бәйләнештәрен яңынан тергеҙә; ризаһыҙлыҡ тулҡыны таулы Башҡортостанды ла, дала башҡорттарын да ҡайтанан ялмап ала. Башҡорттарға атыу ҡоралдары һатыуҙы тыйыуҙың файҙаһы булмай: баш күтәреү көсәйә һәм тарала ғына бара. 1676 йылда башҡорт старшинаһы Сәйет башҡорттарҙы, татарҙарҙы, мишәрҙәрҙе яуға күтәрә һәм Сәйет болаһы тотош биш йылға һуҙыла. Ниһайәт, бола баҫтырыла, ғәйеплеләр язалана, ләкин быны менән генә тыныслыҡ урынлашмай, сөнки уның сәбәптәре ҡала килә. Ете йылдан башҡорттар йәнә күтәрелә. Тағы язалауҙар, тағы башҡорттарға һәм башҡа халыҡтарға ҡорал һатыуҙы тыйыу тураһында бойороҡ; һәм шул уҡ ваҡытта ҡыҫымды ҡәтғи "тыйыу" менән бергә уларға ҡарата "яғымлы мөғәмәлә" һаҡлауҙы булдырып, "батшаның шәфҡәтлелегенә өмөтләндерергә" күрһәтмә бирелә. Ошо "яғымлы мөғәмәлә" булдырып, "өмөтләндереү" менән Башҡортостан өсөн урыҫ подданныйлығының беренсе - Мәскәү осоро тамамлана.

Башҡортостандың икенсе, петербург осоро, обер-комиссар Сергеев хакимлығынан башлана. Уның "эшмәкәрлеге" иһә талау һәм һәр төрлө көсләүҙәр менән генә сикләнмәй, ә арыраҡ үтеп инә: ул оятһыҙ рәүештә халыҡ диненән көлә; башҡорт старшиналарын саҡырып алып, уларҙы аяҡтан йыҡҡансы эсерә. Обер-комиссарҙың ҡылыҡтары халыҡты күтәрелергә мәжбүр итә. Алдар Иҫәкәев етәкселек иткән был ихтилалға бөтөн мосолман халыҡтары ҡушыла. Һигеҙ полк менән ебәрелгән воевода Хованский боланы баҫтырыуға өлгәшә. Император Петр Беренсе етәкселәренән башҡа боласыларҙы ярлыҡай, ә Сергеевты хөкөм итеп, язаларға ҡуша.

1734 йылдан башҡорт ерҙәрендә тау заводтары һалына башлай. Бының өсөн ерҙәр бушлай һәм мәңгелеккә тартып алына. Был хәл, Ырымбур ҡалаһына нигеҙ һалыу тураһындағы проекттың раҫланыуы менән бәйле, тағы ла халыҡ күтәрелешенә килтерә. Башҡорттар Ырымбур комиссияһы командиры, сенаттың элекке обер-секретары Кириловҡа ул яңы ҡала төҙөргә хыялланған Орь йылғаһы тамағына үткәрмәйәсәктәре тураһында хәбәр итәләр; ләкин Кирилов был хәбәрҙе илтифат ҡылмай һәм ҡорал менән үҙенә юл ярыуға өлгәшә һәм Ырымбурға нигеҙ һала. Боланы баҫтырырға ғәскәр менән Ҡаҙан губернаторы Мусин-Пушкин килә, уны генерал-лейтенант Румянцев алыштыра, ә Кирилов ваҡытлыса Петербургҡа саҡыртыла. Румянцев бик "эшлекле" ҡылана, бик күп башҡорттарҙы әсирлеккә ала. Башҡорт ауылдарын яндыра, шуға ҡарамаҫтан, бола баҫылмай. Элекке саралар ҡулланыла, яңылары сығарыла: 1736 йылғы указ буйынса башҡорттарға ҡорал һәм тимерлек тотоу, Ҡаҙан татарҙарынан ҡатындарға өйләнеү тыйыла; мосолман руханиҙары һаны ҡыҫҡартыла; ерҙәре тартып алынып, болаға ҡушылмаған сит халыҡтарға таратыла.

**(Дауамы бар).**

# ИНВЕСТОРҘАР

## Беҙҙең талаптарға

**Үҙе эшләгән тармаҡты, уның бөтә нескәлеген ябай һәм аңлайышлы телдә аңлатып бирә алыу оҫталығы менән һәр кем маҡтана алмай. Ә бөгөнгө ҡунағыбыҙ, Башҡорт дәүләт университетының Иҡтисад, финанс һәм эшҡыуарлыҡ институты финанс һәм һалым һалыу кафедраһы мөдире, иҡтисад фәндәре кандидаты, доцент Гүзәлиә Әбҡадир ҡыҙы ҒӘЛИМОВА ил иҡтисадының бөгөнгөһө, уға бәйле башҡа төшөнсәләр тураһында аныҡ һәм тулы мәғлүмәт бирҙе. Әңгәмәсем шулай уҡ үҙенең бала саҡ хәтирәләрен барлап, һөнәренә алып килгән юлдарҙы байҡап, бөгөнгө көн студенттарына хас һыҙаттарҙы ла билдәләп үтте.**

### Бала саҡ хәтирәләре

Атай-әсәйем Ҡаҙағстандың Ҡарағанда ҡалаһында йәшәгән һәм мин шунда тыуғанмын, ләкин миңә 4-5 йәштәр тирәһендә улар үҙҙәренең тыуған ауылына, иҫ киткес тәбиғәтле, бейек тауҙар менән уратып алынған Салауат районы Башҡорт Илсекәйе ауылына күсеп ҡайтҡан. Шуға күрә үҙемдең бала сағым хәтирәләренә бәйле, йәшлек йылдары үткән һәм бөтә нәҫел ебем тамыр ебәргән ошо ауылды үҙемдең тыуған төйәгем тип һанайым. Ғөмүмән, Ҡаҙағстан яҡтарын бер ҡасан да тыуған яғым тип хис итмәнем, сөнки һәр йәйҙе туғандарым менән Башҡорт Илсекәйендә үткәрә инек. Ҡарағандала йәшәгәндә әсәйем үҙенең тыуған ауылын ныҡ һағынды. Шуға күрә беҙ йәйҙәрҙе ауылда үткәрер булдыҡ. Илсекәйгә барыуға әҙерлек ҡыштың уртаһынан башланып, каникулдың тәүге көндәрендә үк Салауат яҡтарына юлға сығыр инек. Ә ҡышҡы оҙон кистәрҙә бергәләп ултырып йәй хәтирәләрен барлап, ауылға бәйле төрлө ҡыҙыҡ хәл-ваҡиғаларҙы иҫләп, үҙебеҙ йыйған еләк-емешкә ҡушып сәйҙәр эсеп кинәнер булдыҡ. Шулай итеп, ҡалала тыуһаҡ та, уны хушһынманыҡ һәм атай-әсәйемдең ауылға күсергә хәл итеүен ҙур шатлыҡ менән ҡабул иттек. Йәшәйештең матурлығы ғаиләңә генә түгел, ә эргәндә көн иткән кешеләрҙең ниндәй булыуына туранан-тура бәйле. Ә минең ауылдаштарым ихлас һәм ярҙамсыл, яҡшы күңеллеләр. Шуға күрә бала сағым хәтирәләре йөрәгемдә тик матур иҫтәлектәр генә һаҡлай.

### Интернатым - пар ҡанатым

Бала сағымдан үҙемдең киләсәгем тураһында уйландым, пландар ҡорҙом, ниндәй һөнәр үҙләштерергә тигән һорауға яуап эҙләнем. Белемгә ынтылышым һәр ваҡыт көслө булды. Башланғыс кластарҙы тамамлаған йылды Өфөләге 1-се мәктәп-интернат тураһында ишетеп, атай-әсәйемдән шунда уҡырға ебәреүҙәрен һораным. Ләкин кем бәләкәй генә балаһын янынан сығарып ебәргеһе килһен - риза булманылар һәм ауылда ҡалдым. Шулай ҙа 7-се класты тамамлағас, башҡаса минең баҫымға ҡаршы тора алмайынса, 1-се интернат-мәктәпкә уҡырға алып килделәр. Интернатта үткән өс йыл ғүмерем дә тормошомдоң иң яҡшы мәлдәренең береһе булып күңел түремдә йәшәй. Әүҙем, тырыш, уҡыуға һәләтле, бөтә яңы нәмәне үҙләштереүгә сос малайҙар һәм ҡыҙҙар уҡыныҡ. Яҡын дуҫтарға әйләнгән синыфташтар менән әле лә тығыҙ аралашып йәшәйбеҙ.

### Һөнәр осраҡлы булмай

Кешенең һөнәре осраҡлы булмай, минеңсә. Мин бала саҡтан үҙемде уҡытыусы итеп күрҙем. Мәктәпте тамамлағас, аңлы рәүештә уҡырға инмәйенсә, үҙебеҙҙең районға ҡайтып, мәктәпкә эшкә урынлаштым. Ошо бер йыл эсендә мәктәптә эшләүҙең ни тиклем ауыр икәнен аңланым. Бында минең махсус белемемдең юҡлығы ла, кисә генә үҙем уҡыусылар рәтендә булып, бөгөн килеп мөғәллимлеккә тотоноуым да үҙ ролен уйнағандыр. Уҡытыусы хеҙмәтенең ни тиклем рухи көс талап иткәнен, балаларға белем тауына артылыуҙа ярҙам итеү ғәйәт ауыр булыуын төшөнөп, ғүмеремде был һөнәр менән бәйләү теләгенән һүрелдем.

Ә ниндәй һөнәр һайларға, үҙемде ниндәй өлкәлә табырға, тигән һорауҙарға яуапты тормош үҙе бирҙе. Уҙған быуаттың 90-сы йылдарында илебеҙ иҡтисады бик ауыр хәлдә ине. Етешереүсәнлек юҡ кимәлендә, үҫеш күҙәтелмәй, халыҡтың иҡтисади хәле мөшкөл саҡ. Ошоларҙың барыһын да күреп йөрөп, әлеге өлкәне төптән өйрәнеү, йәшәйешебеҙҙең тотороҡло булыуында төп ролде уйнаған тармаҡты профессиональ күҙлектән аңларға тырышыу Башҡорт дәүләт университетының география һәм иҡтисад факультетына алып килде. Студент йылдарым уңышлы булды. Һайлаған һөнәрем үҙемә оҡшағанлыҡтан, уҡыу еңел бирелде. Диплом алғас, Исхаҡова Фәниә Сәғәҙи ҡыҙы һәм башҡа уҡытыусыларымдың саҡырыуы буйынса университетта эшкә ҡалып, студенттарға белем бирә башланым. Коллегаларымдың ғилми яҡҡа ла иғтибар бүлергә тигәндәрен иғтибарға алып, аспирантура тамамланым. Шулай итеп, остаздарымдың фатихаһы менән бала саҡтағы мөғәллимлек хыялы ла тормошҡа ашты. Рәхмәтлемен уларға.

### Диплом түгел, белем мәртәбәле

Бөгөнгө көндә иҡтисадсы һөнәрен күп уҡыу йорттары уҡыта. Шуға күрә беҙҙең төп бурыс - хеҙмәт базарында конкурент булырлыҡ, беҙҙә үҙләштергән белемен эшендә маҡсатлы ҡуллана белеүсе белгестәр әҙерләп сығарыу. Ҡыҙғанысҡа күрә, бөгөнгө көн студенттарының күпселеге уҡыу йортона белем алырға, үҙе һайлаған һөнәрҙең бөтә нескәлеген төшөнөп, шул өлкәлә юғары квалификациялы белгес булып сығырға түгел, ә ҡулдарына тик диплом алыу өсөн генә килә. Улар уйлағанса, ҡулдағы матур диплом яҡшы, аҡсалы эш урынына юл асмай, сөнки эш биреүсегә папкала ятҡан диплом күсермәһе түгел, ә үҙ эшенең оҫтаһы кәрәк.

Уҡыу - ҙур эш. Студентты бер кем дә контролдә тотмай, уның дәресе эшләнгәнме-юҡмы икәнен тикшермәй, атай-әсәй тикшереп торһон өсөн көндәлек тигән нәмә юҡ. Ул үҙ-үҙенә хужа. Кемдер ошоно дөрөҫ һәм файҙалы итеп ҡуллана, икенселәр бер семестрҙан икенсеһенә тиклем уҡыуына ҡул һелтәп йөрөй. Көндө бер тәртипкә көйләргә өйрәнеү, бөтә бирелгән эштәрҙе ваҡытында башҡарыу, лекцияларҙы ҡалдырмай йөрөү, практик дәрестәргә ентекле әҙерләнеү, мәҡәләләр яҙыу - быларҙың барыһы ла йәш кешенең үҙе өҫтөндә эшләй алыуы тураһында һөйләй. Бындай студент эшләй башлағас та яҡшы белгес буласаҡ. Ошоно иҫтә тотоп, беҙ иҡтисади өлкәгә ҡағылышлы белем биреү менән бер рәттән, студентҡа эшләргә өйрәтеүҙе маҡсат итеп ҡуйғанбыҙ. Бында физик эшкә түгел, ә мейене эшләтеү, уйларға өйрәтеү тураһында һүҙ бара.

Бөгөнгө көндә белем алыу өсөн мөмкинлектәр ҙур. Мәктәп, университеттағы дәрестәрҙән тыш, төрлө яҡлап аң кимәлен үҫтерергә була. Теләге булған кеше әллә нисә сит телде өйрәнә, төрлө түңәрәктәргә йөрөй, үҙен бөтә яҡлап та камиллаштырырға тырыша. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, беҙгә уҡырға килгән студенттарҙың белем кимәле йылдан-йыл һайыға бара. Улар араһында үҙенең фекерен тулы, аныҡ итеп әйтә, уны ҡағыҙға төшөрә белмәгәндәр күп. Шулай уҡ уҡығандарын тәфсирләп һөйләү кимәле лә ныҡ аҡһай. Баштарында бар, ләкин шуны формалаштыра алмайҙар, ә мәктәпте тамамлаған кеше быларҙың барыһын да һәйбәт белергә тейеш. Әлбиттә, бөтә кеше лә оҫта сығыш яһаусы була алмай, шулай ҙа үҙ фекерен, уйын башҡалар аңлағандай итеп әйтә белергә өйрәнергә була, тип уйлайым. Кемгәлер кеше алдында асылып һөйләү, ғөмүмән, күмәк кеше араһында булыу психологик йәһәттән ауырға тура килһә лә, үҙенең ҡурҡыуын баҫып, үҙен үҙе еңеп һөйләй, тырыша, белемен арттыра һәм уҡыуҙа ғына түгел, тормошта ла уңышҡа өлгәшә. "Ҡара тырыш", тиҙәр улар хаҡында халыҡта. Ә, теләһә, артыҡ көс һалмайынса ла уҡый алған ҡайһы берәүҙәр әллә ялҡаулыҡтарына, әллә шул тиклем дә бошмаҫ булыуҙарына барып, уҡыуҙарына "бармаҡ аша" ҡарай. Иҫәпкә бар, һанға юҡ, тип әйтер инем.

Бынан 10-20 йыл элек иҡтисадсы һөнәренә ҡағылышлы ажиотаж һүнеүгә бара. Ошо ваҡыт эсендә диплом алған иҡтисадсылар хеҙмәт итерлек йәштә, шуға күрә төбәктә был һөнәргә күпләп уҡытыуҙан мәғәнә юҡ. Иҡтисадсыларҙың күп, ә эш урындарының әҙ булыуы, тәбиғи, уҡыу йорттарында бюджет урындарының кәмеүенә килтерҙе. Шуға күрә хәҙер күптәр Мәскәү, Санкт-Петербург кеүек, бюджет урындары күберәк булған юғары уҡыу йорттарына китә. Ситкә белем эстәргә юлланыусыларҙың күп булыуы уҡырға инеү өсөн мөмкинлектәрҙең артыуына ла бәйле, әлбиттә. Мәҫәлән, элекке кеүек аҙнаайҙар буйы имтихан биреп ятаһы түгел, өйҙә ултырып ҡына ла документтарҙы тапшырырға мөмкин. Шулай уҡ бер нисә уҡыу йортона ғариза яҙыу мөмкинлеге лә үҙ ролен уйнай. Ҡайҙа уҡыһалар ҙа, дипломдың түгел, ә белемдең һанланыуын иҫтә тотһалар, кәм-хур булмаҫтар йәштәр.

### Иҡтисад

Беҙҙең ил иҡтисады әлеге ваҡытта еңел булмаған мәлдәр кисерә. Иҡтисадты күтәреү өсөн аҡса, ә ҡаҙна тулы булһын өсөн инвестициялар килеүе мөһим. Ә бөгөнгө көндә Башҡортостанға һәм, ғөмүмән, Рәсәйгә килгән ивестициялар юҡ кимәлендә. Шулай уҡ ҡайһы берәүҙәр ситтән килеп, беҙҙә эш башлаусыларға кире ҡараша. Әгәр ҙә бындай инвестор төбәктә рәсми теркәлеү үтеп, предприятиеһында урындағы халыҡты эш менән тәьмин итһә, төбәк ҡаҙнаһына һалым түләһә, уның эшмәкәрлегенә



***Һәр кем үҙендә аҡса тотоноу оҫталығын тәрбиәләргә тейеш. Килем ниндәй суммала булыуына ҡарамаҫтан, ай һайын уның 10 процентын тотонмайынса, һалып ҡуйырға кәрәк. Өйҙә һаҡлайһыңмы уны, банкка һалаһыңмы, ләкин запас аҡса мотлаҡ ятырға тейеш.***
***Иҡтисадсы - аҡса менән идара итеүсе. Ғаиләнең килем-сығымдары менән идара итеүсеһе лә булырға тейеш. Ғөмүмән, килемде генә түгел, сығымды ла һанап барырға кәрәк. Бер ай ғына булһа ла өйҙән күпме аҡса сыҡҡанлығын һәм уның нимәгә тотонолғанын яҙып барғанда ла ни тиклем аңһыҙ рәүештә аҡса түккәнде күрергә була.***

✓ **Ипотека түләмә ғаиләгә килгән дөйөм килемдең 50 процентынан артыҡ булмаҫҡа тейеш. Ипотека түләп бөткәнсе, ундай ғаилә ағзаларының аҡса еткерә алмағанлыҡтан бөтә нервылары ҡаҡшап, һаулыҡтары бөтәсәк.**

аяҡ салырға кәрәкмәй, миненсә. Был, һис шикһеҙ, ыңғай күренеш. Ләкин барлыҡ "килеүселәр" ҙә быға ынтылмай. Әлеге көндә эш урындарының кәмеүе төбәктең иң ҙур проблемаларының береһе. Шуға күрә, төбәккә килергә теләгән инвесторҙарҙың урындағы халыҡты эш менән тәьмин итеүен талап итергә кәрәк, сөнки, эше булһа, кешенең янсығы ла буш булмай. Ул урындағы магазиндарға, башҡа хеҙмәт күрһәтеүсе ойошмаларға йөрөй, балаһын балалар баҡсаһына, төрлө түңәрәктәргә йөрөтә, сәйәхәт итә. Ошо рәүешле аҡсаның әйләнеше барлыҡҡа килә һәм бынан барыһы ла ота. Шулай уҡ беҙҙә урынлашып та, рәсми теркәлеүҙе Мәскәүҙә үтеп, һалымды

үстерергә түгел, ә уның тотороҡлолоғон һаҡлап ҡалырға тырышырға кәрәк" тигән фекере менән килешәм. Беҙ оҙайлы көрсөктә йәшәп, иҡтисадтың кинәт кенә күтәрелеүенә психологик йәһәттән әҙер түгелбеҙ. Шуныһы ла бар - иҡтисад үҫһен өсөн уға бик күп аҡса һалырға кәрәк. Ә быны өсөн илдә төбө-тамыры менән коррупция юҡ ителергә һәм һәр кем үҙенең эшен максималь рәүештә һөҙөмтәле итеп башҡарырға өйрәнергә тейеш. Бөгөнгө көндә был ике күрһәткес буйынса ла ныҡ аҡһайбыҙ. Шулай уҡ әлеге мәлдә кешенең аҡсаһы әҙ. Бөтәһе лә билдәрен ҡыҫып быуҙы, сығымдарҙы бик уйлап ҡына башҡара, өҫтәмә килем килтереүсе сығанаҡ

тулыландырыла. Әгәр халыҡтың аҡсаһы юҡ икән, ул нисек һалым түләһен? Ә уны барыбер түләргә кәрәк. Ваҡытында өлгөртмәһәң, штраф һәм пеняла ла өҫтәлә. Шуға күрә, ил хөкүмәте коммерция банктары биргән кредиттарҙың процент ставкаһын төшөрөргә мәжбүр итә һәм халыҡ кредит арзанайҙы тип, банктарға йомола. Ләкин беҙҙең граждандар ихтыяжын үҙенә насарлыҡ килтермәҫлек итеп көйләй белмәй һәм мөһим булмаған әйбер өсөн кредит юллай башлай. Өҫтөнлөктәрҙе дөрөҫ ҡуя белмәйбеҙ һәм ошонан үҙебеҙ үк зыян күрәбеҙ. Банк бер ҡасан да үҙенә зыянға эшләмәйәсәк икәнен һәр саҡ иҫтә тоторға кәрәк.

# КӘРӘК...

## күнгәндәре

шунда түләгән ойошмаларҙан Башҡортостанға ниндәй файҙа, беҙҙең тормошто яҡшыртыуҙа уларҙың ниндәй роле бар? Юҡ. Шуға күрә, ситтән килеүсе инвесторҙарҙы йәлеп итергә, ләкин уларҙың барыһын да түгел, ә үҙебеҙҙең файҙаға булған талаптарҙы үтәргә әҙер булғандарын ғына ҡабул итергә өйрәнергә кәрәк.

Бөгөнгө көндә өс төр һалымдан килгән аҡса ғына төбәк ҡаҙнаһында ҡала. Улар иҫәбенә предприятие мөлкәтенән, транспорттан һәм уйын эшҡыуарлығынан (ҡайһы бер төбәктәрҙә генә) килгән һалымдар инә. Шуға күрә күпселек төбәктәр федераль үҙәктән килгән дотацияға бәйле. Әйткәндәй, уларҙың күләме бер иш түгел һәм ҡайһы бер төбәктәр 50-шәр миллиард һум дотация алһа, икенселәренә күпкә әҙерәк тейә. Ә ниндәйҙер төбәктәр бөтөнләй дотацияһыҙ ҡала. Улар, киреһенсә, федераль бюджетты тулыландырыуҙа төп донорҙар булып сығыш яһай. Шуға күрә дотация бүлеү системаһын камиллаштырыу урынлы булыр ине.

Беҙҙең илгә төп килем нефть һәм газ ресурстарын һатыуҙан килә. Шуға күрә уларға хаҡ төшһә, илебеҙ иҡтисады ҙур ҡыйынлыҡтар кисерә. Бөгөнгө көндә ил хөкүмәте ошо бәйләнештән ситләшергә, ҡаҙнаны тулыландырыу өсөн башҡа өлкәлә етештереүсәнлекте үҫтерергә тырыша. Бер урында тапанмайбыҙ, нимәлер етештерергә тырышабыҙ, тимәк, тормош дауам итә. Ләкин ул һөҙөмтәле булһын өсөн үҙ кеҫәһен генә ҡайғыртыусы ойошма, предприятие, завод һәм фабрика етәкселәренән арынып, улар урынына халыҡ мәнфәғәтен ҡайғыртыусы кадрҙарҙы тәғәйенләү мөһим.

Иҡтисадҡа ҡағылышлы ниндәйҙер прогноздар эшләүе ауыр. Шулай ҙа иҡтисадсыларҙың "әлеге мәлдә иҡтисадты эҙләй һәм эш хаҡының артыуына өмөт итә. Ләкин эш хаҡын арттырыу өсөн хөкүмәткә, әлеге лә баяғы, һалымды күпләп йыйырға кәрәк. Ә аҡсаһы былай ҙа әҙ булған халыҡтан ҙур һалымдар йыйыуҙы өмөт итеп булмай. Шуға ла яҡын арауыҡта күпләп эш хаҡының, пенсияның артыуына өмөт итеү урынһыҙ. Әгәр ҙә бындай артымдар була ҡалһа, тимәк, тағы ла ниндәйҙер һалымдар уйлап сығарыласаҡ (әйткәндәй, мунса, йылытма, хатта биләмәләге бәҙрәф өсөн дә түләйәсәк яңы һалым ошолар рәтенә инә лә инде). Әйткәндәрҙе дөйөмләштергәндә, бөгөнгө көндә иҡтисадтың үҫешенә өмөт итергә ярамай, сөнки аҡса юҡ.

### Кредит

Бөгөнгө көндә Рәсәй халҡының бөтәһе лә тиерлек кредитҡа йәшәй. Хәҙер кредитҡа хатта теш тә дауаларға, күлдәк тә алырға була. Ләкин еңел генә килгән аҡсаны кире ҡайтарыу үтә лә ауырға төшә. Шуға ла кредит алыу үҙен аҡлаған ваҡытта ғына бындай аҙымға барырға була. Тик ул ваҡытта ла ете ҡат үлсәп, барыһын да сағыштырып, дәүләт программалары булған һәм иң әҙ процентлы кредит тәҡдим иткән банкка мөрәжәғәт итергә мөмкин. Кредит биреү банк өсөн мөһим. Әлеге ваҡытта аҡса кешегә генә түгел, банктарға ла етмәй. Ә юғалып ҡалмаҫҡа һәм әүҙем эшмәкәрлеген күрһәтеү өсөн вкладтар алырға, кредиттар бирергә кәрәк. Шуға күрә банктар, потенциаль клиент йәлеп итеү өсөн, процент ставкаларын кәмәтә, төрлө акциялар уйлап таба, кредит каникулдары булдыра һәм башҡа юлдар эҙләй. Процент ставкаларының кәмеүенә шулай уҡ хөкүмәт тә тәьҫир итә. Эрелеваҡлы бөтә банктар ҙа Рәсәй Үҙәк банкынан үҙҙәре лә кредит ала. Әгәр ҙә Үҙәк банк уларға түбән процент менән кредит бирһә, банктар ҙа халыҡҡа тәҡдим иткән займдың процентын кәмәтә. Шулай уҡ, билдәләп үткәнемсә, илдең ҡаҙнаһы йыйылған һалымдар иҫәбенә лә

### Ипотека

Фатир мәсьәләһен хәл итеүҙә ипотека, миненсә, яҡшы инструмент. Ләкин ул ғаилә өсөн бурыс упҡынына әйләнмәҫкә тейеш. Эш хаҡы ипотека түләүҙән тыш, яҡшы итеп йәшәргә лә етә икән, әлбиттә, фатирҙы ҡуртымға алып торғансы, уны кредитҡа алыу дөрөҫөрәк. Ләкин, мәҫәлән, дүрт кешенән торған ғаиләлә эш хаҡын тик берәүһе генә ала икән, ни рәүешле 20-30 меңлек ипотека түләргә һәм шул уҡ ваҡытта балаларҙы ашатырға һәм кейендерергә мөмкин? Ипотека түләмә ғаиләгә килгән дөйөм килемдең 50 процентынан артыҡ булмаҫҡа тейеш. Ошо осраҡта ғына ипотека тип ауыҙ асырға була. Ипотека түләп бөткәнсе, ундай ғаилә ағзаларының аҡса еткерә алмағанлыҡтан бөтә нервылары ҡаҡшап, һаулыҡтары бөтәсәк. Балаларҙың да бала сағын бәхетле итеп булмаясаҡ, сөнки ҡайҙан аҡса табырға, тип, һәр ваҡыт борсоулы уйҙарға батып йөрөгән атай-әсәй тиҙ генә ҡыҙып китеүсәнгә әйләнә, балаларға ла әләгә.

Ниндәй генә кредит алма, ҡулланыусылар кредиты булһынмы, ипотекамы - ул бурыс. Ҙур бурыс. Ипотека юллау өсөн, әҙ эш хаҡы алғандар өҫтәмә килем күрһәтеп, төрлө белешмәләр эшләтеп ала. Ләкин ипотека түләү өсөн реаль эш хаҡы ғына буласағын оноторға ярамай. Шуға күрә, әгәр ҙә килем бәләкәй икән, ниндәй юл менән булһа ла ипотека алырға тырышыу аңһыҙлыҡ, тип һанайым. Бик булмаһа, ҡала ситендәге баҫҡала бәләкәй генә йорт төҙөп ултыртырға һәм шунда йәшәргә мөмкин. Ҡот осҡос бурысҡа ла батмайһың, шул уҡ ваҡытта үҙеңдең йортонда йәшәйһең. Баш төртөп торор урының булғас, ҡалала фатир алырға һәм уны ҡуртымға биреп, шуға тағы ла аҡса ҡушып, ипотеканы тиҙерәк түләп бөтөп ҡотолорға була.

Әлеге ваҡытта ҡулланыусылар кредитының ғына түгел, ә ипотеканың да процент ставкаһы түбәнәйҙе. Быны хөкүмәт халыҡ мәнфәғәтен ҡайғыртҡандан ғына түгел, ә илдең төҙөлөш өлкәһенә ярҙам рәүешендә лә эшләй. Ә төҙөлөшкә башҡа күп төрлө өлкәләр бәйләнгән, тимәк, йорттарҙың һатылыуы әллә күпме кешенең эш менән тәьмин ителеүе тигән һүҙ.

### Микрофинанс ойошма

Һуңғы йылдарҙа үҙ эшмәкәрлеген туҡтатҡан банктар урынына әҙ күләмдә һәм ҡыҫҡа ваҡытҡа аҡса биреп тороусы микрофинанс ойошмалар күпләп ҡалҡып сыҡты. Уларҙан ҡурҡырға кәрәкмәй. Бындай ойошманың процент ставкаһы банк менән сағыштырғанда күпкә юғары, ләкин алған аҡсаны тиҙ генә ҡайтарһаң, уның ауырлығы әллә ни һиҙелмәй. Элекке кеүек туғаныңдан, күршеңдән үтескә һорап тороу һирәк күренеш хәҙер, сөнки барыһының да финанс хәле бер сама. Шуға күрә күптәр өсөн эш хаҡына тиклем бер нисә көн йәшәп торорлоҡ аҡса алыу урынына әйләнде бындай ойошмалар. Ләкин беҙҙең халыҡтың менталитеты икенсе. Ул ниндәй процент менән алыуын да һорашмай, уны аҙаҡ нисек түләрен дә уйламай күҙ йомоп барып ала. Бурысты ҡайтарыр ваҡыт тиҙ етә, ә ҡулда тағы аҡса юҡ. Штраф булмаһын өсөн икенсе микрофинанс ойошмаһынан алып, беренсеһенә бурысын ҡайтара. Тағы ла күпмелер көндән һуң өсөнсөһөнән алып икенсеһен түләй. Шул рәүешле йырып сыға алмаҫлыҡ һаҙлыҡҡа батыуын дауам итә. Өс мең аҡсаһын утыҙ, хатта өс йөҙ мең итеп кире ҡайтарыусылар тураһында аҙым һайын ишетергә була. Тимәк, бындай ойошмаларға мөрәжәғәт итер алдынан бик ныҡ уйларға кәрәк. Бер көн итле һурпа эсәм тип, ғүмерлеккә бурысҡа батыуың да оҙаҡ түгел.

### Криптовалюта

Донъяның бөтә илдәре иҡтисады араһында тығыҙ һәм ышаныслы бәйләнеш булдырыу өсөн ниндәйҙер электрон валютаның булыуы насар күренеш түгелдер, тип уйлайым. Ул үҙ-ара түләүҙәрҙә бихисап ҡағыҙ эшенән арындырырға ярҙам итергә мөмкин. Ләкин бөгөнгө көндә киң популярлыҡ яулап барған криптовалюталарҙың иҡтисадты берләштереү механизмы аңлашылып бөтмәй. Беҙҙең өйрәнгән аҡса закон менән нығытылған, ә ниндәйҙер технологияла булдырылған криптовалюта тик үҙенең системаһы эсендә генә яҡлаулы. Уның нимә менән тәьмин ителеүе аңлашылып бөтмәй. Был технологияға нимәлер индереп тә, унан сығарып та булмай, тик уның бер өлөшө генә булырға мөмкин. Миҫал өсөн, миллион һум түләп, күпмелер криптовалюта һатып алдым, ти. Ҡулымдан реаль аҡса сыҡты, ә нимә һатып алыуым аңлашылмай. Дөрөҫөн әйткәндә, һауа һатып алған кеүек. Һатыусы менән һатып алыусы араһын көйләгән ҡануниәт юҡ. Электрон валютанан ҡасып булмаясаҡ, ул ҡасан да булһа беҙҙең тормошобоҙҙа үҙ урынын аласаҡ. Әммә быны өсөн уның иҡтисадҡа интеграцияһы механизмы нисек булырын аңларға һәм уны закон нигеҙендә нығытырға кәрәк. Электрон аҡсаның әйләнешкә инеүе илдең тотош финанс системаһын яңынан ҡарауға этәрәсәк, ә ниндәй ҙә булһа үҙгәреш аҡса сығымын күҙ уңында тота. Бөгөнгө ауыр иҡтисади хәлдә, аҡса юҡлыҡта хөкүмәт был аҙымға әлегә бармаясаҡ. Шуға күрә криптовалютаға ҡағылышлы һорауҙа бик уяу булырға кәрәк.

### Аҡса тота белеү оҫталығы

Һәр кем үҙендә аҡса тотоноу оҫталығын тәрбиәләргә тейеш. Килем ниндәй суммала булыуына ҡарамаҫтан, ай һайын уның 10 процентын тотонмайынса, һалып ҡуйырға кәрәк. Өйҙә һаҡлайһыңмы уны, банкка һалаһыңмы, ләкин запас аҡса мотлаҡ ятырға тейеш.

Аҡса иҫәп ярата, тип юҡҡа әйтмәйҙәр. Ололарҙың өйөндә туҙып ятҡан тиндәрҙе күргәнегеҙ бармы? Юҡтыр, сөнки улар аҡсаға бик һаҡсылдар. Ә йәшерәк быуындың йортонда шкафта, төрлө һауыттарҙа, хатта иҙәндә ваҡ аҡсаларҙы тап итергә мөмкин. Был аҡсаның ҡәҙерен ебәрә.

Иҡтисадсы - аҡса менән идара итеүсе. Ғаиләнең килем-сығымдары менән идара итеүсеһе лә булырға тейеш. Ғөмүмән, килемде генә түгел, сығымды ла һанап барырға кәрәк. Бер ай ғына булһа ла өйҙән күпме аҡса сыҡҡанлығын һәм уның нимәгә тотонолғанын яҙып барғанда ла ни тиклем аңһыҙ рәүештә аҡса түккәнде күрергә була.

Урамда йыш ҡына газлы һыу, чипсы ашап китеп барған балаларҙы осратам. Улар, беренсенән, һаулыҡтарына ҙур зыян килтерә, икенсенән, кеҫә аҡсаларын иҫәпле тотонмай. Чипсы ашап, тамаҡ туймай, газлы һыуҙан һыуһын ҡанмай. Атай-әсәй баланың ошо рәүешле туҡланыуына юл ҡуймайынса, берҙән, файҙалы, ә икенсенән бюджетлы итеп ашарға өйрәтһә, күпкә яҡшыраҡ буласаҡ. Ғөмүмән, аҡсаны рациональ итеп тотонорға бала саҡтан өйрәтеү мөһим. Финанс тәрбиә ғаиләнән килеүен оноторға ярамай.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Тәү ҡарашҡа иҡтисад тураһында барыһын да беләбеҙ, аңлайбыҙ кеүек, ләкин был белемебеҙҙең өҫтән генә булыуын ошо өлкәлә эшләүсе кеше менән осрашҡас ҡына аңлайбыҙ. Ләкин барыһына ла уны төптән белеү кәрәк тә түгел, бугай. Финанс яҡтан грамоталы булһаҡ, үҙебеҙҙең бюджетты ышаныслы һәм дөрөҫ планлаштыра алһаҡ, тәҡдим ителгән финанс хеҙмәттәрҙең үҙебеҙгә ҡулайлыһын һайлап ала белһәк тә еткән. Бөгөнгө әңгәмәбеҙ ошо йүнәлештә ниндәйҙер ярҙам күрһәтер, тип ышанабыҙ.**

Гөлназ САФУАНОВА
әңгәмәләште.

***✓ - Буҙат! Буҙат, матурым, әйҙә, ҡайтайыҡ. Ә? Ҡайтҡың киләме? Буҙат? - таныш тауышҡа айғыр ҙа яйлап тынысланды, аңлаған, ризалығын белдергән һымаҡ, башын ҡаҡҡылап, тапанып әйләнгеләне.***




Хәҙер инде Айыухан тороп китте:

- Һатһа?! Бәлки, бында инде барыһы ла беҙҙең уй-ниәтте беләләр, беҙ генә алйотланып йөрөйбөҙҙөр, ә, Көнөкәй?

- Юҡ. Каүсәриә һата алмай.

- Көнөкәй!.. - егет тотлоҡто. - Һине уйлап, сәсем ағарыр инде минең.

Ҡыҙ мыҫҡыллы йылмайҙы:

- Ҡасандан алып мине уйлай башлаһың әле?

Шул ваҡыт әллә артыҡ ҡыҙып, әллә хисләнеп әйтелде быныһы ла:

- Ике йыл әүәл, күл буйында, мин атҡан өйрәкте урлап ҡасҡандан алып... уйламаған көнөм юҡ.

Бындайҙы ишетеүгә әҙер булмаған Көнбикә, ҡулындағыһына текәлеп шымып ҡалды, ә Айыухан, был баш-баштаҡ ҡыҙға ундай йәшерен серен асып һалыуына йәне көйөп, сапанын алып яурынына ташланы ла, ямғыр аҫтына сығып китте...

Шул төндә булған ваҡиғалар ҡыҙҙың һүҙҙәрен иҫбатланы ла. Бәхәсләшеп-бәхәсләшеп тә, бер ниндәй аныҡ ҡына ҡарарға ла килә алмай ятып киткәнеләр, төндөң ниндәйҙер мәлендә тышта шау-шыу ҡупты.

- Көнөкәй! Эстә ҡал! - Айыухан хәнйәр беркетелгән ҡайышын алып быуҙы ла, тирмә япмаһына ынтылғайны ғына, тыштан ашығып килеп ингән берәүгә бәрелде.

- Нимә булды? Ниндәй тауыш?

- Ҡатының ҡайҙа? - Инеүсенең ҡатын-ҡыҙ булыуы егетте бөтөнләй албырғатты, шунлыҡтан хатта уның башҡортса өндәшеүен дә аңғарманы. Ә Көнбикә аңланы ғына түгел, уның кем икәнлеген дә төшөнөп, һикереп торҙо:

- Бында мин, Каүсәриә.

- Хәҙер үк китегеҙ! Иртәнсәк һуң буласаҡ!

- Ни булды? Асыҡлап һөйлә, - Айыуханның ҡалын тауышы ҡатындарҙың ҡалтыраҡ шыбырлашыуын баҫып китте.

- Кисә һуң ғына беҙгә һеҙҙең менән йөрөгән Салтанай килде. Байым ятҡан ине инде, истәктәр хаҡында һүҙ бар, бик мөһим, тип, индереүҙе үтенде. Мине сығарып ебәрҙеләр, әммә хәбәренең бушҡа түгеллеген һиҙеп, тирмә артына барып, тыңлап торҙом.

- Нимә тине? - йәштәр был һорауҙы бер ауыҙҙан бирҙе.

- Ул һине баштан уҡ күҙәткән икән, тимәк, ышанмаған. Аңдып йөрөй торғас, теге көн шарламала йыуынғаныңды күргән. Ул һинең ҡатын икәнлегеңде белә!

- Аһ! - Көнбикә устары менән ауыҙын ғына ҡаплай алды.

- Теге көн белгәс, ни өсөн шундуҡ әйтмәгән, фашламаған? Нимә көткән? - Айыухан тиҙерәк хәбәрҙең төбөнә төшөргә теләй.

- Уйлап алған башта, ҡаҙаҡтар улар үҙҙәренә файҙа сыҡҡанда ғына баш эйә. Салтанай ҡатыныңды үҙенә биреүҙе һорай, шундай шарт менән асты һеҙҙең серҙе лә.

- Аңлашылды. Ә тышта ниндәй тауыш?

- Мин байымдың тирмәһен яндырҙым. Ошо ҡайнаш аҫтында китә һалығыҙ!

Егет менән ҡыҙ, күҙ асып йомған арала ҡараңғыла кәрәк-яраҡтарын һәрмәштереп төйнәп, йәнәш баҫҡандар ине инде. Каүсәриә ҡыҙҙың ҡулдарын эҙләп табып, унда нимәләр һалды.

- Был - минең хәситәм. Әсәм эшләп биргән. Яҙғы уйынға сыҡҡан ерҙән урландым, хәситәмде лә тәүгә тағып сыҡҡайным.

Көнбикә ҡалайтырға белмәне:

- Ҡуй. Ҡомарткың үҙеңдә булһын...

- Ал, алып ҡайт. Мин шинеп бөтөп барам инде, күп ҡалманы. Тәңкәләрем ошонда ҡалыр ҙа зарығып ятырҙар. Исмаһам, улар ҡайтһын, Иҙелемә һалып китерһең...

Көнбикә, йәштәренә быуылып, йоҡа күлдәксән генә булған ябыҡ ҡатынды ҡосаҡлап алды, дымлы сикәһен уның һөйәктәре ҡалҡып сыҡҡан яңағына терәне:

- Аманатыңды үтәрмен... Үтәрмен...

- Йә! Тәүәкәлләйек! - Айыухан ҡыҙҙы етәкләп, ҡатындың ҡосағынан йолҡоп алып китте. - Хуш, апай! Изгелегеңде онотмам!

Оло көбән булып ялпылдап янған тирмә янында йүгерешкән халыҡ ситке тирмәнән сығып, ҡараңғылыҡҡа инеп ирегән ике шәүләне аңғармай ҡалды. Тупылдап алыҫлашҡан ат тояҡтары тауышын да ишетеүсе булманы.

Тау итәге ҡыҙырымынан ярышҡа сыҡҡандай сапты улар. Һүрән генә ай яҡтыһында аттарының һөрөнөп йығылыуын да, тәкмәс атып ятыуҙарын да уйламаны. Шулай сабыша торғас, өйөр ятҡан ергә барып сыҡтылар. Көнбикә менгеһенән һикереп төшөп, Буҙатты эҙләп китергә генә иткәндә, айғыр ҡаршыларына үҙе сыҡты. Күкрәген киреп, ҡойроғон күтәреп, өйөр тыныслығын боҙоусыны эҙәрлекләп килеүе ине уның.

- Буҙат! Буҙат, был мин! Мин! Мин, Буҙат! - Көнбикә һынар ҡулын һуҙып, әкрен генә уға ҡаршы юлланды.

- Аңғарып! Һөжүм итерҙәй булһа, шундуҡ ситкә ырғы! - Айғырҙың ҡыҙҙан башҡаға әүрәмәсен белгән егет артта ҡалып, шулай ҙа ҡамсыһын әҙер тотоп торҙо.

- Буҙат! Буҙат, матурым, әйҙә, ҡайтайыҡ. Ә? Ҡайтҡың киләме? Буҙат? - таныш тауышҡа айғыр ҙа яйлап тынысланды, аңлаған, ризалығын белдергән һымаҡ, башын ҡаҡҡылап, тапанып әйләнгеләне. Моронона йылы тынын бөркөп туҡтауһыҙ һөйләүсенең иркә ҡулдары йүгән кейҙергәндә лә, өҫтөнә һикереп менергә маташып, бер-нисә тапҡыр уңышһыҙ ырғып, унан, ниһайәт, ялдарына сат йәбешеп, тырмашып арҡаһына атланғанда ла, ҡаршыманы. Ә инде итек үксәләре менән еңелсә генә бөйөрҙәренә төрткәс, ауыр кәүҙәһен еңел ҡуҙғатып, ҡундым генә юртып китте. Тик өҫтөндәге быға ғына риза булманы, балтырҙарын ҡатыраҡ ҡыҫып, кинәт ҡамсы осо менән һыртына эләктерҙе:

- Ел, Буҙат! Елдән тиҙерәк елдер! Ҡайтабыҙ! Ҡайтабы-ы-ҙ!!

Ҡапыл ҡаны ҡыҙған айғыр, һыбайлыһын һыпырып ҡалдырырҙай көс менән алға һикерҙе лә, йыуан муйынын һуҙып, сабып китте. Уның артынан, Көнбикәгә өләсәһе һөйләгән әкиәттәге күлдән сыҡҡан йылҡы ише булып, оло өйөр эйәрҙе. Күмәк тояҡ баҫыуынан ер һелкенепме, әллә шул тауыш өҫкә күтәрелепме, тауҙар түбәһендәге мәңгелек ҡар япмаһы сытырлап урынынан ҡуҙғалды ла, ташҡын булып, үҙәндәргә шыуып төштө. Өйөр, йырылып киткән йылғалай, күҙ күреме етмәҫ арауыҡҡа һуҙылып, һыҙылып килгән таң яҡтыһына ҡаршы аҡты ла аҡты.

* * *

Биш ай буйына көтөп тә, яуҙың һыуы аша был яҡҡа сыҡмай, ҡыйлап үткәнен төшөнгән ғәскәр, төйәктәрендә ҡалған ғаиләләре, хужалыҡтары өсөн борсола башланы. Ана-бына ҡышҡа инергә торалар, ә уларҙың мал-тыуары йәйләүҙәрҙә тороп ҡалған. Ярай, күсенеү генә артыҡ ауырлыҡ тыуҙырмаҫ та, күнегелгән тормош, әммә көтөүселәр ҙә, һаҡсылар менән генә ҡалған ерҙәргә күҙ һалыусылар ҙа булыуы мөмкин. Ҡаҙаҡ-ҡыпсаҡтар мал көрәйгән йәй ахырын һағалап ҡына тора, ҡайһы ырыуға ла сапҡын яһай торған ғәҙәттәре бар.

Алға ебәрелгән шымсылар алып килгән хәбәрҙәр буйынса, яуҙың диңгеҙ боғаҙын аша сыҡмаҫы баштан уҡ билдәле булған. Ваҡыт үтә тороп, ошо һығымталар дөрөҫләнгәндәй булғас, ғәскәр башлыҡтарының сабырлығы ҡаҡшаған-дан-ҡаҡшаны. Һәр береһен "Беҙ бында нигә килдек?" тигән һорау игәне.

Тоҡан бей урынына һаман бей һайлай алмай ҡаңғырышҡан үҫәргәндәрҙән дә аныҡ ҡына яуап алып булмай ине. Улар бейҙәренең ни уйлағанын, ниндәй ниәт менән эш иткәнен белмәгән. Һәр хәлдә, әлегә уның урынын биләгән ике ҡаҙаҡ кейәүҙәре шулай тигән була. Уларға ла ҡапыл-ғара, аңын-тоңон белмәйенсә, ҡаты бәрелеп тә булмай. Шул уҡ ваҡытта бында ниндәйҙер аңлайышһыҙ, осо осҡа ялғанмаған эштәр ҙә бар һымаҡ. Бөтөн ошо уйҙар менән янып ята торғас, түҙемлеге шартлап, ҡайһы бер ғәскәр башлыҡтарының ҡаршы булыуына ҡарамаҫтан, Аллағол үҙ ғәскәрен алып сығып китте.

Һиҙемләүҙәре дөрөҫкә сыҡты батырҙың. Туҙҙырылғандан тергеҙелмәгән йәйләүҙәрҙе үтеп, атаһының ҡышлау урынына килеп еткәнсе сәстәре ағарҙы. Тыныс ултырғандай булһа ла, ҡараштары менән ашарҙай булып төбәлеп, үҙенекеләрҙе имен-һау күрергә тигән ымһыныуы менән елде. Быуа ҡаршы алыусылар араһында бәләкәстәрен күкрәктәренә ҡыҫҡан ҡатындарын, улар артына һырынған ҡыҙҙарын аңғарҙы. Еңел һулап ебәрҙе. Атын ҡайырыуға, йәш ҡатыны теҙгенде эләктереп тә өлгөрҙө. Аяҡтары ергә тейер-теймәҫтән, сабыйы менән ҡуша килеп һырынды ла. Киткәнендә тыуып ҡына ҡалып, әле килеп ятһырап шарылдаған уланын күтәреп алып, һынар ҡулын алға һуҙҙы. Был ишараны көтөп кенә торған эреле-ваҡлы дүрт ҡыҙ йүгерешеп килеп ҡосағына инде. Балаларын һөйгән арала ҡарашын һаман да яҡын килмәй торған өлкән ҡатынына күсерҙе ир. Уныһы ятһыраған һымаҡ моңһоу ҡарап тора бирә. Бәлә барлығын төшөнгән Аллағол, ябырылыусыларҙан айырылып, ҡатып торған ҡатыны эргәһенә килде:

- Исәнме, Барһын?

- Мин исән дә... уландар юҡ, - әсә ҡайғыһының ни хәтле тәрәнлеген ҡараштарынан ғына ла төшөнөргә була, һүҙе кәрәкмәй ҙә кеүек.

Ишеткәндәренән сайҡалып китте Аллағол:

- Икәүһе ләме?..

- Икәүһе лә...

Уларҙы ғаиләнең башҡа ағзалары килеп уратып баҫты. Ауыл буйынса былайтып һөрәйешеп баҫып ҡалғандар ҙа, ултырып ҡайғырышҡандар ҙа, ҡосаҡлашып илашҡандар ҙа етәрлек ине.

Ағаһы артынса, баҫтырып тигәндәй, Көнбикә лә ҡайтып төштө. Уның Айыухан менән ҡыуып алып кителгән өйөрҙө икеләтә ишәйтеп алып ҡайтыуы, әлбиттә, оло ваҡиға булды. Әммә был яҡындарҙы юғалтыу ҡайғыһын баҫа алмай ине. Урал итәген, һөрөм булып, хәсрәт япты.

* * *

Көнбикә әсәһе һәм бәләкәс Мостафа менән ҡыш сығып килә. Атаһы ҡайтыуға һаман өмөттәрен өҙмәй көтәләр, бигерәк тә әсәһе ҡар ҡаплаған тауҙар араһындағы үҙәккә төбәлеп ҡатып ҡала. Шул тәңгәлдән ире ҡалтағайҙарҙа шыуып килеп сығыр ҙа, һынар ҡолғаһында этенә-этенә улар тәңгәленә юлланыр тигән хыял менән йәшәйме? Тик ул үҙәктән төшөүсе юҡ әле...

Айыухан Баҙыяндан тыуып ҡалған сабыйын үҙ ғаиләһенә алып ҡайтмаҡсы ине лә, Хафиза ялбарып һорап алып ҡалды. Айыухандың әсәһе көҙгө ҡаҙаҡтар менән бәрелештә имен ҡалһа ла, был бәләне кисерә алманы - мәрхүм булып ҡалды. Шунлыҡтанмы, Хафиза баланы ирҙең еңгәләре ҡулына биргеһе килмәне. Үҙ бала-сағаларына сумған ҡатындарға сит бала әллә танһыҡ, әллә юҡ, этелеп-төртөлөп йөрөгәнсе, бында ҡәҙерҙә үҫһен, тип күндерҙе. Ҡатын алһаң, килеп алырһың, тип тә һылап ҡуйҙы.

Тамағы туҡ, аҫты ҡоро, ян-яғы һөйөүгә тулы булған бала ни, ай үҫәһен көн үҫеп, ана, атлайым тип тантып йөрөп тә ята. Көнбикәне еҫкәп йоҡлап, уяуында талпандай йәбешеп йөрөп үтә эҫенгән, хәҙер йомош менән сыҡһа ла, килеп ишек төбөндә көтөп тора.

- Атаһы апҡайтам тип алып китһә, ҡалайтабыҙ инде? - тип һуҡрана әсәһе, сабыйҙың был ғәҙәтенә көйөнөп.

- Апҡайтып, аны ҡалайтып ҡараһын ул? - тип еңел генә яуаплай Көнбикә.

- Алһа ала ла ҡуя инде, эйәһе бар. Бисәле булып китһә, ир кешенең үҙ ҡанын ситтә үҫтергеһе килмәҫ.

Был хаҡта ҡыҙ үҙе лә уйламай түгел. Ҡара көҙҙә, шул йылҡыларҙы алып килгәс айырылышҡандан һуң, оҙон ҡыш ағымында бер тапҡыр ғына күрештеләр. Уныһында ла улын күрә килгән ир йоҡлап ятҡан сабыйын бишек төбө аша тупылдатып һөйҙө лә, Аллағол алаҫығында булды. Көнбикә менән әсәһенә бүләктәр ҙә алып килгән ине, шуларын тапшырып, рәхмәт әйтте. Тик былар ғына аҙ ҡыҙға, ул бит үҙенә күтәрелеп тә ҡараманы. Әйтерһең, быға тиклем таныш булмағандар. Уйлай микән уның хаҡында? Ике ятып бер төшөнә инә микән, исмаһам? Ҡаҙаҡтар яғында йөрөгәндә лә, бер тирмәлә көн итеп ятҡанда ла ярты ауыҙ ғына булһа ла йылы һүҙ ҡатманы бит. Шулай уҡ та йөрәге ябыҡ микән ни? Апаһын онота алмайҙыр... Баҙыян кеүек наҙлы, иплә ҡатынынан һуң уның кеүек бисураға нисек итеп ҡараһын инде?.. Талашып йөрөүҙән сыҡманы баштары ла. Көнбикә ир затынан булһа, һуғышып та китерҙәр ине, ҡыҙ бала тип кенә тыйылды шикелле Айыухан. Эх, нинә ул да апаһы һымаҡ нескә, йомшаҡ, тыңлаусан була алмай, нигә шулай яратылмаған? Шул саҡта, бәлки, һөйгәне уны ла ҡатын итеп күрер, иғтибарға алыр ине. Их...

**(Дауамы бар).**

✔ *Башҡорт милләте балаларын туплауҙа, дуҫлыҡ ебен һуҙыуҙа, шәжәрә туғанлығын ялғауҙа, йәше Ер дәүеренә тигеҙ булған, үлемһеҙ "Урал батыр" эпосы, һис шикһеҙ, ярҙам итәсәк тип уйлайым.*



ЯҘЫУСЫҒА ӨС ҺОРАУ



**"Башҡорт әҙәбиәтенең балалар яҙыусыһы" тигән абруйлы исеме менән билдәле әҙибә ул Айһылыу Йәғәфәрова. Беҙ үҙебеҙ уның әҫәрҙәрен уҡып үҫтек. Ә асылда ул ололар өсөн яҙылған күп кенә әҫәрҙәрҙең дә авторы. "Ҡойон батшалығында", "Сәскеле күлдәк", "Һандуғас моңо", "Бөҙрәкәй" һәм башҡа китаптары балалар донъяһын, кескәйҙәр күңелен яҡшы белеүе тураһында һөйләһә, "Ҡыпсаҡ ҡыҙы Нәзирә" исемле әҫәре уны һәләтле драматург итеп, "Килендәр" романы иһә тормошсан прозаик итеп танытты. Ә инде тәржемәләр өлкәһендә лә әүҙем эшләүен телгә алғанда, уның шундай күп яҡлы талант эйәһе икәнен аңлайһың. Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәғариф һәм мәҙәниәт хеҙмәткәре, Ким Әхмәтйәнов, Рәмзилә Хисаметдинова исемендәге премиялар лауреаты Айһылыу Йәғәфәрова ошо көндәрҙә күркәм юбилейын ҡаршыланы. Ошо уңайҙан уға өс һорау менән мөрәжәғәт иттек.**

# БАЛАЛАРҒА...

## ниндәй әҫәр ҡыҙыҡ?



➔ **Бөгөнгө балалалар донъяһы үтә лә ҡатмарлы. Улар хәҙер күпте белә, күпте аңлай. Шунлыҡтан, балалар әҙәбиәтен замана балаларына ҡыҙыҡлы итеү өсөн ниндәй әҫәр яҙырға була? Балаларға ҡыҙыҡлы яҙыусы булыуҙың юлдары хаҡында һөйләгеҙ әле...**

- Мин балалар баҡсаһында 37 йыл эшләнем. Аҡ таҫма тағып килеп ингәйнем, хаҡлы ялға сыҡҡанда иһә таҫмамдың аҡлығы бар сәсемә һибелгәйне...

Балалар донъяһына әҙәбиәттең бөтә жанрҙарын да индерҙем. Үҙемдең тәжрибәмдән сығып, нимә әйтә алам? Кескәйҙәр өсөн иң ҡыҙыҡлыһы, тәьҫирлеһе - ул балалар драматургияһы. Шиғыр тыңлау, әкиәт һөйләү, хикәйә уҡыу замана балалары өсөн театр күренешен ҡарау кеүек үк ҡыҙыҡлы булмай сыҡты. Мин башҡорт балалар баҡсалары өсөн ике китаптан торған "Йәйгор" исемле махсус хрестоматия төҙөнөм һәм кескәйҙәрҙең йәш төркөмөн иҫәпкә алып, башҡа бүлектәргә йөнәшә театр бүлеге астым. Бик күп әкиәттәрҙе сәхнәләштерҙем, башҡорт йолалары буйынса сценарийҙар яҙҙым. Әле уйлап ултырам: махсус балалар театры ниндәй ҡалаларҙа бар икән? Өфөлә һәм Сибайҙа ғына... Ә бит балалар донъяһына күҙ һалһаң, кескәйҙәр ҡулына уйынсыҡ тота башлау менән театр уйнай башлай, тимәк, театр әҙәбиәттең бик кәрәкле жанры булып сыға. Театр балаы рухи яҡтан үҫтерә, уйхистәренең, үҙаллылығының сығанағы булып тора. 1973 йылда С. Маршактың "Теремок" исемле шиғри әкиәтен тәржемә иткәйнем. Ул әҫәр Сибайҙың "Сулпан" балалар театрында ҡуйылды. Унан шул 460 юллыҡ пьесаны балалар баҡсаһының өлкән төркөм балалары уйнаны! Ҡыҫҡаһы, бөгөнгө балаларға әҙәбиәтте ҡыҙыҡлы итеү өсөн улар донъяһында йәшәргә кәрәк.

➔ **"Шүлгәнташҡа сәйәхәт" тигән яңы романығыҙ исеме менән үк ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. Ул ниндәй маҡсат менән яҙылды һәм ниндәй идея-тематикаға нигеҙләнә?**

- Әҙәбиәтебеҙ тарихи романдарға бай, әммә улар балаларға аңлашырлыҡ кимәлдә түгел. Балалар ғына түгел, хатта ололарҙың күптәре өсөн дә ҡатмарлы ул тарихи әҫәр. Шунлыҡтан мин был романды балаларға ҡулайлаштырҙым - әкиәт жанрын һайланым. Тағы ла сағыуыраҡ булһын өсөн геройҙарымды - өс районның үҫмерҙәрен Шүлгәнташҡа, Таш өйҙөң эйәһе Тарауыл ҡарт янына төшөрҙөм һәм Уралтауҙың иң тәүге балалары- үҙҙәре кеүек үҫмерҙәр менән осраштырҙым. Таш быуат заманындағы халыҡ - башҡорт нәҫеленән, Ер йөҙөндәге кешелек төркөмөнөң иң боронғо ҡәбиләһе икәнен күрҙе балалар.

Икенсе бүлектә балалар Аҡъял батыр менән бергә йөрөйҙәр. Йәйрәп ятҡан Башҡорт илендәге элекке ҡара урмандарҙы бөгөнгө хәле менән сағыштыралар, ҡуҡҡа олғашҡан тауҙарҙы күреп һоҡланалар һәм тау-шихандарҙың бөгөнгө торошон белеп борсолалар. Ер аҫтындағы Уралтау байлығына хужа булырға маташҡан Иргәйелдең батыр ҡулы менән юҡ ителеүенә ҡыуаналар.

Өсөнсө бүлектә үҫмерҙәр Ҡамыр батыр менән бергә кейеҙ-келәмдә көнсығышҡа ҡарай осалар. Батыр төшөндә күргән һылыуҡайҙы ҡотҡарырға тейеш була. Көрәш майҙанына барып еткәс кенә, ил һаҡларлыҡ йәш егеттәрҙе ҡыҙ сүрәтенә әйләнеп, албырғатып һәләк итеүсе, тәрлә ярыштарҙа еңә алмағандарҙы тимер өйҙә яндырып үлтереүсе Батша-ҡыҙ-дейеүҙе күрәләр һәм Ҡамыр батырға ярҙам итәләр. Ошо илдә улар ҡоллоҡҡа эләккән Күк Бүрене лә табалар.

Романда боронғо хәҡиҡәт бик көслө, ләкин мин дөрөҫлөк әҙләп, әкиәт формаһы аша артымдан балаларҙы эйәртә алдым, тип уйлайым. Сөнки әҫәр мажаралы һәм бик ҡыҙыҡлы килеп сыҡты.

Тағы шуныһы бар, романда рус аҡыл эйәләренең дөйөмләштерелгән, беҙҙең Башҡорт иленә ҡарата булған фекерҙәре лә һыҙыҡ өҫтөнә алына. Мәҫәлән, "Рәсәй тарафынан буйһондоролған бер генә халыҡ та, башҡорттар һымаҡ, үҙ тарихын, хоҡуҡтарын, ерһыуын, милли булмышын яҡлап, иҫ китмәле ҡан һәм көс түкмәне", - ти М.К. Любавский. Ә М.В. Ломоносов былай ти: "Теле ярлыланған халыҡтың рухиәте менән бер рәттән, йәшәү даирәһе лә ҡыҫҡартыла!"

Ә әҫәр нигеҙендә "Урал батыр" эпосы ята. Сөнки һәр бер быуын балалары "Урал батыр" эпосын уҡып, ундағы хәҡиҡәтте күңеленә һеңдереп үҫергә тейеш. Башҡорт милләте балаларын туплауҙа, дуҫлыҡ ебен һуҙыуҙа, шәжәрә туғанлығын ялғауҙа, йәше Ер дәүеренә тигеҙ булған, үлемһеҙ "Урал батыр" эпосы, һис шикһеҙ, ярҙам итәсәк тип уйлайым.

➔ **Әҙәби тормошоғоҙ хаҡындағы уйҙарығыҙҙы ҡағыҙға төшөргәндә улар нисегерәк булыр ине?**

- Минең әҫәрҙәремде бары халыҡ ҡына баһаланы. Бер ваҡытта ла яҙғандарым өсөн ҡайҙандыр, кемдәндер юғары баһалар көтмәнем. Һәм минең яҙышыу маҡсатым да ундай төшөнсәләргә нигеҙләнмәгән. Оҙаҡ йылдар кескәйҙәр донъяһында йәшәүем, улар менән тығыҙ аралашыуым, уй-хыялдарын яҡшы белеүем ижадымда ла сағылыш тапты. Кемдәр өсөндәр, бәлки, үтә бер ҡатлы ла күеҡтер. Әммә был ысын балалар тормошо. Балалары уҡып өйрәнмәгән халыҡтың ололар әҙәбиәте лә өмөтһөҙ ул. Шунлыҡтан, балаларыбыҙҙы китап тоторға, әҫәрҙәр аша яҡшылыҡҡа, изгелеккә, гүзәллеккә ынтылып үҫергә өйрәтәйек.

**Миләүшә ХӘБИЛОВА**
**яҙып алды.**

ЗАУЫҠ

### ЙӨРӘККӘЙЕМ - ДАРЪЯ КИҢЛЕКТӘРЕ

Йөрәккәйем - даръя киңлектәре -
Өҙөлөп яратыуым донъяны.
Аҡ сәскәле болон, көҙ сыуағы,
Ойоҫҡотоп ҡарҙар яуғаны.

Барыһы бәхет, аңлай ғына белһәң -
Донъяларҙы нурҙар солғауы,
Өҙөлөп-өҙөлөп көкүк саҡырғаны,
Тауҙарымдың ебәк ҡылғаны.
Кем яратмаҫ яҡты донъяны!

### ҠУРАЙ МОҢО

Йөрәгемдең моңомо һин,
Түгелмәгән наҙыммы һин,
Ғүмеремдең яҙымы һин,
Ҡурай моңо?

Таңдарымдың нурымы һин,
Йырланмаған йырыммы һин,
Ҡурай моңо?

Ҡыл осонда торған йәнем -
Килер ризыҡымдың тәме,
Башҡортомдоң ғорур, аҫыл йәне -
Ҡурай моңо!

* * *

Аҡ көнөмә мең рәхмәттәр әйтеп,
Ҡаршылайым һәр көн ҡояшты.
Йөндәремде имләр йәйҙәр етте,
Йәй наҙы бар һинең ҡараштa.

Яңағымдан һөйөп ямғыр үтте,
Күтәрелде күккә йәйғоро.
Үтер көндәр яйлап көҙгә илтер.
Өҙөлмәһен ғүмер сылбыры.

**Мәрйәм ФӘЙЗУЛЛИНА.**
**Ишембай ҡалаһы.**

ТОРМОШ КҮРЕНЕШТӘРЕ

*Хәйҙәр ТАПАҠОВ*

### Ярҙам

"Тиҙ ярҙам" машинаһын саҡырттылар. Бәләкәй генә, Мәскәй әбейҙең тауыҡ тәпәйенә ҡунаҡлаған харабаға тартым ташландыҡ бер йорт икән. Хужабикәнең, һикһәнде үткән әбейҙең ҡан баҫымы күтәрелеп киткәнгә күршеләре саҡыртҡан. Ҡыҫынҡы, йыйыштырылмаған торлаҡ эсендәге өҫтәл, ике ултырғыс, стена ҡырындағы тимер карауатты иҫәпкә алмағанда, һыйыр мөгөҙөнә элер ҡаралты күҙгә ташланмай, хатта урам яҡҡа ҡараған ике тәҙрәһенә саҡлы ҡорғанһыҙ. Бүлмәне дарыу ҡырҡыулығына уҡмашҡан ауыр, тонсоҡторғос еҫ баҫҡан. Ана шул ҡуйы, уҡшытҡыс һауа тынды тарыҡтыра. Урталағы өҫтәлдә лә икмәк ҡатылары ғына күҙгә ташлана. Укол ҡаҙағандан аҙаҡ яңғыҙы көн иткән әбейҙе йәлләп, исмаһам, кәрәк-ярағына булһа ла тотонор, тип, кеҫәмдә булған аҡсамды сығарып бирҙем. Тегенең осоноп ҡыуанғанын күрһәгеҙ! Рәхмәттәр уҡып ултырып ҡалды. Иртәгеһен хәл белергә тип барғанда ла шәкәр-сәйлек ҡалдырырға иттем. Әбей йомартлығымды хуплағандай итһә лә, кисәгеләй ихласлыҡ, асыҡ сырай күрһәтмәне, ул ғына ла түгел, һүҙ араһында эш хаҡы алған көнөм менән дә ҡыҙыҡһынды. Тимәк, минән һаман да булһа нимәләр өмөт итә. Эш хаҡы алғандан һуң бер аҙна үткәс, таныш һуҡмаҡҡа йәнә бороп ждом. Үҙемдән арттырып килтергәнемде әбей тейеш һымағыраҡ ҡабул итте был юлы, һәм ыңғайы бер ҡоро ғына итеп иҫкәрмә яһарға ла онотманы: "Нишләптер һуңлатып алып килдең аҡсаны, тағы үткәндәгенә ҡарағанда кәмерәк..." Быуна һинә - мә! Игелек ҡыл да һыуға һал, тиҙәр ҙә бит, шулай булһа ла хәтер ҡалды, холоҡ-фиғеле ибәтәйһеҙ әбейгә башҡаса ярҙам итмәскә булдым.

Бер көн минең менән эшләгән фельдшер сираттағы саҡырыуҙан ҡайтып инде:

- Теге, һин белгән әбейҙә булдым бит әле, эттән алып эткә һалып тиргәй үҙеңде, ошоғаса шул тиклем дә насар, һаран, ҡыҫмыр, игелекһеҙ бәндә икәнлегеңде белмәгәйнем, әй! Ҡортҡаның хәтерен ҡалдырырлыҡ ниндәй хилафлыҡтар ҡылып ташланың тағы?

- Аҡса ғына биргәйнем бер нисә тапҡыр, башҡа насарлыҡтарым теймәне шикелле...

### Саҙаҡа

Ҡала урамы буйлап оло йәштәрҙәге бабай менән йәш кеше атлай. Хәбәрҙе ҡойолдороп егет кенә һөйләй:

- Ҡартатай, бына һин мәсеткә йөрөйһөң, Алла бар, тиһең, Алла бөтәһен дә күрә, тип Ҡөрьәндә яҙып ҡуйылған, тиһең. Ул бөтәһен дә күрмәйҙер, бына, мәҫәлән, - ул тротуар ҡырында хәйер эҫәп ултырған зәғиф ҡыҙ балаға төрттө, - ошо бисараны күрһә, моғайын да, ярҙам итер ине, уны ауыр хәлдә ҡалдырмаҫ ине!

- Улым, Алла бөтәһен дә күрә шул. Ул һин абайлаһын, саҙаҡа бирһен тип уны ҡаршыңа сығарып ултыртҡан. Аллаһы Тәғәлә тағы ла был донъяла етештәрҙән тыш, фәҡирҙәр барлығы, сәләмәтлектең йәнәшәһендә зәғифлек торғанлығы, күҙләләр араһында һуҡырҙар йөрөгәнлеге хаҡында ла киҫәтә, иҫкәртә. Был иҫкәртеүҙәр күҙле һуҡырҙарҙы маңлай тишектәре менән түгел, күңел күҙе менән күрергә, һиҙергә, тойорға өйрәтеүгә йүнәлтелгән... - Бабай шулай тине лә доға ҡылып, теге зәғифтең алдындағы һауытҡа аҡса һалды һәм ары атланы.

✓ *Хәҙерге ваҡытта һабантуй башҡорттоң ғына милли байрамы булыу сиктәренән сығып, Башҡортостан Республикаһында йәшәгән бөтә халыҡтарҙың да уртаҡ һәм яратҡан бер байрамына әүерелде.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ОҘАҠ ЙОҠЛАМА

■ Сальмонелла кеүек хәүефле бактериялар печенье менән крекерҙарҙа ярты йылға тиклем йәшәй, тип белдерә Америка ғалимдары. Тикшеренеүҙәрҙә бактерияның ағыуланыуға килтергән 5 төрө ҡатнашҡан. Белгестәр крекерҙар өсөн тәғәйенләнгән сырға һәм ер сәтләүегеге майына, шулай уҡ печеньеның шоколадтан һәм ванилиндан торған өҫтәмәләренә бактерия ҡушҡан һәм уларҙан сэндвичтар яһаған. Сэндвичтар Цельсий буйынса 25 градус температурала һаҡланған. Ғалимдар ваҡыты-ваҡыты менән уларҙағы бактерияларҙың торошон тикшергән. Әммә ярты йылдан һуң да уларҙың үҙҙәренең йәшәү һәләтен юғалтмауы ғалимдарҙы ла аптыратҡан.

■ Оҙаҡ йоҡлаһаң, баш мейеһе әүҙемлеге түбәнәйә. Шуға ла оҙаҡ йоҡлау сәләмәтлек өсөн зыянлы, тип белдерә ғалимдар. Һынауҙарҙа 45 йәштән өлкән 230 кеше ҡатнашҡан. Тәүлегенә 9 сәғәт йоҡлаған һәм етмәһә аҙ хәрәкәтләнгән кешеләрҙең организмы тәмәке тартыу йә араҡы эсеүҙән күргән зыянға тиң, имеш. Быйдай йәшәү рәүеше алып барыусылар араһында иртә үлем хәүефе 4 тапҡырға юғары. Ә баш мейеһенең әүҙемлеге түбәнәйеүе депрессиға килтереүе ихтимал икән. Тәүлегенә 11 сәғәткә тиклем йоҡлаусы ҡатын-ҡыҙҙар балаға уҙа алмай яфаланасаҡ.

■ Ҡытайҙа һөттөң канцерогенға ҡаршы сифаттарын асыҡлаған тикшеренеү үткәрелгән. Илань университеты белгестәре һөт аҡһымында булған ферменттарҙы тикшереп, бер пептид ферменттың ашҡаҙан яман шеше күҙәнәктәре үҫеше хәүефен булдырмауын асыҡлаған. Ферменттың эффекты уның концентрацияһына, яман шеш күҙәнәктәренә тәьҫиренең күләменә һәм оҙайлығына бәйле. Тикшеренеүҙең авторы Вэй Чжен Чен әйтеүенсә, был асыш ашҡаҙан яман шешенә ҡаршы препараттар уйлап табыуға булышлыҡ итәсәк. Элегерәк оло кешеләр өсөн һөт зарарлы тигән ҡараш йәшәй ине, әммә белгестәр белдереүенсә, һөттө самаһын белеп ҡулланыу организмды онкологик сирҙәрҙән һаҡлай.

■ Эшкә бар күңелең менән бирелеү шәхси тормошҡа насар йоғонто яһай, тип уйлаусылар хаталана. Швейцария тикшеренеүселәре Швейцарияла һәм Германияла йәшәгән 285 ғаилә парын тикшергән һәм быйың дөрөҫ түгеллеген дәлилләгән. Ғалимдар билдәләүенсә, кем күп эшләй, улар буш ваҡыттарын ғаиләһенә арнай. Шуға ла быйдай ғаиләләрҙә ир менән ҡатын бер-береһенән ҡәнәғәт була. Женева университетынды үткәрелгән һынауҙар күрһәтеүенсә, ғаилә мөнәсәбәттәрендәге көсөргәнеш бала тыуғас барлыҡҡа килә. Кемдендер ауырып китеүе мөнәсәбәттәргә бер ниндәй ҙә йоғонто яһамай. Ғалимдар билдәләүенсә, хаҡлы ялға сығыу өлкәнәйгән ғаилә парҙарын тағы ла яҡынайта төшә.

■ Бер юлы бер нисә электрон ҡоролма менән файҙаланыу күҙҙәр көсөргәнешенә килтерә. Тикшеренеүҙәрҙә 10 меңдән ашыу өлкән кеше ҡатнашҡан. Уларҙың 70 проценты бер юлы бер нисә ҡорамал менән ҡулланыуын белдергән, 65 проценты был осраҡта физик дискомфорт кисереүен - күҙҙәр әсетеүен, күҙҙәрҙең насар күрә башлауын, баш ауыртыуын таныған. Етмәһә, экранды күҙҙәргә ныҡ яҡын тотоу сәбәпле күҙ ҡабаҡтарын йомоп алыу процесы һирәгәйә. Был тағы ла күреү һәләтенең түбәнәйеүенә килтерә. Цифрлы ҡорамалдар экрандары бүлеп сығарған зәңгәр төҫ тә насар йоғонто яһай. Был төҫ үҙенең сифаты менән ультрафиолет нурланышына яҡын.

РУХИӘТЕБЕҘ

# ҺАБАНТУЙ БАЙРАМЫНЫҢ...

## башҡорт мифологияһына бәйле аңлатмаһы




**Донъяла байрамһыҙ халыҡтар булмай. Сәнәғәте, фәне иң юғары бейеклектәргә күтәрелгән, йыһан киңлектәрен гиҙгән милләттәр ҙә, джунгли кеүек урман шырлыҡтарында берәү менән ҡатнашмай, үҙ донъяларында мәж килгән бәләкәй генә ҡәбиләләр ҙә, ниндәй ҙә булһа ваҡиғаға арнап, байрамдар үткәрә. Күренекле урыҫ ғалимы М.Бахтин байрамдарҙы, мәҙәниәттең иң тәүге төрө, ти. Ҡайһы бер ғалимдар, кешелек таш быуат замандарында уҡ байрамдар үткәргән, тигән фекерҙә. Йәғни, кешелек мәҙәниәте формалаша башлаған саҡтарҙа байрамдар ҙа формалаша башлаған, тиергә була. Борон-борондан байрамдарҙы ниндәй ҙә булһа берәй ваҡиғаға бәйләп, уларға арнап үткәрер булғандар. Был ваҡиғаларға ҡышҡы һыуыҡтар (селлә) бөтөп, йылы көндәр килеүе, сәсеүгә төшөү йәки сәсеү эштәренең тамамланыуы, көҙөн уңыш йыйып алыу, ҡышҡы һуғымдар башланыу кеүек ваҡиғаларҙы индерергә була.**

Башҡорттар ҙа бик борондан үҙҙәренең тормош-көнкүрешенә, тәбиғәтенә яраҡлаштырылған байрамдар үткәрер булған. Быйдай байрамдарға - ҡарғатуй (ҡарға бутҡаһы), кәкүк сәйе, наурыз, нардуған, һуғым кеүектәрҙе индерергә була. Ошондай эреле-ваҡлы байрамдарыбыҙ араһында иң көтөп алынғаны, төрлө мауыҡтырғыс тамашаларының күплеге, бай йөкмәткеһе менән айырылып торған байрам - ул һабантуйҙыр. Хәҙерге ваҡытта һабантуй башҡорттоң ғына милли байрамы булыу сиктәренән сығып, Башҡортостан Республикаһында йәшәгән бөтә халыҡтарҙың да уртаҡ һәм яратҡан бер байрамына әүерелде.

Башҡорт һабантуйы тураһында фәндә иң тәүге мәғлүмәттәрҙе 18-се быуаттың урыҫ ғалимдары Георги, Лепехиндың хеҙмәттәренән табырға була. Мәҫәлән, Георги башҡорт һабантуйының эстәлеген тасуирлап яҙғандан һуң, сирмештәрҙә лә (хәҙерге мари халҡында) һабантуйға оҡшаш байрам барлығын билдәләп киткән. Георгиның яҙмаларынан күренеүенсә, шул заман һабантуйының тамашалары һәм эстәлеге хәҙерге заман һабантуйы менән, дөйөм алғанда, тап килә, тип әйтергә була. Һабантуй, ғөмүмән, күп кенә төрки халыҡтарында бар. Мәҫәлән, башҡорт менән татарҙан тыш, нуғайҙар, ҡумыҡтар, ҡарасай-балҡарҙар ҙа уны байрам итә. Эстәлеге лә, ҡайһы бер айырымлыҡтарҙы иҫәпкә алмағанда, яҡынса тап килә, тип әйтергә була. Һабантуйҙы Себерҙә йәшәгән төрлө эреле-ваҡлы төрки телле халыҡтарҙың милли байрамдары менән сағыштырып тикшереү был милли байрамыбыҙҙың тамыры бик боронғо дәүерҙәрҙә һәм дөйөм бер тамырҙан икәнен күрһәтә. Мәҫәлән, яҡуттарҙа - ысыах, хакастарҙа - тон пайрам, тываларҙа - шагаа, алтайҙарҙа сага-байрам кеүектәр шундай уртаҡ тамырлы байрамдарҙандыр. Тарихтың тағын да тәрәнерәк осорҙарына күҙ һалһаҡ, боронғо һунндарҙың да беҙҙең һабантуй кеүегерәк байрам үткәреүе тураһында Ҡытай яҙмаларында мәғлүмәттәр һаҡланған. Унан алдараҡ дәүерҙәрҙә шундай уҡ байрамды скифтарҙың, саҡтарҙың үткәреүе тураһында боронғо гректар яҙып ҡалдырған. Көнсығыш иран телдәренең береһендә һөйләшкән саҡтарҙың сарматтар, аландар кеүек уҡ, башҡортто формалаштырыуҙа ҡатнашыуы фәндә иҫбат ителгән бер факт булып, хәҙер быға берәү ҙә шик белдермәй. Тимәк, милли байрамыбыҙ - һабантуйҙы ата-бабаларыбыҙ беҙҙең дәүерҙәргә тиклем үк үткәргән һәм уның йәше бер нисә мең йыл иҫәпләнә, тип әйтә алабыҙ.

Был байрам Ислам диненә ҡәҙәр үк, донъяла мифологик аң хөкөм һөргән дәүерҙә формалашҡанға күрә, уның эстәлеген дә башҡорт мифологияһынан сығып аңлатырға кәрәк. Шунһыҙ, беҙ һабантуйҙың эстәлеген тулыһынса аңлауға өлгәшә алмаҫбыҙ. Мине һабантуйҙың эстәлеге күптән, студент йылдарынан уҡ ҡыҙыҡһындыра ине. Ошо ҡыҙыҡһыныуым эҙләнергә, соҡсонорға мәжбүр итеп торҙо, һәм, ниһайәт, байрамдың семантикаһын аса алдым кеүек. Шуларҙы уҡыусыға тәҡдим итергә булдым.

Хәҙерге һабантуйҙар яҙғы сәсеү эштәре үткәс, ошо эштәргә йомғаҡ яһау кеүегерәк үткәрелә. Элек иһә, башҡорттар һабантуйҙы ҡар иреп, тау биттәрендә йәшел үлән ҡалҡып, ағастарҙа бөрөләр тулыша башлағас үткәрер булған. Был байрам башҡорттоң боронғо календарь байрамы булараҡ, тәбиғәттең терелеүен, тормоштоң яңырыуын һынландырған тамашаларҙан торған. Яҙ көндәре, тәбиғәт ҡышҡы йоҡонан уяныл, донъя һәм кеше тормошо яңырған саҡта, донъялағы күп халыҡтар һабантуйҙы байрам иткән һәм уны әле лә байрам итәләр.

Һабантуйҙағы тамашаларҙан - ат сабышы (бәйге), йүгереү, көрәш, бейек текә бағана башына (һырғауылға) үрмәләү, көршәк ватыу, бер яҡ башы ергә ҡыялатып ҡаҙып ултыртылған, икенсе башына аҡ тәкә бәйләнгән сайҡалып торған бүрәнә аша үтеп, шул тәкә-бүләкте алыу, ике аяҡты ла тоҡҡа тығып, бер-береһен уҙа-уҙа йүгерергә маташыу кеүек тамашалар башҡорт һабантуйының мотлаҡ үткәрелергә тейешле ритуалдары. Борон замандарҙа был тамашаларҙың һәр береһенең башҡорт өсөн эстәлеге, мәғәнәһе (семантикаһы) аңлайышлы булған. Уларҙың тейешле итеп, тулы үтәлеше башҡорт донъяһының именлегенә йоғонто яһай, шуны тәьмин итә, тип ышанған боронғолар. Сөнки боронғо башҡорттоң уйлауынса, шулай уҡ башҡорттоң мифологик, этнографик, фольклор материалдарынан күренеүенсә, һабантуйҙа үткәрелгән тамашаларҙы донъя (Йыһан) яралған саҡта уларҙың иң боронғо ата-бабаһы Урал батыр башҡарған. Урал батыр өсөн улар тамаша ғына түгел, ә бөтә донъяны хаостан (дейеү, аждаһаларҙан) азат итеп, донъяны әҙәм балаһы һәм бүтән тере йәндәр имен-аман йәшәрлек хәлгә килтереү кеүек кеше атҡарып сыға алмаҫлыҡ ауыр эш булған. Йәғни, хәҙерге заман театр теле менән әйткәндә, Урал батыр эпосы сценарий булһа, һабантуй иһә ошо сценарийға ҡоролған тамаша була. Быйың шулай икәненә башҡорт халыҡ ижадынан әллә күпме миҫалдар килтерергә була.

Боронғо замандарҙа һабантуйҙағы ике батырҙың көрәшен аҡ, саф, изге көстәрҙең яуыз ҡара көстәргә ҡаршы көрәше тип аңлағандар. Урал батыр эпосында Урал Ҡатил батша иленә барып сыҡҡас, был илдә үгеҙ менән көрәшеп, уны еңә һәм бөтә ҡара, яуыз көстәрҙе юҡ итә. Батырҙарҙың үгеҙ менән көрәше тураһында башҡорт халыҡ әкиәттәрендә лә телгә алына. Үгеҙ менән көрәш, ғөмүмән, төрки халыҡтарҙың бик борондан килгән йолаһы булған. Был турала ғалимдар күптән инде әллә күпме хеҙмәттәр яҙып сыҡты. Әлеге үгеҙ менән көрәш йолаһында үгеҙ ҡышты һынландырған, сөнки ул боронғо ата-бабаларыбыҙҙың мифологик ҡараштары буйынса, ҡыштың, теге донъяның символы булған. Шуға күрә, Урал батырҙың үгеҙ менән көрәшен һәм был көрәштә еңеүен яҙҙың ҡышты еңеүе тип аңларға кәрәк.

Борон шулай уҡ һабантуйҙа тоҡ кейеп йүгереү ярышының да үҙ мәғәнәһе булған. Хәҙер был бер ҡыҙыҡ һәм дә мәҙәк тамаша булараҡ ҡабул ителә. Башҡорт этнографияһында ярымтыҡ, шүрәле тигән әҙәм балаһына зыян килтерергә маташыусы мифологик заттар тураһында бихисап легендалар, риүәйәттәр һаҡланған. Боронғо башҡорттарҙың ышаныуҙары буйынса, ана шул ярымтыҡ тигәненең күҙе лә, аяғы ла тик берәр генә, йәғни һыңар булған. Улар төндә атта йөрөргә яратҡандар, тип тә әйтелә фольклорҙа. Зәғифлек, боронғоларҙың уйлауынса, теге донъя менән бәйләнеште аңлатыусы бер символ. Теге донъя иһә, мифологик ҡараштар буйынса, ҡыш менән дә бәйле. Башҡорт ҡобайырҙарында "Ҡара ерҙең үлгәне -

> ✓ *Авторы билдәһеҙ булған, киң таралған интеллектуаль милекте яҡлау мөмкин түгел. Рәсәйҙә матди булмаған мәҙәни мираҫ объекттары бары тик Рәсәй дәүләт Халыҡ ижады йорто алып барған милли реестрға ғына индерелә ала.*



ҡар аҫтында ҡалғаны", тигән юлдарҙан ҡарҙың, ҡыштың үлем менән бәйле булыуын күрәбеҙ. Фәнни мәғлүмәттәрҙән ҡыш менән үлемдең борон синоним булараҡ йөрөүен беҙ бер башҡортта ғына түгел, һинд-иран телле һәм бүтән телле халыҡтарҙа ла күрәбеҙ.

Башҡорттарҙың боронғо инаныуҙары буйынса, теге донъяла ожмахҡа юлда сират күпере аша үтергә кәрәк. Был күпер аша үҙ ғүмерҙәрендә тик яҡшылыҡ, изгелек ҡылған кешеләрҙе аҡ тәкә үткәреп ебәрә, имеш. Беҙҙә әле лә, бик ныҡ өлкәнәйеп, йәшәргә күп ҡалмаған кеше тураһында кинәйәләп "Аяғына аҡ тәкә бәйләнгән ине", тигәндә ишетергә була. Был һүҙҙәрҙең мәғәнәһен, теге донъяла сират күпере аша үтергә күп ҡалмаған, тип аңларға кәрәк. Һабантуйҙа ҡыйлатып ергә ҡаҙып ултыртылған, сайҡалып торған бағана аша үтеп, осона бәйләнгән тәкәне призға алыуҙы ана шул сират күпере аша уҙып, ожмахҡа эләгеүҙең символик бер һынландырылышы, тиеберәк аңларға була. Теге донъяла ниндәйҙер бер күпер аша үтеү тураһындағы инаныстар бик күп халыҡтарҙа бар.

Һабантуйҙың тағын бер мәҙәге - күҙҙәрҙе бәйләп көршәк ватырға маташыуҙы ла башҡорт мифологияһынан аңлатырға була. Этнографтарҙың материалдарынан күренеүенсә, яңы ваҡыт башланған мәлдә иҫке әйберҙәрҙән ҡотолоу, уларҙы ватыу, онтау йолаһы бик күп халыҡтарҙа бар. Күп кенә халыҡтарҙа, мәҫәлән, Европа халыҡтарында, шулай уҡ Урта Азияла йәшәгән тажик, үзбәктәрҙә яңы йыл башланыуҙы аңлатҡан Науруз байрамында был йола байрам шаярыуы булараҡ әле булһа үтәлеп килә. Был йоланың мәғәнәһе - иҫкене ватып, яңыға юл ярыу, сөнки, иҫке китмәй тороп, яңыға юл бикле. Башҡортта әле лә "Берәү үлмәй, берәү көн күрмәй" тигән әйтем йәшәп килә. Былың мәғәнәһе - кемдер берәү үлеп, теге донъяға күсеп, урын бушатмай тороп, яңы тыуырға тейеш икенсе берәүгә урын юҡтыр.

Боронғо төркиҙәрҙең, шул иҫәптән, башҡорттарҙың мифологик ҡараштары буйынса, Тәңре йәшен уғы менән атып, табаҡтай күкте яра һәм шунан ғына йоморҡа ярылып, яңы йән эйәһе донъяға тыуған кеүек, донъя ярала. Был мотив башҡорт фольклорында бик яҡшы һаҡланған. Мәҫәлән, Буҙансы батыр, Ҡараса батыр, Етегән батыр әкиәттәрендә һәм башҡаларҙа Йүгерек батыр йүгереү ярышында йоҡлап китә һәм уны уятыу өсөн батырҙың дуҫы уҡ менән Йүгеректең башына кейҙерелгән сүлмәкте (ҡаҙанды) ярa ата. Шунан һуң Йүгерек батыр уяна һәм хәҙерге тел менән әйткәндә, финишҡа беренсе булып килеп етә. Бында уҡ атыу шул уҡ йәшен уҡтың символы булһа, ә йоҡлап ятыуҙы үлеп һәм яңынан терелеү, яңынан йәшәй башлау, тип аңларға кәрәк. Ошоларҙан сығып, һабантуйҙағы көршәк ватыуҙы ла Тәңренең донъяны барлыҡҡа килтергән мәлдә уҡтан атып, ер-яны донъяны барлыҡҡа килтереүенең символик һынланышы, тип аңларға була.

Һабантуйҙа бейек бағана (һырғауыл, һырғый тә әйтәләр) башына менеп бүләк алып төшөүгә лә башҡорт мифологияһынан аңлатыу табырға була. Боронғо ата-бабаларыбыҙҙың донъяуи ҡараштары буйынса, донъяның үҙәгендә Донъя тирәге (Донъя ағасы) үҫә, имеш. Был ағас яҡты донъяны аҫҡы һәм юғарылағы (күк) донъяларға тоташтырып тора. Ағастың тамыры - аҫҡы донъя, ә башы юғарылағы күк донъяһы менән тоташтырып тора. Был ағастың тамырына бик ҙур бер йылан оялаған, ә иң үрге осонда Сәмреғош оя ҡорған. Хәтерегеҙҙәлер, Аҡъял батыр әкиәтендә батыр егет Сәмреғоштың балаларын бағыу йыландан ҡотҡарғас, Сәмреғош батырҙы аҫҡы донъянан яҡты донъяға алып сыға. Һабантуйҙағы бейек, шыма һырғауыл ана шул донъя үҙәгендә үҫеүсе Донъя ағасының символылыр. Борон был бейек бағанаға (һырғауылға, һырғыйға) менеүҙе күккә олғашып, унда Тәңренең үҙе менән күрешеп, унан бүләк алып төшөүгә тиңләгәндәр. Бындайыраҡ йолалар донъялағы күп кенә халыҡтарҙың мифологик ҡараштарында булған һәм әле лә күптәрендә һаҡлана.

Һабантуйҙа йола буйынса үтәлгән һәр тамашаның бик тә тәрән йөкмәткеһе бар һәм улар боронғо замандарҙа ниндәй ҙә булһа мәғәнә менән башҡарылған. Был боронғо байрамыбыҙҙың төп мәғәнәһе - донъялар имен, тәртиптә һәм иппе торһон тигән теләктәр. Тик ваҡыт үтеү менән уларҙың мәғәнәләре онотолоп бөткән, башҡорттар Ислам диненә күсеп, һабантуйҙың төп мифологик нигеҙҙәрен һәм уны үткәреүҙең сәбәптәрен дә иҫтән сығарып, был байрамды матур һәм мауыҡтырғыс бер тамаша, тип кенә ҡарай башлаған.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Башҡорт фольклоры һәм этнографияһы материалдарынан сығып, һабантуйҙы халҡыбыҙҙың иң боронғо килгән төп бер байрамы тип әйтә алабыҙ. Был байрамды боронғо ваҡыттарҙа башҡорттоң ата-бабалары булған саҡ, сармат, аландар, һундар ҙа үткәрер булған. Тимәк, беҙ, башҡорттар, әле һанап киткән халыҡтарҙың туранан-тура вариҫтары булараҡ, был байрамды үҙ байрамыбыҙ тип байрам итәбеҙ.**

**Зәкирйән ӘМИНЕВ,**
**тарихсы, философия фәндәре кандидаты.**

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

# ЫҘҒЫШ АЛМАҺЫ ТҮГЕЛ!

**Август һуңында Ҡаҙанда үткән Татар АССР-ы ойошторолоуҙың 100 йыллығына әҙерлек һәм уны үткәреү буйынса ойоштороу комитеты ултырышында Татарстан Президенты Рөстәм Минниханов Һабантуй байрамын интеллектуаль милек итеп теркәү һәм милли байрамға бағышланған музей булдырыу зарурлығы тураһында белдерҙе. Һабантуй татар халҡының ғына түгел, төрки халыҡтарының дөйөм байрамы булараҡ, был хәбәр бер аҙ аптыратты ла. Әммә хис-тойғоларға бирелмәй, мәсьәләгә асыҡлыҡ индереүҙе һорап, Рәсәйҙең Д.С. Лихачев исемендәге Мәҙәни һәм тәбиғи мираҫ ғилми-тикшеренеү институты хеҙмәткәре, культурология фәндәре кандидаты, ЮНЕСКО-ның Халыҡ ижады буйынса милли советы вице-президенты Алексей КЫЛАСОВҡа мөрәжәғәт иттек.**

➔ **Һеҙ был белдереүҙе нисек баһалайһығыҙ: Һабантуйға бер халыҡтың ғына патент алыуы уны үҙенеке тип һанаған башҡа халыҡтарҙың хоҡуғын боҙмаймы?**

- Татарстан Президенты Һабантуй байрамын Рәсәй Федерацияһының матди булмаған мәҙәни мираҫы объекттары исемлегенә индереү тураһында әйткәндер, тип уйлайым. Сөнки, беренсенән, авторы билдәһеҙ булған, киң таралған интеллектуаль милекте яҡлау мөмкин түгел. Икенсенән, Рәсәйҙә матди булмаған мәҙәни мираҫ объекттары бары тик Рәсәй дәүләт Халыҡ ижады йорто алып барған милли реестрға ғына индерелә ала. Рәсәйҙәге объекттарҙы ЮНЕСКО-ның Бөтә донъя мәҙәни мираҫы исемлегенә индереү мөмкинлеге юҡ, сөнки илебеҙ 2003 йылда уҡ ЮНЕСКО-ның матди булмаған мәҙәни мираҫын һаҡлау тураһында конвенцияға ҡул ҡуйһа ла, уны һаманғаса ратификацияламаны.

➔ **Башҡорт ғалимы, философия фәндәре кандидаты З. Әминевтың "Башҡорт байрамы "Һабантуй"ҙың миф-ритуал нигеҙҙәре" тигән ғилми эше бар. Унда ул байрамдың үҙен һәм ундағы традицион уйындарҙы мифологияға, башҡорттарҙың боронғо донъяуи ҡарашына бәйләп тикшерә. Һәр милләттең мәҙәни мираҫын һаҡлау өсөн шарттар тыуҙырыу белгесе булараҡ, Һабантуйҙы бары тик татар халҡының байрамы тип кенә билдәләү ниәтенә ниндәй баһа бирәһегеҙ?**

- Әминевтың мәҡәләһе менән дә, башҡа авторҙарҙың хеҙмәте менән дә танышмын. Башҡорттарҙа һәм татарҙарҙа байрам мәҙәниәтен өйрәнеү темаһына иғтибар үҙәгендә булыуы яҡшы, ә сәйәсмәндәрҙең эшмәкәрлеге быға яңылыҡ ҡына өҫтәй. Үкенескә ҡаршы, мәҙәни мираҫты һаҡлау буйынса ҡулланылған саралар һәр саҡ беҙҙең өмөттәрҙе аҡламай. Шул уҡ ваҡытта, сәйәсмәндәрҙең белдереүендә бер ниндәй хилафлыҡ юҡ, улар сәйәси ваҡиғаларға һиҙгер һәм милли үзбилдәләнеш процестарында алдынғы булғылары килә. Мәҙәни мираҫтың ниндәй милләткә ҡарау мәсьәләһен хәл иткәндә иһә, бар яҡтан да үлсәргә кәрәк. Мираҫ институты Һабантуй байрамы өсөн уның билдәләнгән барлыҡ урындарҙағы үҙенсәлеген күрһәтеп, мәҙәни мираҫ объекты паспортын эшләргә әҙер. Бындай алым ЮНЕСКО тарафынан 17 илдә билдәләнгән Науруҙ байрамын ҡылыҡһырлауҙа ҡулланылғайны. Хәҙер ҙә был эш миграция процестарынан сығып дауам итә, сөнки ошо байрам традицияларына эйә халыҡтар икенсе урындарға күсенә, билдәләү географияһы киңәйә, ул Европа һәм Америка илдәренә лә тарала.

➔ **Башҡорттарҙың ҡайһы бер этнографик төркөмдәре Һабантуй байрамын элек Йыйын тип йөрөткән, йәғни йыйын башҡорт һабантуйының синонимы булып тора, унда шул уҡ традицион ярыштар, бәйгеләр уҙғарыла. Хәҙер ҙә ЮНЕСКО-ның матди булмаған мәҙәни мираҫы статусына дәғүә иткән, Рәсәйҙәге беренсе "Янгантау" геопаркы урынлашҡан Салауат районында халыҡ-ара "Салауат йыйыны" байрамы уҙғарыла. ЮНЕСКО геопарк гариҙаһын хуплаған ваҡытта, Һабантуйға интеллектуаль хоҡукты теркәү мәсьәләһе көн ҡаҙағынан төшөп ҡалырмы, әллә, киреһенсә, ҡыҫкенләшерме?**

- Тәү сиратта шуны аңларға кәрәк: тәбиғи парктар ингән матди мираҫ һәм әле һүҙ барған байрамдар - матди булмаған мираҫ - улар ЮНЕСКО-ның төрлө бүлектәренә ҡарай. Әммә беҙҙең илдә улар Мираҫ институты эшмәкәрлегендә берләштерелгән. Шуға күрә, был объекттарҙы берләктә тикшереп һәм тасуирлап, бер һөҙөмтәгә килеүҙе инҡар итмәйем.

**Зәйтүнә НИҒӘМӘТЙӘНОВА әңгәмәләште.**

*СӘЛӘМӘТ БУЛ!*



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

Философ Сенека - билдәле "тыңлаусы". Ныҡ ҡартайғансы ул бер тапҡыр ғына тыңлап, 2 мең һүҙҙе ҡабатлау һәләтенә эйә булған. Моцартҡа музыкаль әҫәрҙе башҡарыу һәм ҡағыҙға төшөрөү өсөн бер тапҡыр тыңлау ҙа еткән. Сергей Рахманиновта ла шундай уҡ музыкаль һәләт күҙәтелгән. Ул пьеса ноталарына күҙ һалғандан һуң, уны уйнай алған. Дирижер Артуро Тосканини 400 партитураның һәр нотаһын иҫләгән.

### "Оҫта"ларға нимә ярҙам итә

Кешеләрҙең өсөнсө төрө мәғлүмәтте ҡулы менән "йәбештерә". Уларҙы "Оҫта" тиҙәр. Бөтөн нәмәне тәжрибә аша һеңдерәләр - ике сәғәт класта ултырғанға ҡарағанда, биш минут үҙең тотоп эшләп ҡарау яҡшыраҡ улар өсөн. Әгәр хәтерегеҙ материалды яҙған, һүрәт итеп төшөргән, тотоп ҡараған ваҡытта нығыраҡ үҙләштерә икән, тимәк, һеҙ - "оҫта". Бынан тыш, бейеү хәрәкәттәрен - уларҙың эҙмә-эҙлелеген, тиҙлеген, темпты, ритмды еңел үҙләштерергә тейешһегеҙ.

Хәрәкәт итеүсе хәтерле кешеләр төрөнөң "хәтере" - мускулдарҙа, шуға улар бөтөн нәмне мускул-хәрәкәт образдары аша иҫендә ҡалдыра.

Билдәле "оҫта"ларға, гәҙәттә, физик йылғырлығы, таһыллығы булған кешеләрҙе индерәләр. Ундайҙарҙы тағы "алтын ҡуллы" тиҙәр. Әммә улар араһында билдәле спортсылар, цирк артистары, күҙ быуыусылар бик күп.

### "Универсалдар"ға нимә ярҙам итә

Дүртенсе төр - "универсалдар". Уларҙың хәтере ҡатнаш: тауыш-моторика, күреү-хәрәкәт, күреү-ишетеү. Ундайҙар күпселекте тәшкил итә һәм был төр хәтер тормошта баһалыраҡ, сөнки кеше эшмәкәрлеге киң ҡырлы.

Александр Пушкиндың ағаһы Лев Сергеевич феноменаль хәтергә эйә булған. Уның хәтере "Евгений Онегин" поэмаһының бишенсе главаһының яҙмышын ҡотҡарған. Александр Сегеевич уны Мәскәүҙән Питерға барғанда юлда юғалта. Ҡаралама юҡ ителгән була, ә нәшриәткә тапшырырға кәрәк. Шағир Кавказға ағаһына хат яҙа һәм хәл-торошто бәйән итә. Тиҙҙән ул юғалған главаның өтөрөнә тиклем яҙылған тексын ала: ағаһы, бер тапҡыр тыңлағандан һуң, барыһын да хәтерендә ҡалдыра. Ә Лев Сергеевич был ваҡытта оло йәштә була.

Уинстон Черчилль Шекспирҙың барлыҡ уҡыған, театрҙа ҡараған әҫәрҙәренең барыһын да яттан тиерлек белгән.

Композиторҙар Римский-Корсаков менән Скрябин, оло йәштә саҡтарында үҙҙәрендә "төҫлө ишетеү" һәләтен аса. Юҡҡа ғына Скрябинды төҫлө музыканың атаһы тимәйҙәр.

### Башҡа хәтер төрҙәре

Еҫ хәтере еҫ буйынса ваҡиғаның барлыҡ деталдәрен иҫенә төшөрә алыусыларға хас. Хатта саҡ ҡына тойолған еҫ тә ҡайһы берҙәребеҙҙе ҡасандыр ятраҡтан йәки күрә алмаған урынға алып ҡайтыуы мөмкин. Мәҫәлән, индеецтарҙың башлыһы мөһим хәбәр менән сапҡынсы ебәргән ваҡытта, сапҡынсы уны тыңлар алдынан үләнле тоҡто асып, хәбәрҙе үлән еҫен еҫкәп тыңлаған. Һуңынан ул ялһыҙ 100 миль йүгерә, ә тәғәйен урынға барып еткәс, шул уҡ тоҡто асып, үлән еҫен һулай һәм хәбәрҙе түкмәй-сәсмәй һөйләп бирә алған.

**С. КУЗИНА.**
**(Дауамы бар).**



## 1 ОКТЯБРЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 "Сегодня 1 октября. День начинается".
9.55 Модный приговор.
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "На самом деле". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Операция "Сатана". [16+]
22.30 Премьера. "Большая игра". [12+]
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.10 Т/с "Паук". [16+]
1.15 "На самом деле". [16+]
2.15 "Мужское / Женское". [16+]
3.00 Новости.
3.05 "Мужское / Женское". [16+]
3.15 Модный приговор.
4.10 Контрольная закупка.

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.40 Т/с "Морозова". [12+]
17.00 Вести.
17.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.40 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Московская борзая-2". [16+]
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Майор полиции". [16+]
3.50 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**10.00 Д/ф "Чужие дети". [16+]**
**11.00 Новости недели (на рус. яз.).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Күңелем моңдары. [12+]**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Новости (на баш. яз.).**
**14.45 Весело живем. [12+]**
**15.00 Наука 102. [12+]**
**15.30 "Книга сказок". [0+]**
**15.45 "Борсаҡ". [0+]**
**16.00 Гора новостей.**
**16.15 "Перекличка". [6+]**
**16.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.45 Наши годы. [12+]**
**17.15 Учим башкирский язык. [0+]**
**17.30 "Ҡурай даны". [12+]**
**17.45 Автограф. [12+]**
**18.15 Бизнес-проба. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**18.45 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - ЦСКА (Москва).**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Интервью. [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 Автограф. [12+]**
**23.45 Весело живем. [12+]**
**0.00 Х/ф "Донни Дарко". [16+]**
**2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**3.30 Спектакль "Любви все возрасты покорны". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 2 ОКТЯБРЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 "Сегодня 2 октября. День начинается".
9.55 Модный приговор.
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "На самом деле". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Операция "Сатана". [16+]
22.30 Премьера. "Большая игра". [12+]
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.10 Т/с "Паук". [16+]
1.15 "На самом деле". [16+]
2.15 "Мужское / Женское". [16+]
3.00 Новости.
3.05 "Мужское / Женское". [16+]
3.15 Модный приговор.
4.10 Контрольная закупка.

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.40 Т/с "Морозова". [12+]
17.00 Вести.
17.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.40 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Московская борзая-2". [16+]
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Майор полиции". [16+]
3.50 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**10.00 Д/ф "Чужие дети". [12+]**
**11.00 Следопыт. [12+]**
**11.30 Новости (на рус. яз.).**
**11.45 Бизнес-проба. [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Күңелем моңдары. [12+]**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Новости (на баш. яз.).**
**14.45 Весело живем. [12+]**
**15.00 Дорога к храму. [0+]**
**15.30 Йырлы кәрәҙ. [6+]**
**15.45 Бауырһаҡ. [0+]**
**16.00 Гора новостей.**
**16.15 "Семәр". [0+]**
**16.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.45 Современник. [12+]**
**17.00 Дознание. [16+]**
**17.30 "Ҡурай даны". [12+]**
**17.45 Орнамент. [6+]**
**18.00 "Бай". [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Интервью. [12+]**
**19.30 Автограф. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.30 Деловой Башкортостан. [12+]**
**20.45 Криминальный спектр. [16+]**
**21.00 Уфимское "Времечко".**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Интервью. [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 "Песня года". [12+]**
**23.30 Весело живем. [12+]**
**0.00 Х/ф "Огненное кольцо". [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.15 Спектакль "Убей меня, голубчик". [12+]**
**5.15 Весело живем. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 3 ОКТЯБРЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 "Сегодня 3 октября. День начинается".
9.55 Модный приговор.
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "На самом деле". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Операция "Сатана". [16+]
22.30 Премьера. "Большая игра". [12+]
23.30 Т/с "Паук". [16+]
1.30 "На самом деле". [16+]
2.30 "Мужское / Женское". [16+]
3.00 Новости.
3.05 "Мужское / Женское". [16+]
3.30 Модный приговор.
4.25 Контрольная закупка.

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.40 Т/с "Морозова". [12+]
17.00 Вести.
17.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.40 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Московская борзая-2". [16+]
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Майор полиции". [16+]
3.50 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**10.00 Д/ф "Чужие дети". [12+]**
**11.00 Наука 102. [12+]**
**11.30 Новости (на рус. яз.).**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Тәмле. [12+]**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Новости (на баш. яз.).**
**14.45 Весело живем. [12+]**
**15.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**15.30 "Городок АЮЯ". [0+]**
**15.45 "Ал да гөл". [6+]**
**16.00 Гора новостей.**
**16.15 "Физра". [6+]**
**16.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.45 Д/ф "В жерновах времени". [12+]**
**17.30 "Ҡурай даны". [12+]**
**17.45 Имею право. [12+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Интервью. [12+]**
**19.30 Алтын тирмә. [0+]**
**20.15 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.30 "100 дней до совершенства". [12+]**
**20.45 Дорожный патруль. [16+]**
**21.00 Историческая среда. [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Интервью. [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 Бала-саға. [6+]**
**23.45 Весело живем. [12+]**
**0.00 Х/ф "Огненное кольцо". [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.15 Спектакль "Коварная любовь". [12+]**
**4.45 Весело живем. [12+]**
**5.00 Башҡорттар. [6+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 4 ОКТЯБРЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 "Сегодня 4 октября. День начинается".
9.55 Модный приговор.
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "На самом деле". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Операция "Сатана". [16+]
22.30 Премьера. "Большая игра". [12+]
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.05 Телевизионная премия "ТЭФИ-2018".
2.10 "Мужское / Женское". [16+]
3.00 Новости.
3.05 Модный приговор.
4.00 "Давай поженимся!" [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.40 Т/с "Морозова". [12+]
17.00 Вести.
17.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.40 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Московская борзая-2". [16+]
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Майор полиции". [16+]
3.50 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**10.00 Д/ф "Чужие дети". [12+]**
**11.00 Д/ф "Моя планета - Башкортостан". [12+]**
**11.30 Новости (на рус. яз.).**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Күңелем моңдары. [12+]**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Новости (на баш. яз.).**
**14.45 Весело живем. [12+]**
**15.00 У дачи. [12+]**
**15.30 Байтус. [6+]**
**15.45 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**16.00 Гора новостей.**
**16.15 "Сыйырсыҡ". [0+]**
**16.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.45 Д/ф "Вьетнам: Путешествие в страну 9 драконов". [12+]**
**17.30 "Ҡурай даны". [12+]**
**17.45 Орнамент. [6+]**
**18.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Интервью. [12+]**
**19.30 Башҡорттар. [6+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.30 "100 дней до совершенства". [12+]**
**20.45 Криминальный спектр. [16+]**
**21.00 Уфимское "Времечко".**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Интервью. [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Бессмертные". [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.15 Спектакль "Кадриль". [12+]**
**4.45 Весело живем. [12+]**
**5.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 5 ОКТЯБРЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 "Сегодня 5 октября. День начинается".
9.55 Модный приговор.
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.55 "Поле чудес". [16+]
21.00 Время.
21.30 "Сегодня вечером". [16+]
23.30 Премьера. "Голос 60+". Финал. [12+]
1.45 "Вечерний Ургант". [16+]
2.40 Х/ф Премьера. "Вторая жизнь Уве". [16+]
4.50 Контрольная закупка.

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.40 Т/с "Морозова". [12+]
17.00 Вести.
17.25 Местное время. Вести-Приволжского федерального округа.
17.40 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 "Юморина". [16+]
23.30 Х/ф "Коварные игры". [12+]
3.30 Х/ф "Каминный гость". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**10.00 Д/ф "Тамерлан. Архитектор степей". [12+]**
**11.00 Автограф. [12+]**
**11.30 Новости (на рус. яз.).**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 Спектакль "Москва-Васютки". [12+]**
**13.30 Күңелем моңдары. [12+]**
**14.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**14.30 Новости (на баш. яз.).**
**14.45 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**15.30 "Сулпылар". [0+]**
**16.00 "Гора новостей". [6+]**
**16.15 "Зеркальце. [6+]**
**16.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.45 Победить себя… [6+]**
**17.00 Д/ф "Моя планета - Башкортостан". [12+]**
**17.30 Народный учитель РФ. [12+]**
**18.00 "Йома". [0+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**18.45 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Слован" (Братислава).**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Наука 102. [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 "Байыҡ-2018". [12+]**
**0.00 Х/ф "В центре внимания". [18+]**
**2.45 Спектакль "Дальше тишина". [12+]**
**5.45 Д/ф "Тамерлан. Архитектор степей". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 6 ОКТЯБРЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.15 Х/ф "Романс о влюбленных". [12+]
6.00 Новости.
6.10 Х/ф "Романс о влюбленных". [12+]
7.55 Играй, гармонь любимая!
8.45 М/с "Смешарики. Новые приключения".
9.00 Умницы и умники. [12+]
9.45 Слово пастыря.
10.00 Новости.
10.10 Премьера. "Голос 60+". На самой высокой ноте". [12+]
11.10 Д/ф Премьера. "Елена Летучая. Без мусора в голове". [16+]
12.00 Новости с субтитрами.
12.20 "Идеальный ремонт".
13.30 "В наше время". [12+]
16.35 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
19.30 Премьера сезона. "Эксклюзив" с Дмитрием Борисовым. [16+]
21.00 Время.
21.20 "Голос 60+". Финал. [12+]
23.30 Премьера. Большой праздничный концерт "25 лет "Авторадио".
1.30 Х/ф "Конвой". [16+]
3.25 Модный приговор.
4.20 "Мужское / Женское". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.40 Местное время. Суббота. [12+]
9.20 Сто к одному.
10.10 "Пятеро на одного".
11.00 Вести.
11.20 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Далёкие близкие" с Борисом Корчевниковым. [12+]
13.00 Х/ф "Призраки прошлого". [12+]
15.00 "Выход в люди". [12+]
16.20 Субботний вечер с Николаем Басковым.
18.00 "Привет, Андрей!" [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Катькино поле". [12+]
1.00 Х/ф "Мой чужой ребёнок". [12+]
3.05 Т/с "Личное дело". [16+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.45 Новости (на баш. яз.).**
**8.00 М/ф "Союз зверей". [12+]**
**9.30 "100 дней до совершенства". [12+]**
**9.45 Посмотрим… [0+]**
**10.15 "У дачи". [12+]**
**10.45 "Большой чемодан. [6+]**
**11.30 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**12.00 Тәмле. [12+]**
**12.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.00 Замандаш. [6+]**
**13.15 Учим башкирский язык. [0+]**
**13.30 Бай баҡса. [12+]**
**14.00 "Дарю песню. [12+]**
**16.00 "Байыҡ-2018". [12+]**
**17.00 Концерт заслуженного деятеля искусств РБ, композитора Урала Идельбаева. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Колесо времени. [12+]**
**20.00 "Песня года". [12+]**
**20.30 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.45 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**21.15 Победить себя… [6+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Посмотрим… [12+]**
**22.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2018". [12+]**
**0.00 Х/ф "Заговорщица". [16+]**
**2.00 Итоги недели (на баш. яз.).**
**2.45 Спектакль "Лекарство от смерти". [12+]**
**4.30 Х/ф "Заговорщица". [16+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 7 ОКТЯБРЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.30 Х/ф "Начало".
6.00 Новости.
6.10 Х/ф "Начало".
7.30 М/с "Смешарики. Пин-код".
7.45 "Часовой". [12+]
8.15 "Здоровье". [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.00 Новости.
10.10 Д/ф Премьера. "Инна Чурикова. "Я танцую с серьезными намерениями". К юбилею актрисы. [12+]
11.15 "Честное слово" с Юрием Николаевым.
12.00 Новости с субтитрами.
12.15 Премьера. Праздничный концерт к Дню учителя.
14.20 "Видели видео?"
16.00 Премьера. "Русский ниндзя". Новый сезон.
18.00 "Толстой. Воскресенье".
19.25 "Лучше всех!"
21.00 Время.
21.20 "Что? Где? Когда?" Осенняя серия игр.
22.30 Д/ф Премьера. "Элвис Пресли: Искатель". [16+]
0.25 Х/ф "На обочине". [16+]
2.50 Модный приговор.
3.45 "Мужское / Женское". [16+]

### РОССИЯ 1

4.50 Т/с "Лорд. Пёс-полицейский". [12+]
6.45 "Сам себе режиссёр".
7.35 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
8.00 Утренняя почта.
8.40 Местное время. Воскресенье.
9.20 Сто к одному.
10.10 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
11.00 Вести.
11.20 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" [16+]
14.00 Х/ф "Можно мне тебя обнять?" [12+]
18.00 "Удивительные люди-3".
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
23.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
0.30 "Дежурный по стране". Михаил Жванецкий.
1.30 Т/с "Пыльная работа". [16+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.45 Новости (на баш. яз.).**
**8.00 М/ф "Фиксики". [0+]**
**8.30 "Йома". [0+]**
**9.00 "Бай". [12+]**
**9.30 "100 дней до совершенства". [12+]**
**9.45 Кумысный путь. [6+]**
**10.00 "Перекличка". [6+]**
**10.15 "Выше всех". [6+]**
**10.30 "Книга сказок". [0+]**
**10.45 Байтус. [6+]**
**11.00 "Сулпылар". [0+]**
**11.30 "Гора новостей". [6+]**
**11.45 Алтын тирма. [0+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз.).**
**13.15 Учим башкирский язык. [0+]**
**13.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**14.00 "Дарю песню. [12+]**
**15.30 Башҡорттар. [6+]**
**16.00 Дорога к храму. [0+]**
**16.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00 Международный фестиваль оперного искусства "Шаляпинские вечера". [12+]**
**19.15 Народный учитель. [12+]**
**19.45 Моя Республика. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 Лидеры региона. [12+]**
**20.45 Имею право. [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15 Специальный репортаж. [12+]**
**22.30 Свидание с джазом. [12+]**
**23.30 Х/ф "Серена". [16+]**
**1.15 Спектакль "Эти свободные бабочки". [12+]**
**3.45 Х/ф "Серена". [16+]**
**5.30 Историческая среда. [12+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**6.45 Учим башкирский язык. [12+]**

*✓ Йәшәү - ул йәшәүгә әҙерләнеү генә. Ысын мәғәнәһендә йәшәй башлайым тигәндә генә, Хоҙай "Ошо йәшәү булды ла инде, хәҙер үлергә ваҡыт" ти.*
*(Кароль Ижиковский).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# УРМАН ХЕҘМӘТКӘРҘӘРЕ БАЙРАМЫ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**38-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Мәләүез. Ҡорал. Сүпрә. Йәйә. Ришүәт. Юрға. Нур. Әләм. Иле. Ватсон. Әсә. Банан. Ғәрәфә. Белдереү. Аэробика. Ниәт. Инер. Алып. Киев. Ай. Роза.

**Вертикаль буйынса:** Юнысова. Йәғәфәрова. Әйбер. Сәйнүк. Олатай. Бил. Лаҡап. Арена. Кипкәр. Әҙәби. Руан. Зөлҡәрнәев. Ғүмәров. Тархан. Үрмес. Тейен. Әхәт.

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

## ПРЕМЬЕРА КӨТӘБЕҘ

**М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры яңы спектакль әҙерләй. Мөҙәрис Багаев пьесаһы буйынса ҡуйылған комедия "Үәт, исмаһам, ахырызаман!" тип атала. Премьера бәләкәй сәхнәлә 12-13 октябрҙә буласаҡ.**

Мөхәббәт хистәре, юмор - беҙ классик комедияларҙа күреп өйрәнгән бөтөн нәмә бар был пьесала. Һаран Харундың ҡылыҡтары уның ғаиләһенә лә йәшәргә ҡамасаулай. Әммә ахырызаман етеп килгәнен белеп ҡалған һаран үҙгәрергә хәл итә. Тамуҡҡа эләкмәү өсөн яҡшы эштәр ҡылырға ҡарар итә ул. Спектаклдә башҡорт труппаһының артистары - Башҡортостандың халыҡ артисы Мәғәфүр Усманов, Башҡортостандың атҡаҙанған артистары Нәғим Нурғәлин, Альбина Кашанова, Зилә Сәйетова, Илсур Хәбиров, Венер Камалов, Зифа Дәүләтбаева һәм башҡалар ҡатнаша. Милли Йәштәр театрының рус труппаһы Зәйнәб Биишеваның "Кәмһетелгәндәр" әҫәре буйынса яңы спектакль әҙерләй. Ул яҙыусының тыуыуына 110 йыл тулыуға һәм Башҡортостандың 100 йыллығына бағышлана һәм БР Башлығы гранты ярҙамында тормошҡа ашырыла. Шулай уҡ миҙгелде асыу ҙа октябргә тәғәйенләнгән. Башҡорт труппаһы миҙгелде 6 октябрҙә "Йәшәгән, ти..." спектакле менән асасаҡ.

## АБРУЙЛЫ ПРЕМИЯ

**М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры Федор Волков исемендәге XIX Халыҡ-ара Волков фестивалендә ҡатнаша.**

Сара сиктәрендә Федор Волков исемендәге РФ Хөкүмәте премияһы тапшырылды. Рәсәйҙең абруйлы театраль премиялары лауреаттары араһында Башҡорт дәүләт академия драма театры ла бар. Премия тапшырыу тантанаһында театрҙың художество етәксеһе Олег Ханов менән театрҙың директоры Иршат Фәйзуллин ҡатнашты. Башҡорт театры был премияға Рәсәй театр сәнғәте үҫешенә ҙур өлөш индергәне өсөн лайыҡ булды. Театр коллективы Ярославлдә Айрат Абушахмановтың "Зөләйха күҙҙәрен аса" спектакле менән ҡатнашты. Фестиваль тамашасыһы спектаклде бик йылы ҡабул иткән, улар артистарҙы алҡыштарға күмгән. Спектакль башҡорт телендә уйналған, тамашасылар өсөн синхрон тәржемә тәҡдим ителгән. Әйткәндәй, "Зөләйха күҙҙәрен аса" спектаклен Мәскәү тамашасыһы киләһе йылда ҡарай аласаҡ.

## СИБАЙҘАР КИЛӘ!

**А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры "Әүлиә" спектакле менән республика буйлап гастролгә сыға.**

Яҙыусы Лира Яҡшыбаеваның "Мөжәүир хәҙрәт" әҫәре буйынса сәхнәләштерелгән спектаклдең режиссеры - Дамир Ғәлимов. Спектакль 12 октябрҙә - Раевка, 13 октябрь - Бүздәк, 14 октябрь - Саҡмағош ауылдарында, 15 октябрь - Дәүләкән ҡалаһында, 16 октябрь - Өфөлә М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында була.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1440 һижри йыл.*

| Октябрь (Мөхәррәм) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 1 (21) дүшәмбе | 5:49 | 7:19 | 13:30 | 17:21 | 18:51 | 20:21 |
| 2 (22) шишәмбе | 5:51 | 7:21 | 13:30 | 17:18 | 18:48 | 20:18 |
| 3 (23) шаршамбы | 5:53 | 7:23 | 13:30 | 17:16 | 18:46 | 20:16 |
| 4 (24) кесе йома | 5:55 | 7:25 | 13:30 | 17:13 | 18:43 | 20:13 |
| 5 (25) йома | 5:57 | 7:27 | 13:30 | 17:11 | 18:41 | 20:11 |
| 6 (26) шәмбе | 5:59 | 7:29 | 13:30 | 17:08 | 18:38 | 20:08 |
| 7 (27) йәкшәмбе | 6:01 | 7:31 | 13:30 | 17:06 | 18:36 | 20:06 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**29 сентябрь "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), Мелодрама 16+
**1 октябрь "Һөйәһеңме, һөймәйһеңме?"** (Ф. Бүләков), трагикомедия 12+
**4 октябрь "Зөләйха күҙҙәрен аса"** (Г. Яхина, Я. Пулинович) 16+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**2 октябрь "Ғәйфи ағай, өйләнә давай!"** (Г. Зәйнәшева), комедия 16+
**4 октябрь "Чиполлино"** (Д. Родари), мажара. Башлана 11.00 0+

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Сентябрь айында тыуған көндәрен билдәләүселәр - **Өфө ҡалаһынан** Миңъямал Йәнбулатова, Алһыу Туктамышева, **Баймаҡ районы** Ҡарамалы ауылынан Мәрзиә Моталова, Икенсе Этҡол ауылынан Гөлназ Азаматова, **Сибай ҡалаһынан** Наҙгөл Мусина һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас ҡотлайбыҙ!

Ғүмер юлығыҙ көҙ миҙгеле кеүек төрлө сағыу төҫтәрҙә балҡыһын, һәр көн тик шатлыҡтар ғына килтерһен, хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ! Ныҡлы сәләмәтлек, рух ныҡлығы, күтәренке кәйеф теләйбеҙ!

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

✓ *Үҙ ғәйебеңдең ниҙә икәнен... балаң үҫкәс белерһең.*

*(Башҡорт халыҡ мәҡәле).*



МИЛЛӘТ БАЛҠЫШЫ

# БАЛАЛАРЫҒЫҘҘЫ...

## халыҡ бейеүҙәренә, ҡурайға ылыҡтырығыҙ



**Сентябрҙә Ҡаҙағстандың Астана ҡалаһында үҙенсәлекле сара үтте. "The Spirit of Tengri" проектының продюсер составы хореография жанрында ижад итеүсе иң-индәрҙе бер сәхнәгә йыйҙы. "The Spirit of Dance" тип аталған был үҙенсәлекле проектта донъяның 14 иленән килгән артистар араһында Башҡортостандан "Guzal-dance" ансамбле солисы Регина Әһелова ла булды. Ошо сара тураһында Регинаның үҙе һәм сараның махсус ҡунағы, "Ҡурайсы" төркөмө етәксеһе, Башҡортостандың халыҡ артисы Роберт Юлдашев менән әңгәмә тәҡдим итәбеҙ.**

**"The Spirit of Tengri" - ул музыка донъяһында киң билдәле сара, унда беҙҙең музыканттар ҙа йыш сығыш яһай. Бейеүселәр фестиваленең төп үҙенсәлеге нимәлә булды?**

**Р. Юлдашев:** Эйе, был халыҡ-ара этно фестиваль алты йыл рәттән үтте, ул ethno-world форматында ойошторола. Географияһына килгәндә, хәҙер унда ҡатнашыусыларҙың һаны 130 илгә еткән, ул Азиялағы иң ҙур фестивалдәрҙең береһе. 6 йыл музыканттар менән эшләгәндән һуң, продюсерҙар составы яңы форматтағы сара уйлаған һәм бер сәхнәлә төрлө милләт бейеүҙәрен йыйғандар.

**Р. Әһелова:** Төрлө халыҡтарҙың матурлығын бейеү аша сағылдырыуҙың мөмкинлеген самалап уйланылған был проект бик уңышлы килеп сыҡты. Дөрөҫөн әйткәндә, ошо йүнәлештә донъя кимәлендә беренсе тапҡыр эксклюзив шоу үткәрелде. Минеңсә, уның төп идеяһы булып йәштәргә милли бейеүҙәрҙе күрһәтеү, киләсәк быуында халыҡ бейеүҙәренә ихтирам һәм һөйөү уятыу. Өс көн буйына беҙ репетициялар үткәрҙек. Ә фестиваль үҙе Гала-концерт форматында бер көндә үтте. Мең ярымлыҡ урынлы мәҙәниәт йорто шығырым тулы булды. Хатта Ҡаҙағстанда йәшәгән таныштарыбыҙ был фестивалгә эләгә лә алманы, сөнки билеттар алдан һатылып бөткәйне. Йәғни, музыканттар араһында ойошторолған фестивалдең урынындағы тамашасы араһында абруйы шул тиклем ҙур, уны халыҡ көтөп ала. Бейеү фестивале лә уларҙа ошолай уҡ хистәр һәм тойғолар уяткандыр, моғайын. Һәр хәлдә, беҙ, ҡатнашыусылар, был сығыштарҙан оло кинәнес һәм дәрт алдыҡ.

**Р. Юлдашев:** Мең ярым тамашасыға төрлө бейеүҙәр нисек тәьҫир итә - был, ысынлап та, эксперимент булды. Мин бер нәмәгә инанып ҡайттым, бороңғо бейеүҙәргә, быуаттар төпкөләнән килгән хәрәкәттәрҙә сихри бер бәйләнеш бар һәм ошо рухи бәйләнеш кешеләрҙең тышҡы ҡиәфәтендә лә сағылыш таба. Бер генә миҫал: "Guzal-dance" ансамблендә бейергә өйрәнергә теләүсе ҡыҙҙар күп килә. Ир-егет күҙлегенән уларға иғтибар ҙа итмәйһең башта, а берәй өс ай үтеү менән шул уҡ ҡыҙҙың артынан әйләнеп ҡарап ҡалғы килә. Эске үҫеш тышҡы ҡиәфәткә лә сыға.

Фестивалдә шуға ла миңә ҡатнашыусыларҙың ниндәй бейеүҙәр бейеүе, уларҙың тышҡы йөҙөн күҙәтеүе ҡыҙыҡ булды. Заманса пластика хәрәкәттәрен күҙ алдына килтерегеҙ, улар нисектер өҙөк, уларҙа гармония, бөтөнләк юҡ. Бейеүселәре менән аралашаһың, уларҙың йөҙҙәрендә лә нур юҡ. Беҙҙең ҡурайыбыҙ, йыр-моңдарыбыҙ, бейеүҙәребеҙ иҫ киткес - ата-бабаларыбыҙ беҙгә оло ҡомартҡы ҡалдырғанлығын яҡшыраҡ аңлайһың бындай сараларҙа.

**Башҡорт халҡын фестивалдә "Заһиҙә" бейеүе аша һынландырғанһығыҙ. Рәшиҙә Туйсинанан һуң был бейеүҙе башҡарыу өсөн дә ҡыйыулыҡ кәрәктер?**

**Р. Юлдашев:** Фестивалде ойоштороусылар Башҡортостандан бейеүселәрҙе саҡырыр алдынан күп кенә материалдарҙы ҡараған. Регина башҡарыуындағы "Заһиҙә"не улар үҙҙәре һайлап алды.

Хөкүмәт концерттарында Рәшиҙә апай Туйсинаны ла бейетергә насип булды миңә. Әммә һәр бейеүсенең үҙ "Заһиҙә"һе. Һәр бейеү үҙенсәлекле, ҡабатланмаҫ. Был да асыш булды миңә - был бейеүселәрҙең "Заһиҙә"һе һәр береһенеке үҙенеке. Регинаның бейеүендә заманса динамика, хәрәкәттәрендә тулылыҡ, арбау көсө бар. Бороңғо бейеүҙәрҙе башҡарғанда, ғәҙәттә, тамашасы тын да алмай ҡарай. Был юлы зал бейеүҙең уртаһында уҡ ҡул саба башланы. Быны ла мин беренсе тапҡыр күрҙем.

**Р. Әһелова:** "Заһиҙә" башҡорт бейеүенең иң гүзәл һәм нескә өлгөләренең береһе. Рәшиҙә апайҙы һәм уның ижадын ныҡ хөрмәт итәм. Һис шикһеҙ, уның "Заһиҙә"һе беҙҙә лайыҡлы рәүештә арбуй ҡаҙанған һәм был бейеү ошо бейеүсенең исеме менән бергә йәшәүенә күнеккәнбеҙ. Ғөмүмән, ниндәй бейеүебеҙҙе генә алма, уларҙың һәр береһендә ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың эске дәрәжәһе, сафлығы, баҫалҡылығы сағыла. Был, ысынлап та, фестивалдә асыҡ күренде.

**Р. Юлдашев:** Башҡорт бейеүенә булған һөйөүем тағы ла артып ҡайтты был фестивалдән. Ниндәй бөйөк ҡомартҡыларыбыҙ бар икәнен аңлаһаҡ ине. Ер менән Күк тоташты тиҙәр бит, бороңғо бейеүҙәрҙә бына ошо рух, энергия күтәрелешен тояһың. Заманса пластиканың бороңғо бейеүҙәрге кеүек тамыры юҡ, шуға ла ул тамырынан өҙөлгәндән һуң һулыған гөл менән бер. Балалар тәрбиәләүсе милләттәштәр балаларын халыҡ бейеүҙәренә, ҡурайҙа уйнарға өйрәтһен ине. Сөнки улар аша башҡорт теленә һөйөү тәрбиәләнә. Минең йырлай белгән, ҡурайҙа уйнаған бер нисә класташым бар, уларға ҡарайым да, уларҙың үҙ башҡорт халҡына һөйөүе лә ныҡыраҡ икәне күренә, башҡарған эштәре лә был турала дәлилләй. Телебеҙ йәшәһен тиһәк, башҡорт йырҙарына, бейеүҙәренә, ҡурайына яҡын булайыҡ.

**Ләйсән ДАЯНОВА яҙып алды.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АҘЫРАҠ БИРЕРГӘ,

## күберәк алырға тырышабыҙ ҙа ул...

Үҙ ғәйебеңдең ниҙә икәнен... балаң үҫкәс белерһең.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Тормошта үҙ урыныңды тапҡанһың икән, уның... бушағанын көтөп тор.

**(Михаил Генин).**

Беҙ ғүмер буйы аҙыраҡ бирергә һәм күберәк алырға тырышабыҙ, шунан иһә, тормош беҙҙе алданы, тип зарланабыҙ.

**(Антоний Лесьневский).**

Йәшәү - ул йәшәүгә әҙерләнеү генә. Ысын мәғәнәһендә йәшәй башлайым тигәндә генә, Хоҙай "Ошо йәшәү булды ла инде, хәҙер үлергә ваҡыт" ти.

**(Кароль Ижиковский).**

Үҙ ихтыярың менән етәкселек итә алмаһаң, башҡалар менән дә етәкселек итә алмаҫың.

**(Гарриет Стоу).**

Кәртәнең теге яғындағы үлән һәр ваҡыт йәшелерәк була.

**(Инглиз мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ишәк ҡоҙоҡҡа ҡолап төшә лә, ярҙамға саҡырып, ҡысҡыра башлай. Уның ҡысҡырыуын ишетеп, хужаһы йүгереп килеп етә. Ләкин ишәкте ҡоҙоҡтан һөйрәп сығарыу мөмкин булмай. Шунан хужа ошондай ҡарарға килә: "Ишәгем ҡарт инде, күп йәшәргә лә ҡалмаған, йәш ишәк һатып алырға күптән йыйынам. Был иҫке ҡоҙоҡто ла күмеп ҡуйырға ниәтләнә инем. Ярай, бер юлы ике эште аткарып ҡуйыйым, ҡоҙоҡто ла күмәйем, ишәгемде лә ерләйем..." Шулай уйлаған да хужа, ярҙамға кешеләр саҡырып, ҡоҙоҡто күмдерә башлаған. Ҡоҙоҡ эсенә тупраҡ ташлаған ыңғайы ишәк тағы ла яманыраҡ итеп ҡысҡыра тотонған. Шунан тынып ҡалған. Хужа ҡоҙоҡ эсенә күҙ һалһа, ни күрә: ишәк өҫтөнә ташланған тупраҡты һелкеп бәрә лә, аяҡ аҫтына һалып тапай, ти. Күпмелер ваҡыттан һуң хайуан ҡоҙоҡтоң өҫтөнә уҡ килеп сыҡҡан һәм ергә һикергән... Бына шулай, һинең өҫтөңә лә көн һайын әллә күпме ауырлыҡтар ишерелеп кенә тора. Һин дә уларҙы өҫтөңдән һелкеп алып ташлай һәм өҫкә күтәрелә алаһың. Һәр проблема - тормош һиңә табан бараҡтырған таш. Әммә шул таш өҫтөнән атлап, көслә ташҡын аша атлап сығып була икәнен дә онотма. Быны өсөн ошо ябай ғына ҡағиҙәләрҙе үтәү ҙә етә: йөрәгеңде нәфрәттән арындыр һәр барыһын да ғәфү ит; йөрәгеңде борсолоу-тулҡынланыуҙарҙан арындыр - уларҙың күбеһе файҙаһыҙға; булғаны менән ҡәнәғәтләнеп йәшәргә тырыш; күберәкте бир; аҙыраҡты көт".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 28 сентябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4077
Заказ - 1717/09